ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 апрель (алағарай) 2020

№ 14 (900)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Барыһы ла үтә...**

Был да үтер!



6-7

**Башҡорт шәжәрәләре лә...**

халҡыбыҙҙың милли бренды ул



8-9

**Ата-бабам һөнәре -**

ҡош сөйөү



10

**Һигеҙ охмаж асҡысы**



12-13

**ТВ-программа** 14

***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 1 апрелдән 2020 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 694 һум 34 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, бүләккә китаптар, календарҙар алыу мөмкинлеге тураһында ла онотмағыҙ. Почта хеҙмәткәрҙәре өсөн дә матур бүләктәр әҙерләнә. Бергә булайыҡ!***

УРА!

# ШАЙМОРАТОВ - РӘСӘЙ ГЕРОЙЫ!

**Генерал Миңлегәли Шайморатов үлгәндән һуң Рәсәй Президенты Владимир Путин Указы менән Рәсәй Геройы йондоҙо менән бүләкләнде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙ сәхифәһендә оло ҡыуанысла яңылыҡ менән уртаҡлашты.**

"...Беҙ барыбыҙ ҙа бала саҡтан легендар комдив Миңлеғәли Шайморатов хаҡында беләбеҙ. Уның биографияһы иҫ китмәле. Бер киносценарист та былдай ғүмер юлын яҙа алмаҫ ине - хәрби, мажаралы һәм бер үк ваҡытта шул тиклем фажиғәле. Генерал Шайморатов дивизияһындағы һымаҡ Советтар Союзы Геройҙары һаны бөтә СССР армияһының ике хәрби подразделениеһында ғына булған.

Уның һыбайлылары дошмандың ҡотон алған. Шулай уҡ һуңғы походта ла. Дивизия байрағын ҡотҡарыусылар төркөмө менән бергә сигенһә, Шайморатов иҫән ҡалыр ине. Ләкин ул һуңғы алышты ҡабул итеүҙе һәм күҙгә күренеп килгән әжәлде үҙенең түп көстәре менән ҡаршы алыуҙы өҫтөн күрә... Оҙаҡ йылдар уның ҡаһарманлығы тейешенсә баһаланманы, сөнки үлеменең шарттары билдәле түгел ине, ә регламент буйынса - барыһы ла асыҡланырға тейеш. Һәм бына хәҙер Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостанда йәшәгән бер нисә быуындың берҙәм теләген хупланы. Һәм бик һирәк була торған бойороҡ ҡарар ҡабул итте: Миңлеғәли Шайморатов Рәсәй Геройы йондоҙо менән бүләкләнде.

Тотош Ер шарына ҙур һынауҙар килгән йылда бының тормошҡа ашыуы үҙе бер символик мәғәнәгә эйә төҫлө. Был донъяла бер нәмә лә юҡҡа түгел. Уйланырға мәжбүр итә. Беҙгә данлы тарихыбыҙ эргәһендә берләшергә кәрәк. Бөйөк кешеләрҙең лайыҡлы вариҫтары булайыҡ - был бик мөһим. "Салауат Юлаев вариҫтары артҡа сигенмәй!" тип ҡабатлаған генерал Шайморатов үҙенең яугирҙарын яуға күтәргәндә. Беҙ ҙә бер ҡасан да, бер ниндәй ҡурҡыныс дошман алдында ла, 21-се быуаттың бер ниндәй эпидемияһы алдында ла баш бирмәбеҙ".



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәшәйешебеҙгә торған һайын ныҙыраҡ үтеп ингән барған ялған хәбәр һәм мәғлүмәттәр һөжүменән хәҡиҡәттән нисек айырырға?

*Таңһылыу ВӘЛИЕВА, педагогика ветераны, Баймаҡ районы Байым ауылы:* Тарихтан беләбеҙ: власҡа килгәс, Советтар иң тәүҙә ваҡытлы матбуғат баҫмаларын "йүгәнләп" ала. Тыйыу-сикләүҙәр, ҡайһы бер гәзиттәрҙе ябып ҡуйыу кеүек ҡәтғи саралар күрелә. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда матбуғат, әҙәбиәт өлкәһендә цензура көсәйтелә. Был, бәлки, заманына күрә дөрөҫ сара ла булғандыр, сөнки һуғыш осорондағы ауырлыҡтарҙы, көс еткеһеҙ ҡайғы-хәсрәттәрҙе сағылдырыу былай ҙа көсөргәнешле ысынбарлыҡты тағы ла тәрәнәйтә төшөр һәм икеләтә түҙеп торғоһоҙ итер ине. Бөгөнгө киң мәғлүмәт араларын алып ҡараһаҡ, бына уларға ҡарата ниндәйҙер сара күреүсе юҡ әле. Уларҙың ҡайһы берҙәренең ысын йөҙө ил һәм мир өҫтөнә килгән бәлә мәлендә айырыуса ныҡ фашланды ла ҡуйҙы бит. Был коронавирус тигән дошманды тағы ла ҡурҡыныраҡ итеп күҙ алдына баҫтыра башланы улар! Беренсенән, ниндәйен дә ҡот осорғос сир был, күпме кеше үлгән, күпмеһе үлем хәлендә, әммә бер ниндәй ҙә дарыу ҙа, вакцина ла тиҙ арала булмаясаҡ һәм башҡа, һәм башҡалар... Халыҡ араһында паника тыуҙырыу, ярыша-ярыша кемуҙарҙан типик булмаған айырым осраҡтарҙы дөйөмләштереп күрһәтергә маташыуҙар меҫкен рәсәйлене магазин кәштәләрен "таҙартып", тамам мөйөшкә ҡыуып индерҙе түгелме? Бушаған кәштәләр тиҙ арала йәнә аҙыҡ-түлек менән тулды (шөкөр, келәттәрҙә запас бар!), ә ТВ тапшырыуҙары һаман булһа шул буш кәштәләргә күрһәтеп, халыҡты ҡурҡытыуын дауам итә. Ә интернет сайттарында күпме ҡурҡыныстар йәшәй бирә! Йәнәһе, бөтөн пенсионерҙар ҡырылып бөтәсәк; коронавирустан өҙләгәп, пневмония менән ятҡандар ҙа үлемгә дусар, имеш, сөнки үпкәләрҙе яһалма елләткес аппараттар етешмәй; араҡы менән тәмәке, имеш, вирустан һаҡлай; коронавирус банан һәм башҡа ситтән килтерелгән емешеләк аша йоғоуы бар; Ҡытайҙан алынған посылкаларҙа вирус һаҡлана һәм башҡа шундай мифтар уйлап сығарыла. Бындай уйҙырмалар авторҙарын табып, уларға ялған таратыуҙары өсөн административ яза биреү кәрәк ине күптән. Ил президенты ошо көндәрҙә ялған мәғлүмәттәр таратыусыларҙы административ һәм енәйәт яуаплылығына тарттырыу тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Теләһә ниндәй ялғанды дөрөҫлөктән айырыр өсөн күп белергә, уҡырға кәрәктер ул. Һис юғында, табиптарға, башҡа белгестәргә "Ҡыҙыу линия" телефондары аша һорауҙар биреп тә асыҡларға була, тик паникаға бирелеп барырға түгел. Кемдер әйткән бит, юғиһә: вирусҡа ҡарағанда паника хәүефлерәк, тип. Һаҡланыу сараларын теүәл үтәп, иғтибарлы һәм тәртипле булырға, күп халыҡ йыйылған ерҙәрҙә булмаҫҡа, үҙеңде ыңғайға көйләү, иммунитетыңды нығытыу сараһы күреү ярҙам итәсәк, тип яҙалар бит, шуларға ҡолаҡ һалайыҡ, ә күрәләтә ялғанға түгел.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

***✓ Улар күберәк социаль селтәрҙәр һәм мессенджерҙар аша эш итә. Бындай күренеш "инфодемия", йәғни аңралыҡ һәм яуыҙлыҡ вирусы тип атала. Ундайҙар ялған хәбәр таратып, шул хәлдән үҙҙәренә ниндәйҙер файҙа алырға маташа.***



БЫНАҒАЙЫШ!

# БИТЛЕКТӘР...

## битһеҙҙәр ҡулында



**Баш ҡалабыҙ Өфөлә генә түгел, тотош ил аптекаларында ла коронавирустан иң беренсе кәрәкле һаҡланыу сараһы иҫәпләнгән антисептиктар һәм битлектәрҙе көндөҙ шәм яндырып эҙләһәң дә табырмын тимә бөгөн. Аптекаларға нисә инһәң дә яуап бер: "Юҡ..."**

Ғәжәп, ә бит шул уҡ ваҡытта телетапшырыуҙарҙа әле был, әле теге предприятиела битлектәр етештереү буйынса цехтар эшләй башлауы тураһында хәбәр итеп торалар. Көнөнә, аҙнаһына шунса мең, хатта миллион дана ошо изделие етештереүсе ойошмаларҙың продукцияһы һыуға һалғандай юҡҡа сығып тик тора. Уның хатта ошоға тиклем бер генә данаһын да күреү бәхетенә ирешкән юҡ әле. Әлбиттә, бындай медицина тауарҙары менән иң беренсе сиратта дауаханалар тәьмин ителеүе лә аңлашыла, ләкин унан ҡала аптекалар өлөшө лә бар бит.

Ҡайҙа була һуң был күҙгә күренмәҫ тауарҙар? Хәйер, бының ниməһенә аптырарға: урлашыу юлы менән байыға, алыпһатарлыҡ сәскә атҡан заманда йәшәүебеҙҙе лә онотоп китмәйек. Берәүҙәр сирләй, икенселәр шунан файҙаланып, байығып ҡалыу яйын ҡайғырта. Ысынлап та, һиҙенеүҙәр бушҡа булманы: битлектәр... ана шундай битһеҙҙәр ҡулында! Бындай хәлдәрҙең береһен 28 мартта Рәсәй-24 телеканалының "Дежур хәбәрҙәр" тапшырыуы ла фашлап сыҡты. Республика хоҡуҡ һаҡсылары бындай йылғыр әҙәмдәрҙе әле ҡулдарынан эләктергәне юҡ, ә бына Мәскәүҙә шундайҙарҙың береһе бөтөн илгә фаш ҡылынды. Алыпһатар юғары класлы респираторҙарҙы - 1,5 меңгә, икенсе төрлө арзанырақтарын - 165 һумға, ә ябай 3 һумлыҡ битлектәрҙе 13 һумға фатирҙар буйлап һатып йөрөй. Бының алыпһатарға күпме файҙа килтереүен ябай ғына миҫалдарҙа иҫәпләп тә сығарҙылар хатта. Көн дә етештерелеүсе миллионлаған битлектәрҙең юҡҡа сығып тороуына ҡарағанда, бик яҡшы аңлашыла: алыпһатарҙар уны ҡайһылыр этапта - йә етештереүсенән, йә аптекаларҙан тулайым һатып ала ла файҙаһын күрә.

Икенсенән, бындай шөғөл бер битлектәргә генә ҡағылмай. Бактерия-микробтарҙы зарарһыҙландырыусы гель һәм шыйыҡсалар менән дә шундай уҡ хәл. Мәҫәлән, яңыраҡ Силәбенән берәүҙең тоннаға яҡын антисептик тейәп, Ҡаҙағстанға юлланған машинаһы туҡтатыла. Урамдарҙан рупор аша граждандарҙы туҡтатып йөрөгән полиция хеҙмәте нинә иң беренсе сиратта әлеге енәйәтселәрҙе туҡтатмай һуң? Ә ни өсөн аптекаларҙа битлек һәм респираторҙар кеше башына иҫәпле генә тәртиптә һатылмай, ә кем өлгөрә, шул күпләп ала бирә?

Кемдең кемлеге бәлә килгәндә һынала. Башҡалар ҡайғыһы төштән һуң тип ҡаралған заманда йәшәйбеҙ шул. Һуғыш ваҡытындағы бер һыныҡты бишкә бүлешеп ашаған атай-әсәйҙәребеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙҙең кешелеклелек гендары бөгөнгө быуындар ҡанына һеңеп бөтмәгән, күрәһең. Бер-берендә хәстәрләү, үҙ-ара ярҙам, миһырбанлыҡ тойғолары бик һирәк осрай бөгөн. Ә битлек мәсьәләһенә килгәндә, беҙҙең халыҡ, шөкөр, аптырап ҡала торғандарҙан түгел, бөтмөр ҙә, зирәк тә бит ул. Күптәр ана шул битлекте үҙҙәре тегеп тә алған инде. Тик, берүк, уларҙың кәрәге генә теймәһен, дөрөҫөрәге, сир генә теймәһен , ситләтеп үтә күрһен ине беҙҙе. Яҡты уйҙа, яҡшыға көйләнештә булайыҡ. Был да үҙенә күрә сирҙән бер сара, дауа, тиҙәр бит...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Йәшәйешебеҙгә торған һайын нығыраҡ үтеп инә барған ялған хәбәр һәм мәғлүмәттәр һөжүмен хәҡиҡәттән нисек айырырға?



(Башы 1-се биттә).

***Фәнил КҮЗБӘКОВ, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры:*** Бөгөн, ысынлап та, мәғлүмәт етерлек, ошо "өйөрмә"лә әҙәм балаһы хатта юғалып ҡала: хәбәрҙәрҙең ысынбарлыҡҡа тап килгәнен ялғандан нисек айырып алырға? Бының өсөн хәбәрҙар булырға кәрәк, һәр нәмәгә ҡарата үҙ фекерең, ҡарашың булырға тейеш, әгәр шулай булмаһа, ялғанды хәҡиҡәттән айырып алыуы бик ҡыйынға тура киләсәк. Был йәһәттән мин айырыуса йәштәр өсөн борсолам, сөнки хәлдең айышына төшөнмәйенсә, өҫтән-мөҫтән фекер йөрөтөп кенә дөрөҫ йүнәлеш табыу мөмкин түгел. Мәғлүмәттәрҙең күплеге, бер яҡтан, шуның менән дә бәйле: киҫкен проблемаларҙан халыҡты албырғатырға, төп мәсьәләләрҙән ситкә йүнәлтергә маташыу һәм айырым төркөмдәрҙең үҙ мәнфәғәттәрен ҡайырыуы. Мәҫәлән, коронавирус менән бәйле интернетта шундай бер мәғәнәһеҙлек - фейк пәйҙә булды: йәнәһе лә, тәмәке тартҡан кешеләр коронавирусҡа бирешеп бармай, имеш. Бер яҡтан, бындай хәбәр әҙәм көлкөһө булһа, икенсе яҡтан, эксперттар уны шундуҡ тәмәке, сигарет етештереүсе эре транснациональ корпорациялар тарафынан яҡшы ғына түләнгән пиар-реклама ишараты тип баһаланы. Ни өсөн әҙерлекһеҙ кеше әлеге мәғлүмәт "өйөрмәһе"ндә буталып ҡала? Сөнки теге йәки был ситуацияны, йә булмаһа, сит илдәрҙә барған хәлдәрҙе ул объектив күҙ алдына баҫтыра алмай; уның "кухняһын" белмәй, ә әлеге лә баяғы ялғанды хәбәр итеүсе ышанысһыҙ һәм намыҫһыҙ, "популяр" сығанаҡтарҙан уҡып ҡына фекер йөрөтә, уларға таянырға мәжбүр була. Ошо сәбәпле башҡа төрлө мәғлүмәт биреүсе киң мәғлүмәт сараларына ышаныс кәмей.

Хәҡиҡәтте табырға теләгән кеше бер генә түгел, ә күп сығанаҡтарға иғтибар итәсәк. Бая әйткәнемсә, объектив фекер туплау өсөн әҙерлекле булырға кәрәк. Был һәр өлкәгә: фән, сәйәсәт, иҡтисад, тарих, социология, мәҙәниәт, шулай уҡ йәшәйешебеҙгә лә ҡағыла. Үкенескә, беҙҙә ҡайһы бер фән тармаҡтары өлкәһендә, әйтәйек, быңа социология буйынса фәнни хеҙмәттәр, күҙәтеүҙәр, монографиялар юҡ кимәлендә йә булмаһа, ул мәғлүмәттәр төрлө халыҡ ҡатламдарына тейешенсә еткерелмәй. Һөҙөмтәлә хәҡиҡәт ябай кешегә теге йәки был рәсми йыйындарҙа, осрашыуҙарҙа ғына мәғлүм булыуы ихтимал, тик унда ла бит халыҡтың күпселеге йөрөмәй, ситтә ҡала. Мәҫәлән, шул уҡ гәзит-журнал, китап уҡыусылар менән осрашыуҙарҙы алғанда ла был асыҡ күренә: күптәр бөгөн үҙебеҙҙең башҡорт телендәге матбуғатты йә яңы китаптарҙы алдырмай, уҡымай. Минеңсә, объектив ысынбарлыҡ һәм хәҡиҡәтте сағылдырған мәғлүмәттәрҙе үҙебеҙҙең республика баҫмалары араһында ла табырға була, тип уйлайым.

***Фәрхетдин ИШМЫРҘИН, хеҙмәт ветераны:*** Мин үҙем былай гәзит тә уҡып барырға, телевидение тапшырыуҙарын да (бигерәк тә ижтимағи-сәйәси темаларға бәхәс-дискуссияға ҡоролғандарын) ҡалдырмай ҡарап барырға тырышам. Рәсәй-1 һәм 1-се ТВ каналдарынан иһә яңылыҡтарҙы ҡарағанда улар биргән мәғлүмәттәрҙе башҡа сығанаҡтар йөкмәткеһе менән сағыштырып, күп ваҡыт тәнҡит күҙлегенән баһаларға тырышам, сөнки хәҡиҡәттең асылына барып етеү өсөн илдәге һәм халыҡ-ара хәлдәр менән бер аҙ таныш булырға кәрәк, шунһыҙ төп башына ултыртып ҡуйыуҙары ла бар. Бөгөн айырыуса интернет хәбәрҙәренә тәнҡит күҙлегенән ҡарарға кәрәк. Ҡайһы бер сайттар һәм блогерҙар айырыуса сама, сик тигән нәмәне юғалтты. Был коронавирусҡа ҡағылышлы хәлдәргә мөнәсәбәттә асыҡтан-асыҡ күренде. Был хаҡта яңыраҡ республикала коронавирус таралыуға ҡаршы ойошторолған оператив штаб ултырышында БР Башлығы Радий Хәбиров, беҙ дошмандарса мөнәсәбәттәге мәғлүмәти һөжүмгә ҡаршы көрәш алып барабыҙ, тип белдерҙе. Шуға бәйле ул халыҡ араһында ғауға, хәүеф-ҡурҡыу тойғоһона сәбәпсе булырҙай ялған мәғлүмәттәр менән һаҡ булырға саҡырҙы. Бындай мәғлүмәт ағымы ике юл менән килә, тине ул: хәбәр һатырға ятраҡан бушбоғаҙҙар һәм аҡылы самалы булған әҙәмдәр. Ләкин шул уҡ ваҡытта ялған хәбәрҙәрҙе махсус һәм маҡсатлы рәүештә яман уй менән дә таратыусылар бар. Улар күберәк социаль селтәрҙәр һәм мессенджерҙар аша эш итә. Бындай күренеш хәҙер "инфодемия", йәғни аңралыҡ һәм яуыҙлыҡ вирусы тип атала икән. Ундайҙар ялған хәбәр таратып, шул хәлдән үҙҙәренә ниндәйҙер файҙа алырға маташа. Ана шундайҙар тоҙағына эләкмәйем, тиһәң, әлеге оператив штабтың рәсми мәғлүмәттәренә һәм халыҡ араһында ихтирам менән файҙаланған ҡайһы бер киң мәғлүмәт саралары хәбәренә генә ышанаһың инде. Мин үҙем фекер һәм ҡараштарымды дөрөҫләү өсөн төрлө мәғлүмәт сараларына мөрәжәғәт итеүҙе хуп күрәм: республика баҫмаларын, һирәкләп булһа ла "Коммерсант", "Известия" гәзиттәрен ҡараштырып алам, радионан иһә даими рәүештә "Эхо Москвы", "Бизнес FM" каналдарын тыңлайым. Шулай итеп тупланған мәғлүмәттәрҙе анализлау нигеҙендә ниндәйҙер фекергә киләһең. Бер һүҙ менән әйткәндә, абруйлы иҫәпләнгән төрлө сығанаҡтарға, эксперттар сығышына таянып, бер аҙ башты эшләтһәң, ялғандың асылы әллә ҡайҙан уҡ танылып тора ул.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 3 апрелгә ҡарата - 106 кеше коронавирусҡа шик менән стационарға һалынған. COVID-19 раҫланған сирлеләр һаны - ун кеше. Биш кеше һауығып сыҡҡан. Рәсәйҙә ошо датаға барлығы 4149 кешенең коронавирусҡа шик менән стационарға һалыныуы, 34 кешенең вафаты, 281 кешенең һауығып сығыуы тураһында хәбәр ителә.

✓Рәсәй Президенты Указына ярашлы, яҙғы саҡырылыш хәрби хеҙмәткә алыу 2020 йылдың 1 апреленән 15 июленә тиклем үтәсәк. Хәрби часҡа килгән яңы һалдаттарға 14 көндән дә кәм булмаған карантин саралары ойошторраласаҡ, сәләмәтлектәрен дә кәмендә 3 тапҡыр тикшереп торасаҡтар. Беренсе төркөмдө оҙатыу 20 майға планлаштырылған. Хәрби хеҙмәтен тамамлаусыларҙы хеҙмәттән бушатыу эше Рәсәй Федерацияһы закондарына ярашлы теүәл үтәләсәк.

✓Өфө ҡала хакимиәте тарафынан Өфө ҡала округы территорияһында пропуск системаһы эшләүе тураһында Положение әҙерләнде. Ҡала предприятиелары һәм ойошмалары етәкселәре ошо осорҙа туҡтауһыҙ эшләргә тейеш хеҙмәткәрҙәр исемлеге яҙылған документ әҙерләргә һәм шунда уҡ хеҙмәткәрҙең шәхесен раҫлау өсөн кадрҙар бүлегенең телефон номерын күрһәтергә бурыслы. Бәйләнеш өсөн телефондар: 8 - 917-800-37-68, 8-917-800-37-53.

✓Яңы коронавирус инфекцияһы таралмаһын өсөн Өфөлә юлдарҙы дезинфекциялау эше алып барыла. Көн һайын тиҫтәләп машина ҡала урамдарын һәм йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән юлдарҙы йыуып үтә. Шулай уҡ көн дә дезинфекциялаусы иретмә менән туҡталыштар һәм юл инфраструктураһы объекттары, парктар һәм ял итеү урындары, уйын һәм спорт майҙансыҡтары эшкәртелә, йорт подъездары, баҫҡыс яндауырҙары, ишектәр, ишек тотҡалары, лифт төймәләре дезинфекциялана.

✓Республика һәм сит өлкәләр араһында транспорт бәйләнештәре туҡтатыла, республиканың тораҡ биләмәләре араһында автобус рейстары һаны мөмкин тиклем кәметелә. Шәхси таксиҙарға ла яңы эш режимы төҙөргә тәҡдим ителә. Әммә Өфөгә инеү һәм сығыу юлдары тулыһынса ябылмай. Граждандар оло йәштәге туғандарына аҙыҡ-түлек алып барыу йәки башҡа ашығыс мәсьәләләре буйынса иркле йөрөй ала.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЙӘШЕРЕН ТЕМАЛАРҒА ЛА...



## һөйләшәйек. Иҫкәртәйек бәләне!

**Гәзитебеҙҙең 13-сө һанында сыҡҡан "Хоҙай киҫәтеүелер был" тигән мәҡәләлә был тема ла телгә алына: "Хәҙер инде бер кемгә лә сер түгелдер: донъябыҙҙа енси аҙғынлыҡтың, бигерәк тә гомосексуализмдың киң таралыуы, наркомандарҙың, әхлаҡ ҡанундарын һанға һуҡмаусыларҙың ишәйеүе кешенең иммун дефициты сирен (СПИД) барлыҡҡа килтерҙе лә инде. Ә шул сир тап билдәле бер вирустың кеше организмына үтеп инеп, уның барса башҡа сирҙәргә ҡаршы тора алыу һәләтен юҡ итә бит! Хоҙай язаһы түгелме ни был?" - ти Бәҙри Әхмәтов.**

Эйе, йәмғиәтебеҙҙә ниндәйҙер йәшерен, тел менән әйтелмәй, әйтелгәндә лә шыбырлап ҡына һөйләнә торған темалар бар. Һәм шул темаларҙың береһе - бер енесле әҙәмдәрҙең ҡауышыуы, "һөйөүе". Үкенескә ҡаршы, хәҙер беҙҙә лә "ҡайҙалыр сит илдә" йәки "шул-шул яҡтарҙа" тип түгел, ә "үҙебеҙҙең арала" тип кенә һөйләнә был тема. Был ят һәм ҡырағай йәшәү рәүеше беҙҙекеләрҙе лә юлдан яҙҙыра. Был хаҡта хатта яҙыуы ла ерәнгес һымаҡ, әммә алдыбыҙға килеп баҫҡан проблеманы күрә-таный белергә һәм йәш балаларҙы унан йолоп алып ҡалыу сараһын күрергә кәрәк.

Ир-егеттәр араһындағы артыҡ йылы хистәр һәм яҡын бәйләнеш бер бөгөнгө заман афәте генә түгел, әлбиттә. Әле бик боронғо яҙмаларҙа уҡ был күренештең булыуы һәм хатта норма сиктәрендә итеп ҡабул ителеүе теркәлә. Тора-бара иһә, кешелек быньң Хоҙай язаһы ала торған оло гонаһ икәнен аңлай башлай. Мәҫәлән, Франция, Италия илдәрендә гомосексуалистарҙы утта яндыралар, бөтөн байлығын тартып алалар, юғары чин кешеләрен рисуай итеп урамда йөрөтәләр һәм үлем язаһына тарттыралар. 1861 йылда был хөкөмдө еңеләйтеп, ғүмерлек һөргөн, унан ары 10 йыллыҡ төрмә менән алмаштыралар. 1960 йылдарҙа гомосексуализм психик тайпылыш ауырыуы итеп иҫәпләнһә һәм хатта шундай диагноз ҡуйылһа, 1973 йылда Америка психологтар ассоциацияһы тарафынан "аҡлана". 1991 йылда инде Бөтә Донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы уны ауырыуҙар теҙмәһенән сығарып ташлай. Йәғни, ул ауырыу түгел, ә ...әлегә ғалимдар был йомаҡтың серен сисә алмаған. Шулай ҙа гендарҙың һәм ҡарындағы яралғы үҫешенең гормональ үҙенсәлеге итеп ҡарала. Ҡайһы бер фекерҙәр буйынса, ҡатындың ауырлы саҡтағы гормональ боҙолоуҙан (гормональное расстройство) да булырға мөмкин икән. Бөгөнгө көнгә килеп еткәндә инде, күп илдәрҙә был халыҡҡа "йәшел" юл асылды. Хәҙер улар парлаша ла, ғаилә ҡора ла, бала аҫрай ҙа алалар...

Тотош йәмғиәттең ошо сиргә дусар булыуы - әхлаҡ проблемаһылыр. Һәм был проблема бөгөн беҙҙә лә сәскә ата. Идеялар, юғарыраҡ уй-хыялдар һәм башҡа ҙур, күҙгә күренгән нәмәләр артынан сабып, шулар өсөн айҡашып, милләт араһына ошо ҡорттоң килеп төшкәнен дә һиҙмәйбеҙ, күрәһең. Шулай булмаһа, бөтөн ил алдына баш ҡалабыҙҙан телетапшырыуҙа ҡатнашыуға үҙен ҡыҙ итеп күрһәткән егет сығыр инеме лә, Инстаграм тултырып милләтен "башҡорт" тип күрһәтер инеме? Эйе, былар бөгөнгө кеше хоҡуғы, уны тыйыр, сикләр әмәл юҡ...

Һуңғы йылдарҙа йәштәр, үҫмерҙәр араһында енесте алмаштырыуҙы, үҙ енесен ҡабул итмәүҙе, енестәр араһындағы ирекле бәйләнештәрҙе пропагандалаған сериалдар күбәйҙе. Уларҙа үҙәк урынға, әлбиттә, мөхәббәт, дуҫлыҡ, ғаилә эсендәге хәл-ваҡиғалар һүрәтләнеше инә лә, икенсе планда тап әле беҙ һанағандар теҙелеп китә. Бала 12-13 йәшендә үҙенең донъяһында үҙгәрештәр тоя башлай, был хаҡта ул яҡын дуҫтары һәм мотлаҡ бер оло кеше менән асыҡтан-асыҡ һөйләшә. Ул үҙен асыҡлағанға тиклем бик тәрән психологик көсөргәнештәр юлы үтә. Уның был серҙәргә өйрәтеүсе "уҡытыусыһы" барлыҡҡа килә. Тора-бара уны аңлайҙар, ҡабул итәләр һәм ул үҙ парын табып бәхетле йәшәп китә. Сериалдарҙың ҡыҫҡаса тарихтары шулайыраҡ. Һәм, ышанаһығыҙмы, балалар ятып ҡарай шуларҙы. Ундай сериалдарҙы ил буйынса миллионлаған балалар миҙгел-миҙгелен көтөп ала. Уларҙағы хис-тойғолар солғанышы, тәүге һөйөү кисерештәренең һүрәтләнеше һәм башҡа үҫмерҙәр өсөн ҡыҙыҡлы нәмәләр матур бирелә шул. Ә шулар менән параллель рәүештә тәбиғи булмаған енси "мәҙәниәт" тә алға һөрөлә. Һәм икешәр-өсәр йыл ҡаралған кино эсендәге ысынбарлыҡ бала аңына үтеп инә. Тора-бара "былар барыһы ла нормально" тип уйлай ул. Уларҙан алдағы быуын был белемен нисектер йәшерһә, әлеге үҫеп килгәндәр хатта йәшереп тә тормаясаҡ, уларҙы тотош быуыны менән телевизор тәрбиәләй. Телевизор йәнһүрәттәре ауыл балаларын да русса фекерләүгә өйрәтте бит инде, хәҙер ошо уҡ ҡумта енси тәрбиәне лә үҙ ҡулына алды.

Башҡа киноларҙа ла хәҙер "енси тигеҙлек" ҡанундарын тотоу, тән төҫөн айырмау һәм башҡалар өсөн экранға мотлаҡ ҡара, һары тәнлеләрҙе һәм енси аҙсылыҡты тәьмин иткән шул "төҫлөләрҙе" индереп хоҡуҡ һаҡлайҙар. Йәнәһе, был беҙҙең кешелек тормошо, беҙ уларҙы кәмһетергә, сикләргә тейеш түгелбеҙ һәм шунлыҡтан сәнғәттең бөтә төрҙәрендә лә уларға урын булырға тейеш.

Билдәле актриса Анджелина Джолиҙың 13 йәшлек ҡыҙы бөтә донъя алдында үҙ енесен алмаштырыу менән мәшғүл. Әсәһе уны шул йәштә үҙ ихтыярына ҡуйҙы. "Ҡыҙым 3 йәшенән үҙен малай итеп тоя", тине ул бер интервьюһында. Ҡыҙ бала гормондар эсеп йөрөп, ошо йылда операция яһатты ла, буғай. Ни булһа ла бөгөн ул "малай" булып алған. 13 йәшлек баланың башында күпме генә аҡыл барҙыр, ә бына әсәһе менән атаһының аң кимәле бәхәс тыуҙыра. Шунан, егермегә етер ҙә, ул ҡыҙҙың ҡатын булғыһы килер, әсәй булғыһы килер, ғашиҡ булыр... Тәбиғәттән үтеп буламы ни?..

Бөгөн властар ҙа милли талаптар, дини ҡараштар, сәйәси фекерҙәр менән урамға сыҡҡандарҙы язаға тарттыра, ә үҙ хоҡуҡтарын яҡлап сыҡҡан был енси аҙсылыҡтың талабы яҡлана. Шәхси хоҡуҡ ул хәҙер енси теләк кенәме? Ни өсөн милли йәки сәйәси теләк енси теләктән түбәнерәк булып ҡалды? Уйлап уйың етмәҫ...

Эскелек, наркомания, эшһеҙлек кеүек бәләләр менән бер рәттән килгән бәйһеҙлек, әхлаҡи түбәнәйеү ҡурҡынысы ла бар. Нисек кенә заманса һәм "ирекле" булырға ынтылғанда ла, Аллаһы Тәғәлә тарафынан кешеләр ике енесле итеп яратылыуын һәм улар араһындағы мөхәббәт кешелек донъяһында әҙәм затының быуынын дауам иттереүгә ҡоролғанын онотоорға ярамай. Тарих та бит йәшермәй: әлеге ирекле һөйөү, енси бәйһеҙлек һәм әхлаҡтың юҡҡа сығыуы әллә ниндәй шанлы цивилизацияларҙы, империяларҙы ла тарҡата, юҡҡа сығара. Рим империяһы, Византия, Ацтектар империяһы, Боронғо Египет хакимлыҡтары ла тап ана шул самаһыҙ ашап-эсеү, байрам-туй һәм енси тотанаҡһыҙлыҡтар алып килгән ҡазалар арҡаһында ахырын кисергән.

... Был донъяға кем булып яратылғанбыҙ, шул булып йәшәйек. Балаларҙы ла шулай өйрәтәйек. Һаҡлайыҡ Хоҙай тарафынан бирелгән кешелек ҡиммәттәрен.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

ИШАРА

# ШЫЙЫҠ СЫБЫҠТЫ...

## иҫләйһегеҙме?

**Беҙ бәләкәй саҡта күп өйҙәрҙең ишек башында шыйыҡ сыбыҡ ҡыҫтырыулы була торғайны. Бөтә ғаиләләрҙә лә балалар күмәк, улар туҡтауһыҙ шаяра, ыҙғыша, һуғыша, сөнки һәр кемдең бәхәстә еңеүсе булғыһы, иң тәмле киҫәкте, иң матур, иң ҙур өлөштө эләктергеһе килә. Шундай шарттарҙа атай-әсәйҙәргә сыбыҡһыҙ ҙа булмағандыр инде.**

Әммә улар башта, сыбыҡҡа тотонорҙан алда, киҫәтеүле генә ҡарап ҡуя, унан тел менән киҫәтә, шунда ла тыңламаһалар, эйәк менән ишек башына ымлай. Быларҙың береһе лә ярҙам итмәһә, сыбыҡты тартып алып, устарына һуҡҡыслап бейетеп алалар ине. Бынһы нимә буласағына ишара яһау ғына. Шунан һуң да шашҡан, үҙһүҙләнгән балаларға теге сыбыҡтың әсе "тәмен" татып ҡарарға тура килә торғайны. Атай-әсәй балаһын шулай тәрбиәләргә теләй, тик уныһы аңламай, үҙен яратмайҙар, күрә алмайҙар, тип уйлай.

Был күренеште мин бөгөнгө коронавирус темаһы менән бәйләргә теләйем. Был осраҡта кешеләр - тыңлауһыҙ балалар, ә атай-әсәй урынында - Тәбиғәт. Беҙ тәбиғәтебеҙҙе талаша-талаша ҡомһоҙланып талайбыҙ, аяуһыҙ ҡырабыҙ, хайуандар, ҡоштар донъяһына көн бөттө, ҡалын-ҡалын урмандар ҡырҡылып, икешәр ҡатлы өйҙәргә әйләнде, автомобилдәр, химия заводтары һауаны, һыуҙы бысрата, көнкүреш сүп-сарҙары донъяны баҫты. Тәбиғәт-Әсәбеҙ сараһыҙҙан һәр төрлө афәттәрен ебәреп ҡарай - ямғырһыҙ йәйҙәр, йәки, киреһенсә, туҡтауһыҙ яуыу һөҙөмтәһендә һыу баҫыуҙар, ер тетрәүҙәр, цунамиҙар, төрлө эпидемиялар, кризистар, һуғыштар һәм башҡалар. Баҡһаң, былар барыһы ла Тәбиғәт-Әсәнең яман ҡарап алыуы, бармаҡ янап, ишек башына эйәк һелтәп киҫәтеүе генә булған икән дәһә. Беҙ иһә, теге бала кеүек, яратмайҙар, шуға яза бирәләр, тип уйлағанбыҙ, Тәбиғәт, Аллаһ үҙе шулай тәрбиәләргә теләүен аңламағанбыҙ.

Һәм бына коронавирус килде. Тимәк, Тәбиғәт, сабырлығы шартлап, үрҙә торған теге сыбыҡты тартып алды! Әлегә һуҡмай ул, усында бейетеп кенә тора. Ә беҙ ҡурҡышыбыҙҙан һәр беребеҙ үҙ өйҙәребеҙгә бикләндек. Уйланһындар, фекер йөрөтһөндәр, тәүбәгә килһендәр өсөн шулай эшләне ул. Тик әлегә сыбыҡты йомшаҡ ергә эләктермәй. Тимәк, ул көндәр әле алда! Һаман ҡомһоҙланып, Ер-әсәбеҙҙе талауҙан, бер-беребеҙҙе уҙҙырып байырға ынтылыуҙан, көнләшеп, үсләшеп, һуғышып, йәндәрҙе ҡыйып, йыһанды кире энергия менән һуғарыуҙан туҡтамаһаҡ, әсе сыбыҡ эшкә егелер бит бер заман!

...Глобаль йылыныу арҡаһында ирей башлаған мәңгелек боҙлоҡтарҙа йәшенгән боронғо үлемесле эпидемияларҙың яңынан таралаасағын ғалимдар ҡасандан бирле иҫкәртә. Шул сағында киләсәк сирҙәр янында был коронавирус балалар уйынсығы ише булып ҡалмаҫ тимә. Уйланайыҡ. Өйҙә ултырайыҡ - әлегә был яңы афәттән иң ышанıслы ҡотолоу сараһы.

**Рәхимә МУСИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Бөтә республика үҙизоляция режимына күскән шарттарҙа Өфө ҡалаһы халҡы аҙыҡ-түлеккә һәм кәрәк-яраҡ әйберҙәргә заказ биреп өйөнә алдыра ала. Был ойошмаларҙың исемлеге һәм эш ваҡыты менән "Киске Өфө"нөң "Бәйләнештә"ге төркөмөндә лә таныша алаһығыҙ.

✓Үҙизоляция ваҡытында мөһим тип һаналмаған сәбәп буйынса урамда йөрөгән, ҡаланың икенсе районына сыҡҡан кешеләргә полиция хеҙмәткәрҙәре эш асыу хоҡуғына эйә. Шул уҡ ваҡытта почта хеҙмәткәрҙәре эшләйәсәк һәм халыҡҡа пенсия аҡсаһы ваҡытында таратыласаҡ. Был юлы пенсия алыусыларға почтаға килеп йөрөү кәрәкмәй, почтальондар уларҙың өйөнә аҡсаны үҙҙәре алып барасаҡ.

✓Өфөлә Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһы эргәһендә (Шәфиев урамы, 2) вертолеттар ултыртыу өсөн майҙансыҡ төҙөлә башланы. Республикала - Нефтекама, Аҫҡын, Сибай, Мәсәғүт, Стәрлетамаҡ, Белоретта -барлығы 14 вертолет майҙансығы, шуларҙың 6-һын Өфөлә төҙөү планлаштырыла. Был пациенттарҙы Өфөгә алып килгәндә байтаҡ ваҡытты экономиялаясаҡ.

✓4 апрелдән Башҡортостанда төнгө ҡырауҙар башлана. 5-11 апрелдә һауа температураһының көндөҙ 9-12 градус йылы, төндә 4-5 градус һалҡын булыуы көтөлә. Бындай шарттарҙа һыу ташыу ихтималлығы кәмей төшә. Быйыл Ағиҙелдең Өфө районында - 700-800 сантиметрға, Ҡариҙел йылғаһының Шаҡша тәңгәлендә - 750-850 сантиметрға, Димдең Бочкарево ауылы янында 570-670 сантиметрға күтәрелеүе күҙаллана. Был 2019 йылдағынан ике тапҡырға юғарыраҡ.

✓Республиканың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, коронавирус пандемияһы ваҡытында бөтә донъяла сүп-сар ҡалдыҡтары күләме арта бара. Бигерәк тә медицина ҡалдыҡтары артыуы оло хәүеф тыуҙыра. Шуға бәйле, министрлыҡ ҡулланылған битлектәрҙе һәм медицина бирсәткәләрен айырым пакеттарға төрөргә тәҡдим итә. Үҙизоляция осоронда фатирҙарҙағы ремонт һәм генераль йыйыштырыуҙарҙы ла кисектереп торорға кәңәш ителә.

✓Башҡортостанға тәүге аҡҡоштар ҡайтҡан. Ҡоштар Күгәрсен районы Үрге Биҡҡужа ауылы янындағы Ағиҙел йылғаһында ял итергә туҡтаған, тип хәбәр ителәр "Башҡортостан" милли паркынан. Ғәҙәттә, аҡҡоштар көньяҡтан апрель уртаһында әйләнеп ҡайта. Уларҙың иртә килеүе төбәктәге йылы һауа торошо менән бәйлелер, моғайын.

✓ *Йәмғиәттә ярҙам талап ителгән категорияларға ярҙам күрһәтеү һәм вирустың таралмауы өсөн һәр кемдең яуаплылыҡ тойоуы мөһим. Сөнки бөгөн күп осраҡта талаптар үтәлмәй, мәсьәләгә етди ҡарамаусылар ҙа бар.*



*АТА-ӘСӘЛӘРГӘ*

# СИТТӘН ТОРОП...

**6 апрелдә уҡыусыларҙың каникулы тамамлана. Артабан улар нисек һәм ни рәүешле белем аласаҡ? Ошо һәм башҡа һорауҙарға БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин сираттағы брифинг ваҡытында яуап бирҙе.**

Каникулдан һуң Башҡортостандың ярты миллион самаһы уҡыусыны берләштергән 1318 белем усағы тулыһынса бер сменалы онлайн режимға күсәсәк. Уҡыусылар барыһы ла бындай эш алымына әҙер һәм улар махсус өҫтәмә белем алған. Ситтән тороп белем алыу 4 формаға ярашлы алып барыласаҡ: ата-әсәләре мотлаҡ эшкә йөрөргә тейешле (медицина, полиция хеҙмәткәрҙәре, һатыусылар һ.б.) категорияға ҡараған ғаиләләрҙә башланғыс синыфта уҡыусылар булһа, улар оффлайн режимда мәктәптә белем аласаҡ, йәғни кустар буйынса дежур кластар эшләйәсәк. Уларҙа уҡыусылар һаны 15 баланан артмаҫҡа тейеш.

Төп масса онлайн режимға күсә. Улар өйҙә булған барлыҡ девайстар ярҙамында дәрестәрҙә ҡатнаша ала. Был хаҡта тулыраҡ мәғлүмәтте Мәғариф министрлығының рәсми сайтынан ҡарарға мөмкин. Дәрестәр көн һайын иртәнге 10-да башлана, улар араһында тәнәфестәр ҙә була.

Ситтән тороп белем биреүҙең өсөнсө варианты - электрон кейстар, йәғни улар ғаиләлә уҡыусы балалар бер нисә булып, барыһы ла бер үк ваҡытта дәрестә була алмаған осраҡты күҙаллай. Аралашыу, эш биреү төркөм чаттары йәки электрон почта аша алып барыла - уҡыусыға эш бирелә һәм ул яуапты шундай уҡ юл менән тапшырырға тейеш. Был форма шулай уҡ интернет тиҙлеге яй булған осраҡтарҙа ла ҡулай.

Дүртенсе форма бөтөнләй интернет булмаған биләмәләргә ҡағыла. Бөгөн республикала балалар һаны 25-тән артмаған шундай 93 мәктәп иҫәпләнә. Улар ҡағыҙ кейстар буйынса уҡыясаҡ. Йәғни уҡытыусы әҙерләгән эштәр ҡағыҙҙа яҙылып, уны дежур уҡытыусы мәктәп автобусында балаларға дүшәмбе көн таратып сыға, шаршамбы икенсе дежур уҡытыусы йыйып ала һәм яңы эштәрҙе ҡалдыра, йома көндө эштәр йыйып алына. Әгәр уҡыусы онлайн дәрестә ҡатнашмай йәки ҡағыҙ кейстағы эштәргә яуап бирмәй икән, ул дәрестә юҡ тип билдәләнә.

Бынан тыш, сығарылыш синыфы уҡыусылары өсөн шәмбе иртәнге 11-ҙән контроль һынау материалдары (КИМ) буйынса онлайн курстар ойоштороласаҡ, уны республиканың алдынғы, имтихандар комиссияһында эшләгән, уҡыусыларҙың йыш ебәргән хаталарын күргән, үҙҙәре имтиханды юғары балға тапшырған уҡыусылар әҙерләгән уҡытыусылар үткәрә. Был курстарға һылтанмаларҙы класс етәкселәре аша алырға мөмкин.

Бынан тыш, уҡыусылар араһында льготалы, йәғни бушлай туҡланыу менән тәьмин ителгән балалар бар. Уларҙың ата-әсәләре синыф етәксеһе менән бәйләнешкә сығып, график буйынса ҡоро паек йәки аҙыҡ-түлек тупланмаһын аҙнаһына бер тапҡыр мәктәптән килеп ала ала.

Ғөмүмән, белем биреү системаһын ситтән тороп уҡыуға күсергән осорҙа ата-әсәләргә синыф етәкселәре менән тығыҙ бәйләнештә булырға һәм килеп тыуған проблемаларҙы бергәләп хәл итергә кәрәк. Мәҫәлән, баланың гаджеты булмағанда, мәктәптәр уға ваҡытлыса ҡулланыу өсөн ноутбук бирер тора ала. Был бигерәк тә күп балалы ғаиләләргә ҡағыла. Әлегә дистанцион белем биреү ике аҙнаға ғына планлаштырыла. Йыл һайын үткәрелгән Бөтә Рәсәй тикшереү эштәре (ВПР) быйыл май байрамдарынан һуң ойоштороласаҡ.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҮҘИЗОЛЯЦИЯ ОҘАЙТЫЛА

**2 апрелдә Рәсәй Президенты Владимир Путин тағы ла халыҡҡа мөрәжәғәт менән сығыш яһап, эш хаҡы күләме һаҡланған ял көндәрен ай һуңына тиклем оҙайтыуын белдерҙе.**



"Хәүеф һаҡлана. Вирусолог-белгестәр әйтеүенсә, донъяла, шул иҫәптән Рәсәйҙә лә, эпидемия пигы үтелмәгән", - тине Владимир Владимирович һәм хәл-торошто төрләсә үҙгәреүен билдәләне. Мәҫәлән, Мәскәүҙә коронавирус етди хәүеф тыуҙырһа һәм ҡала, федераль властарҙың ҡулланған барлыҡ сараларына ҡарамаҫтан, хәл-торошто әлегә үҙгәртеп булмаһа, әлегә бер сирле лә теркәлмәгән төбәктәр бар, әммә уларҙың һаны көндән-көн кәмей бара. Шуға күрә ҡайҙалыр ҡәтғи саралар күрелә, ҡайҙалыр тулы әҙерлек һаҡлап, урында ғына ҡарарҙар ҡабул итергә кәрәк. "Субъекттар башлыҡтарына өҫтәмә вәкәләттәр биреләсәк. Аҙна һуңына тиклем улар үҙ территорияларына тап килгән профилактика сараларының анығ тупланмаһын асыҡларға, халыҡтың сәләмәтлеген, именлеген дә хәстәрләргә, шул уҡ ваҡытта иҡтисадтың һәм төп инфраструктураның тотороҡлолоғон да күҙ уңында тоторға тейеш", - тине Владимир Путин.

Аҙнаны йомғаҡлап, 3 апрелдә БР Хөкүмәтендә лә оператив кәңәшмә үтте. Республика Башлығы Радий Хәбиров төп өс һығымта яһаны: беренсенән, РФ Президенты Указына ярашлы, үҙизоляция, йәғни өйҙә ҡалыу ай һуңына тиклем дауам итә. Шул уҡ ваҡытта граждандарға яуаплылыҡ тойорға һәм алда торған ял көндәрендә тәбиғәткә сығыуҙан да тыйылып тороу кәңәш ителә. Шуға күрә район хакимиәттәре башлыҡтарына саралар комплексын эшләргә һәм уларҙы үтәүҙе талап итергә кәрәк. Башбаштаҡлыҡтар өсөн закон тарафынан яза ҡарала. Икенсенән, республика иҡтисады тураһында ла ныҡлы хәстәрлек күрергә һәм уға иғтибарҙы йомшартырға, уның түбәнгә тәгәрәүенә юл ҡуйырға ярамай. Өсөнсөнән, йәмғиәттә ярҙам талап ителгән категорияларға ярҙам күрһәтеү һәм вирустың таралмауы өсөн һәр кемдең яуаплылыҡ тойоуы мөһим. Сөнки, кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, бөгөн күп осраҡта талаптар үтәлмәй, мәсьәләгә етди ҡарамаусылар ҙа бар. Сарала почтальондар тураһында ла һүҙ булды. Бөгөн меңәрләгән хаҡлы ялдағы граждан пенсияһын почтальондар аша ала, әммә, мәғлүм булыуынса, һаҡланыу кейемдәре һәм сараларҙы таратылһа ла, почтальондар уларҙы киймәй һәм үҙҙәрен генә түгел, тап хәүеф аҫтында булған оло йәштәгеләрҙең дә ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуя.

Шулай уҡ Радий Фәрит улы үҙизоляция ваҡытында Хөкүмәт, муниципаль хакимиәттәр һәм башҡа ойошмаларҙың мотлаҡ эш урынында эшләүе талап ителмәгән хеҙмәткәрҙәрен дә ялға йәиһә ситтән тороп эшләүгә ебәреү кәрәклеген белдерҙе.

# ҠОШСОЛАР ЭШЛӘЙ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мәләүез районы буйлап эш сәфәре барышында "Урал" ҡошсолоҡ фабрикаһында булды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2017 йылдың октябрендә ҡатмарлы финанс хәленә бәйле "Индюшкин" бренды менән продукция сығарған Мәжит Ғафури исемендәге ҡошсолоҡ комплексының эшмәкәрлеге туҡтатылғайны.**

2018 йылдың 29 мартында һалым инспекцияһы ғаризаһы нигеҙендә бында бөлгөнлөк тураһында эш барышында күҙәтеү процедураһы, ә 2019 йылдың 5 мартында конкурс етештереүе процедураһы индерелде. Республика Башлығының ҡатнашлығынан һәм кредитор менән оҙаҡ һөйләшеүҙәр алып барғандан һуң уҙған йылдың октябрендә ҡошсолоҡ комплексы йәнә эшләй башланы. "Урал" ҡошсолоҡ комплексының генераль директоры Вадим Красюк Башҡортостан Башлығына хәҙер 700 мең самаһы себеш үҫтерелеүе хаҡында һөйләне. Ҡош-ҡорт һуйыу цехы эшләй, күркәнең уртаса ауырлығы - 9 килограмдан ашыу. Әгәр йыл башына исемлектә 165 хеҙмәткәр булһа, 23 мартҡа ҡарата иһә - 636. Радий Хәбиров Башҡортостан ҡошсолоҡ комплексының перспективалары менән ҡыҙыҡһынды. Предприятие директоры билдәләүенсә, 2020 йылдың майына 12 ҡош үҫтереү участкаһы сафҡа индерелә. Предприятиеның үҙенең ҡатнаш аҙыҡ цехы бар, унда 75 мең тонна ҡатнаш аҙыҡ әҙерләнә. 14 аҙнаға тиклемге инә күркәнең тере ауырлығын - 10 килограмға, ә 19 аҙналыҡ ата күркәне иһә 20 килограмға еткереү күҙаллана. Продукция элекке "Индюшкин" бренды менән төбәк һәм федераль сауҙа селтәрҙәре магазиндарына, шулай уҡ баҙарҙарға һатыуға сығарыла.

# СӘСЕРГӘ КӘРӘК!

**Коронавирус бөтөн тормошто үҙ ағышына борһа ла, халыҡтың: "Ҡасып китһәң дә - сәсеп кит", - тигән аҡыллы әйтемен онотоорға ярамай. Әле тап сәсеүҙе хәстәрләү мәле. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров та Хөкүмәттең беренсе вице-премьеры Андрей Назаровҡа республиканың агросәнәғәт комплексына яҙғы баҫыу эштәрен һөҙөмтәле атҡарып сығыу өсөн финанслауҙы тулы күләмдә бүлергә ҡушты.**

Республика Хөкүмәтенең иҡтисадҡа ярҙамға бүлгән 15 миллиард һумдың 1,8 миллиард һумы тап ошо тармаҡҡа йүнәлтеләсәк. Ауыл хужалығы техникаһын, минераль ашламалар, тоҡомло мал, ит өсөн үрсетелгән малдарҙы һатып алыуға киткән сығымдарҙы өлөшләтә компенсациялауға субсидиялар биреү ҙә ҡарала, инвесторҙарға ла ярҙам буласаҡ.

Республикала сәсеү майҙаны быйыл 3 миллион гектар (былтырғы менән сағыштырғанда 5 процентҡа күберәк) буласаҡ. Фаразланыуынса, ярауайҙар - 2 миллион гектар, ужым - 400 мең гектар (былтырғыға ҡарағанда 145 гектарға күберәк) тәшкил итәсәк. Яҙғы баҫыу эштәре 13,5 миллиард һумға төшөр тип күҙаллана, был былтырғы кимәлдән 7 процентҡа күберәк. Сығымдарҙы финанслауҙың төп сығанаҡтары булып элеккесә ҡыҫҡа мөҙҙәтле кредиттар (барлыҡ сығымдарҙың 40 проценты), эшкәртеү предприятиелары авансы (10 процент), шәхси средстволар (41 процент), дәүләт ярҙамы (субсидиялар, 9 процент) торасаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың ҙур ҡалаларындағы мәсеттәрҙә йома намаҙҙары уҙғарылмай. Ошо хаҡта республика мосолмандары Диниә назаратының рәсми сайтында хәбәр ителә. 100 меңдән ашыу кеше йөшөгән ҡалаларҙағы мәсеттәрҙә йома намаҙҙары үткәрелмәй. Был коронавирус инфекцияһының таралыуына, шулай уҡ 250-нән күберәк кеше ҡатнашлығындағы сараларҙы сикләүгә бәйле.

✓Коронавирус пандемияһына бәйле быйыл халыҡ-ара традицион культура фестивале - VI Бөтә донъя фольклориадаһы уҙғарылмай. Башҡортостан Хөкүмәтенә CIOFF халыҡ-ара ойошмаһынан күсереү тураһында рәсми тәҡдим килде. Бөтә донъя фольклориадаһы 2021 йылға күсерелә. Башҡортостан Республикаһы халыҡ-ара мәҙәни сараға бер нисә йыл әҙерләнде. VI Бөтә донъя фольклориадаһы 2020 йылдың 18 июленән 1 августына тиклем үтергә тейеш ине. Фестивалдә ҡатнашыу өсөн донъяның 80-гә яҡын иленән ғариза килгәйне.

✓Башҡортостан дәүләт аграр университеты ситтән тороп уҡыуға студенттар ҡабул итә. Документтарҙы 24 июлгә тиклем шәхси кабинеттарҙы аша онлайн режимда бирергә мөмкин. Тулыраҡ мәғлүмәттәр менән БДАУ-ның сайтында (priemtal.bsau.ru) һәм +7 (937) 34-04-500, +7 (937) 34-04-600 телефондары аша танышa алаһығыҙ.

✓Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфөлә коронавирус инфекцияһы таралыу шарттарында консультация ярҙамы күрһәтеү буйынса колл-үҙәк эшләй. Уның номеры - **8-800-250-56-04**. Коронавирус инфекцияһын иҫкәртеү мәсьәләләре буйынса Роспотребнадзорҙың Берҙәм консультация үҙәгенә мөрәжәғәт итергә мөмкин: **8-800-555-49-43**. Республика һаулыҡ һаҡлау министрлығының яңы коронавирус инфекцияһы менән бәйле һорауҙар буйынса "Ҡыҙыу бәйләнеш" телефоны: **8 (347) 286-58-27, 8 (347) 279-91-20** (күп каналлы, тәүлек әйләнәһенә).

✓Май айында республикала йәшәүселәрҙе оҙайлы ялдар көтә. Башҡортостан Хеҙмәт министрлығы хәбәр итеүенсә, Яҙ һәм хеҙмәт байрамы һәм Бөйөк Еңеү көнө айҡанлы һигеҙ көн ял була. Республика халҡы биш көн рәттән - 1 майҙан 5-енә тиклем ял итә. Һуңынан ҡыҫҡа эш аҙнаһы - 6 майҙан 8-енә хәтлем. 9 майҙан 11-енә тиклем - шулай уҡ байрам көндәре. Өҫтәүенә 30 апрелдә һәм 8 майҙа эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡартыла.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ 1 марттан Башҡортостанға сит илдәрҙән 6 меңдән ашыу кеше ҡайтҡан. Уларҙың 3 меңе эпидемиологик хәл-торош киҫкен булған Европанан. Барыһы ла медицина күҙәтеүе һәм лаборатор тикшереү аҫтында.



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Тормош хәҙер интернет селтәрендә һәм электрон бәйләнеш аша бара. Коронавирус барыһын да йорттарға ҡыуалап индерҙе. Ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмә лә аҙ кеше ҡатнашлығында һәм видеоконференция форматында үтә. Был аҙнала ул тулыһынса тиерлек Өфө территорияһында вируслы инфекцияның артабан таралыуына юл ҡуймау мәсьәләләренә арналды.**

# АҢЛАМАҒАНҒА ҺАЛЫШҺАҢ...

## яңы закон тиҙ аңлатыр!

Рәсәй Президенты Владимир Путин Указына ярашлы, ағымдағы аҙна бөтә ил буйынса ял тип иғлан ителһә лә, ситтән тороп эшләргә йәки хеҙмәтләндереүҙе туҡтатып торорға мөмкин булмаған тармаҡтар ҙа бар. Шуларҙың береһе - пассажир йәмәғәт транспорты. Ҡала хакимиәтенең Транспорт һәм бәйләнеш идаралығы начальнигы Владимир Петров белдереүенсә, транспорт предприятиелары 28 марттан ял көнө графигы буйынса эшләүгә күскән, һөҙөмтәлә маршрутҡа сығыусы транспорт һаны 30 процентҡа кәметелгән. Йәғни пассажирҙарҙы бөгөн "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы - 305, Өфө ҡалаһының Электр транспорты муниципаль идаралығы - 99 берәмек (42 трамвай һәм 57 троллейбус), шәхси ойошмаларға ҡараған 1101 берәмек транспорт хеҙмәтләндерә. Улар линияға сығыр алдынан мотлаҡ дезинфекция үтә: ишектәр, тотоноп тороу ҡулайламалары, ултырғыстарҙың пластмасса һәм тимер элементтары махсус саралар менән эшкәртелә. Шулай уҡ улар маршрутҡа сығыу ваҡытын көткән арала ла салондар елләтелеп, өҫтәмә дезинфекция үткәрелә. Предприятиеларҙа транспортты бер ай дезинфекцияларлыҡ запас булдырылған. Дезинфекция эштәрен атҡарыу өсөн респираторҙар, махсус плащтар, медицина бирсәткәләре, медицина битлектәре һатып алынған. Водителдәр, кондукторҙар рейсҡа сығыр алдынан тикшереү үтә һәм температуралары булғанда, йүтәлләгәндә, тымау тейгәндә йәки үҙҙәренең ялыуы буйынса эштән азат ителә.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың 31 марттан киске 8-ҙән тулыһынса үҙизоляция иғлан итеүе һөҙөмтәһендә, йәмәғәт транспорты иртәнге 6-нан киске 8-гә тиклем эшләйәсәк, шул сәбәпле, маршрутҡа сығыусы транспорт һаны 30 проценттан 50 процентҡа тиклем кәмеүе мөмкин. Кәңәшмәлә Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин шундай бурыс йөкмәтте.

Мегаполиста 21 марттан сит илдәрҙән ҡайтыусыларҙың карантин ҡағиҙәләрен һәм талаптарын үтәүен тикшереү буйынса 459 кешенән торған 139 мобиль төркөм эшләй. Улар автотранспорт һәм шәхси һаҡланыу саралары менән тәьмин ителгән. Был хаҡта хакимиәт башлығы урынбаҫары Рөстәм Ғәзизов бәйән итте. Ошо арауыҡта сит илдән ҡайтҡан 4625 граждан тикшерелгән, уларҙың 1101-енең күрһәтелгән адрес буйынса йәшәмәүе асыҡланған, 1056 кеше тикшереү ваҡытында өйҙә булмаған. Теркәү урыны буйынса йәшәгән 2340 кешенең тикшереү ваҡытында 2198-е үҙизоляция талаптарын үтәгән, 142 граждан уны боҙған. Теркәлеү адресы буйынса йәшәмәүселәрҙең ҡайҙалығын хоҡуҡ һаҡлау органдары асыҡлай. Һөҙөмтәлә 743 кеше табылған. Шулай уҡ төрлө милек формаһында эшләүсе предприятиеларҙың эше күҙәтелгән һәм 600-ҙән ашыу ойошма һәм шәхси эшҡыуарҙың сикләүҙәрҙе үтәмәүе асыҡланған.

Хәүеф төркөмөнә ингәнлектән, 65 йәштән өлкәндәргә өйҙән бөтөнләй сыҡмаҫҡа кәңәш ителһә лә, уларҙың ҡайһы берҙәре лә әйтелгәнде һанға һуҡмай һәм йәштәргә, балаларға кире өлгө күрһәтә. Шундай 613 граждан менән профилактик әңгәмә үткәрелгән. Бындай категория граждандарҙың теге йәки был продуктҡа, шәхси гигиена һәм башҡа кәрәк-ярағына ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында һәр районда ирекмәндәр төркөмдәре ойошторолған һәм улар махсус уҡыу үткән. Социаль хеҙмәтләндереү хеҙмәтенең мәғлүмәт үҙәгенә килгән заявкалар буйынса улар адрес буйынса ололарға кәрәкле әйберен алып барып бирә.

Ҡала хакимиәтенең Ҡулланыусылар баҙары, туризм һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау идаралығы начальнигы урынбаҫары Эльвира Матвеева белдереүенсә, бөгөн Өфөлә 8100 сауҙа, йәмәғәт туҡланыуы һәм көнкүреш хеҙмәтләндереүе предприятиеһы эшләй. 28 марттан уларҙың 3119-ы тулыһынса ябылырға тейеш. Ҡайһы бер магазиндар селтәре тауарҙарҙы өйгә килтереп биреү хеҙмәтен башлаған. Ябылырға тейеш булһалар ҙа, 80 сауҙа һәм көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү предприятиеһы талаптарҙы үтәмәйенсә, эшләүен дауам иткән. 30 мартта ундайҙар 11 булған. Республика Башлығының Указын үтәмәүсе предприятие етәкселәре менән аңлатыу эштәре алып барыла, ҡағиҙәне боҙоу буйынса 10 материал хоҡуҡ һаҡлау органдарына тапшырылған. БР Хөкүмәтенең көндәлек кәрәкле тауарҙар исемлеген үҙгәртеүе сәбәпле, тағы ла ҡайһы бер магазиндар ябылыуы ихтимал.

Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина белдереүенсә, 1 марттан Башҡортостанға сит илдәрҙән 6 меңдән ашыу кеше ҡайтҡан. Уларҙың 3 меңе эпидемиологик хәл-торош киҫкен булған Европанан. Сит илдәрҙән ҡайтыусыларҙың барыһы ла йәшәгән ерҙәре буйынса поликлиникаларҙа медицина күҙәтеүе һәм лаборатор тикшереү аҫтында. 31 мартҡа ҡарата 4026 кеше лаборатор тикшереү үткән, шул иҫәптән 171 пациент ОРВИ билдәләре менән инфекцион дауаханаларҙа ята. 71 пациент һауығып сыҡҡан. 24 марттан республикала яңы коронавирусҡа медицина ойошмаларының 7 лабораторияһында тикшереү үткәрелә, уларҙы республика гигиена һәм эпидемиология үҙәге тест-системалар менән тәьмин итә. Баш ҡаланың медицина учреждениелары, өҫтәмә койкалар булдырып, профилен бер аҙ алмаштыра. Ҡыҙыҡһыныусы ойошмалар һәм хеҙмәттәр менән берлектә граждандарҙың үҙизоляцияһы контролен тикшереү буйынса ла эш алып барыла.

Галина Пермина белдереүенсә, тикшереүҙәр, иҫкәртеүҙәр, киҫәтеүҙәр булып тороуға ҡарамаҫтан, ҡайһы берәүҙәр һаман да хәл-тороштоң етдилеген аңлап бөтмәй һәм ҡағиҙәләрҙе боҙа. Ундайҙарға ҡарата протоколдар төҙөлә һәм эш судҡа тапшырыла. Әйткәндәй, был аҙнала РФ Дәүләт Думаһы карантин һәм үҙизоляция талаптарын үтәмәүселәргә яза биреү буйынса закон ҡабул итте. Бәлки, ниндәй хәүеф алдында тороуыбыҙ шулай нығыраҡ аңлашылыр?

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ҺОРАУ-ЯУАП



# ЯЛ ИТКӘНДӘ...

**➔ Ил Президенты ял көндәре тип иғлан иткән ваҡытта айырым предприятиелар хеҙмәткәрҙәренең эшкә сығыуы ҡануниәткә тап киләме?**

- Документтың преамбулаһында Указдың Рәсәй Федерацияһы территорияһында санитар-эпидемиологик именлекте тәьмин итеү маҡсатында ҡабул ителеүе аныҡ билдәләнгән, әммә граждандарҙың хеҙмәт хоҡуҡтары өлөшөндә өҫтәмә гарантиялар тәьмин ителмәй. Шуға күрә был мәсьәлә республиканың министрлыҡтары һәм ведомстволары ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар ошо осорҙа эшләргә тейешле ойошмаларҙың, предприятиеларҙың, учреждениеларҙың аныҡ исемлеген төҙөй.

**➔ Ял көндәре ваҡытында хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы нисек түләнә?**

- Владимир Путин ҡул ҡуйған Указға ярашлы, оклад буйынса эшләгән хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡы тулыһынса һаҡлана. Рәсәй Хеҙмәт министрлығы күрһәтмәһенә ярашлы, ял иғлан ителгән аҙнала, хатта хеҙмәткәр эшкә йәлеп ителмәһә лә, эш биреүселәргә уларға договор, килешеү, предприятие эсендә ҡабул ителгән норматив хоҡуҡи акттар нигеҙендә ҡаралған өҫтәмә дәртләндереү күләмен түләргә тәҡдим ителә. Эш биреүсегә килеп тыуған шарттарҙа локаль документтарҙы тиҙ арала ҡабаттан ҡарарға һәм дәртләндереү күләмен бер көнлөк эш көнөнән дә түбән булмаған күләмдә билдәләргә тәҡдим ителә.

**➔ Хеҙмәт хоҡуҡтары боҙолғанда ҡайҙа мөрәжәғәт итергә?**

- Республиканың һәр кешеһе был осраҡта Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының һәм Дәүләт хеҙмәт инспекцияһындағы "ҡыҙыу бәйләнеш" телефондарына мөрәжәғәт итә ала. Министрлыҡ белгестәре ошо телефон номерҙары буйынса консультация бирә: 8 (347) 218-07-25; 8 (347) 218-06-47; 8 (347) 280-88-17; 8 960- 80-666-45 (WhatsApp); 8-800-707-88-41 - Хеҙмәт һәм мәшғүллек федераль хеҙмәтенең "ҡыҙыу бәйләнеш"е; 8 (347)277-87-02 - Дәүләт хеҙмәт инспекцияһының "ҡыҙыу бәйләнеш"е.

**➔ Рәсәй Президенты үҙенең мөрәжәғәтендә пособие алыусыларға документтар тапшырмай ғына пособие түләү ваҡытын оҙайтыу хаҡында әйткәйне. Был ысынлап та шулаймы?**

- Быйыл 1 апрелдән 31 августҡа тиклем мөҙҙәте үтәсәк төбәк социаль ярҙам саралары ғариза булмаған осраҡта ла түләнәсәк. Йәғни ғариза һәм талап ителгән документтар булмаһа ла, айлыҡ пособиеға хоҡуҡлы категория (балалар пособиеһы, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр һәм яңғыҙ йәшәгән аҙ тәьмин ителгәндәр, күп балалы ғаиләләрҙең торлаҡҡа һәм коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәргә аҡсалата компенсация алыусылар һ.б.) уны аласаҡ. Һүҙ социаль ярҙамдың яңы сараларын тәғәйенләү тураһында булһа, был осраҡта Дәүләт хеҙмәттәре порталы (Госуслуги) аша граждандың шәхси кабинеты аша ғариза бирергә мөмкин. Шунда уҡ быны нисек эшләргә инструкция ла бар.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Организмды таҙартыу

❖ Был рецепт барыһына ла килешә. Ҡыяр өлгөргән мәлдә иртәнсәк ашарҙан ярты сәғәт алда ярты стакан яңы һығылған ҡыяр һутын эсергә. Ул организмды шлак һәм токсиндарҙан таҙарта, шешенеү үтә, ҡан баҫымы нормалләшә, ҡан тамырҙары нығына һәм һығылмалана, дөйөм хәл яҡшыра. Организмды таҙартыу осоро - 2 аҙна.

❖ Бер ус ҡайын "алҡаларын" ваҡлап, ярты литр араҡы ҡойоп, 7 көн төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә берәр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу осоро настойка бөткәнгә тиклем дауам итә. Ул бөтә организмды - ҡурылдай, үпкә, быуындар, ҡан тамырҙарын таҙарта.

❖ Йәш әремде ит турағыста ваҡлап, һутын һығып алырға. 100 грамм әрем һутын 400 грамм бал һәм 3 литр тәбиғи виноград шарабы ҡушып, ҡайнар хәлгә еткерергә, эҫе көйөнсә быяла шешәләргә ҡойорға һәм ныҡлап ябырға. Һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 20-30 мл эсергә. Дауаланыу ысулы былай: бер көн эсергә, ике көн эсмәҫкә һәм шул рәүешле 2 ай дауам итергә.

❖ Өс сөгөлдөрҙө яҡшылап йыуырға, әммә ҡырып таҙаламаҫҡа, ваҡ ҡына итеп шаҡмаҡлап турарға һәм 3 литрлыҡ быяла банкаға һалып, 2 ҡалаҡ шәкәр ҡушырға һәм өҫтөнә һыу ҡойорға. Әммә һыуҙы тултырғансы ҡоймағыҙ, сөнки йөҙөм дә ҡушырға кәрәк буласаҡ. Һауыттың ауыҙын ябып, бүлмә температураһында 2 тәүлек төнәтергә, көнөнә ике тапҡыр болғатып торорға. Шунан уға 2 стакан таҙартылған йөҙөм ҡушырға, 7 көн төнәтергә. Көн һайын 2 тапҡыр болғатып торорға онотмағыҙ. Таҙарыныуҙы һигеҙенсе көнөндә генә башларға ярай. Сөгөлдөр кеүәҫен көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда берәр ҡалаҡлап эсергә.

❖ Ер еләге организмды таҙартырға һәм ябығырға ярҙам итә. Беренсе иртәнге аш мәлендә 300 грамм ер еләген шәкәрһеҙ ас ҡарынға ашарға. Икенсе иртәнге аш мәлендә бер тәрилкә ер еләге һәм 50 грамм салат ашарға. Төшкө һәм киске ашҡа балыҡ, йәшелсәнән торған аҙыҡ менән туҡланырға. Ер еләгенән торған был диетаны ике аҙна тотоу организмдан артыҡ шыйыҡсаны, токсиндарҙы сығара һәм эсәктәрҙе таҙарта.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ Әгәр кемдеңдер санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләрҙе үтәмәүе арҡаһында кешеләр сирләй икән, граждандар өсөн штраф күләме 15-40 мең һум тәшкил итә; вазифалы кешеләр өсөн - 50-150 мең һум.***



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Елән өҫтөнән ҡатын-ҡыҙҙар йоҡа аҡ буҫтауҙан тегелгән сәкмән ябынғандар. Уны ҡыҙыл һәм йәшел, ҡайһы берҙә ҡыҙыл һәм ҡара буҫтау таҫмаһы менән ҡаймалағандар, аппликация һәм нағыш менән биҙәгәндәр. Сәкмән һәм eләндең биҙәлешендә уртаҡлыҡ күп. Орнаментында мөгөҙгә оҡшаш нағышҡа өҫтөнлөк бирелгән. Итәк буйы семәрләнгән, ҙурыраҡ биҙәктәр ҡабырғалағы йөйҙәре буйына урынлаштырылған. Ҡайһы саҡта арҡа тирәһен һәм ең остарын да биҙәгәндәр. Орнаментта ҡусҡарҙар өсмөйөш бетеүҙәр, суҡтар, ҡайылған йондоҙҙар,мөһөрҙәр менән аралашып килгән. И.И. Лепехин Урал йылғаһы инеше тирәһендәге тау башҡорт ауылдарында булып, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ситтәре буйлап ике рәт сәйлән баҫылған "төрлө төҫтәге буҫтау кафтандарын" һүрәтләй.



*Ирҙәр сәкмәнендәге ҡайыу һәм аппликация. БР ММ. В.М. Шутова һүрәте*

Музейҙарҙың башҡорт коллекцияларында буҫтауҙан тегелгән туй кейемдәре күп түгел. Рәсәй этнография музейында зауыҡлы аҡ сәкмән һаҡлана (кол. 1002-147). Уны 1906 йылда тауҙарҙа ҡарағайҡыпсаҡтарҙан С.И. Руденко һатып ала, һуңғараҡ һүрәтен баҫтыра. Ситтәре һары һәм йәшел ҡаймалы ҡалын ҡыҙыл буҫтау таҫмаһы менән уратып тегелеүҙән тыш, ул ҡайыу, аппликация һәм декоратив сәсәктәр менән биҙәлгән. Салғый һәм итәгендәге ҡаймаһы буйлап,еңдәрендә һәм арҡаһының өҫкө өлөшөндә ҙур ике төҫлө (ҡыҙыл-көрән) һигеҙ ҡырлы йондоҙҙар ҡуш элмәләп сигелгән. Ҡабырға буйындағы йөйҙәр тирәһендә үҙәгенә мәрүәт төймәләр баҫылған ҡыҙыл буҫтауҙан оҙонса мөгөҙгә оҡшаш фигуралар тегелгән. Салғый мөйөштәрен ҡыйғаслап ҡырҡып тегелгән таҫма киҫәге, өс йондоҙ һәм парлы мөгөҙҙәре әүернә хасил иткән ҡусҡарлы нағыш биҙәй. Арҡаһында һәм яурындары буйына сәсәкле өсмөйөштәр тегелгән; башҡа ябып йөрөгәндә был өсмөйөштәр йондоҙҙар менән берлектә дағаны хәтерләтеп "теҙелә".



*Ҡусҡарлы һәм мөһөрлө ҡатын-ҡыҙ сәкмәне. РЭМ. ХХ б. башы.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*КӨНАУАЗ*

**Ниһайәт, аҙна башында бер аҙ күңелде йылытыр мәғлүмәт килеп етте: илебеҙҙә Рәсәй Фәндәр академияһы белгестәре ҡатнашлығында коронавирусты дауалауҙа ҡулланыу ихтималлығы булған өс препарат эшләнгән. РФА вице-президенты Владимир Чехонин белдереүенсә, бынан бер нисә йыл элек беҙҙең ғалимдар вирусҡа ҡаршы сара уйлап таба. Бөгөн ул Ҡытай белгестәрен коронавирус инфекцияһын дауалауҙа ҡулланыу ихтимал булған дарыу булараҡ ҡыҙыҡһындыра. Әлеге ваҡытта препарат махсус һынау үткәреү учреждениеларына тапшырыуға әҙер. Бынан тыш, тағы ла ике препарат хәҙерге коронавирус ҡараған РНК-вирустарҙы дауалау өсөн ҡулланылыуы мөмкин. Был өс препарат менән Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡыҙыҡһынған. Һуңғы яңылыҡтар буйынса, тест-система клиник һынауҙарҙы уңышлы үткән һәм Рәсәйҙә ҡулланыу өсөн теркәлгән. Диагностика тупланмаһы ялған һөҙөмтә бирмәй. Бынан тыш, РФА белгестәре коронавирус инфекцияһына ҡаршы өс вакцина эшләй.**

# БАРЫҺЫ ЛА ҮТӘ...

## Был да үтер!




Ә шулай ҙа "Был миңә ҡағылмай", тип уйлаусыларға етди уйланырға урын бар: Мәскәү ҡалаһы мэры Сергей Собянин баш ҡалала ғәҙәттән тыш хәл иғлан итте һәм барлыҡ граждандарға ла өйҙә ултырыу талабын ҡуйҙы. Был ғәмәлде күптәр граждандарҙың хоҡуғын боҙоу һәм ғәҙәттән тыш хәл индереү бары тик ил Президенты йәки парламент компетенцияһында тип белдерһә лә, моғайын да, ашаған белмәй, тураған белә, тигәндәй, ҡала етәксеһенә проблема асығыраҡ күренәлер, юҡһа, ул үҙ иңенә шундай яуаплылыҡ алмаҫ ине. Әйткәндәй, яңы ҡабул ителгән закон төбәк башлыҡтарына ла шундай вәкәләт бирҙе. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров 31 марттан киске сәғәт 8-ҙән республикала йәшәгән барлыҡ граждандар өсөн йәшәү урыны буйынса үҙизоляция режимы индерҙе. Уның ҡасан тамамланыры аҙна һуңында ғына билдәле буласаҡ. Тулы изоляция - ул өйҙә йәки фатирҙа үткән карантин ваҡыты һәм етди сәбәпһеҙ урамға сығып йөрөмәү. Етди сәбәп булып ашығыс рәүештә медицина ярҙамына ихтыяж, бурыслы булғанда эшкә сығыу, йорт хайуандарын өйҙән 100 метр алыҫ булмаған территорияла йөрөтөү, сүп-сар түгеү, магазинда йәки дарыуханала нимәлер һатып алыу һанала. Тағы ла шуны онотмағыҙ: ошо ябай ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереү өсөн урамға сыҡҡанда ла паспорт алырға кәрәк!

Быға тиклем карантинға төкөрөп ҡараусылар булһа ла, хәҙер инде ул закон менән көйләнә. РФ Дәүләт Думаһы бер юлы өс уҡыуҙа карантинды боҙоуҙы енәйәткә тиңләгән ҡанун ҡабул итте. Әгәр кемдеңдер тыйыуҙарға иҫе китмәйенсә, уның санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләрҙе үтәмәүе арҡаһында кешеләр сирләй икән, граждандар өсөн штраф күләме 15-40 мең һум тәшкил итә; вазифалы кешеләр өсөн - 50-150 мең һум; предприятие йәки ойошма төҙөмәй генә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәргә - 50-150 мең һум йәки 90 көнгә тиклем эшмәкәрлеген туҡтатып тороу, предприятие-ойошмалар өсөн - 200-500 мең һум йәки 90 көнгәсә эшмәкәрлеген туҡтатыу ҡаралған. Әгәр карантин талаптарын боҙоу кеше сәләмәтлегенә зыян килтерә йәки уның үлеменә сәбәп була икән, граждандарға 150-300 мең һум штраф ҡаралған, вазифалы кешеләргә - 300-500 мең һум йәки 1 йылдан 3 йылға тиклем дисквалификация. Юридик теркәлеү үтмәйенсә эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән кешеләргә лә, ойошма-предприятиеларға ла - 500 мең һумдан 1 миллион һумға тиклем штраф һәм эшмәкәрлектәрен өс айға туҡтатыу билдәләнгән. Әгәр инфекция йоҡторған кеше вафат булһа йәки кешеләр күпләп сирләһә, штраф күләме 2 миллионға тиклем барып етә, ғәйепле гражданға 3-5 йыл айырым вазифалар биләү, билдәле эшмәкәрлек менән шөғөлләнеү тыйыла йәки 5 йылға тиклем иркенән мәхрүм ителә. Карантинды боҙоуы һөҙөмтәһендә ике йәки күберәк кеше вафат булһа, 7 йылға тиклем ирекtән мәхрүм итеү ҡаралған.

Шулай уҡ закон интернетта һәм киң мәғлүмәт сараларында эпидемия тураһында ялған (фейк) яңылыҡтар таратыуҙы ла көйләй. Юридик шәхестәр өсөн штраф күләме 1,5 миллион һумдан 3 миллион һумға етһә, ялған мәғлүмәт һөҙөмтәһендә кеше сәләмәтлегенә йәки милеккә зыян килһә йәки ул вафат булһа, йәмәғәт тәртибе күпләп боҙолһа - штраф күләме 3-5 миллион һум.

Йәшәү өсөн кәрәкле, транспорт йәки социаль инфраструктура, энергетика, сәнәғәт, бәйләнеш объекттары, кредит ойошмалары эшенә ҡамасау тыуҙырған тәртип йәки ҡағиҙә боҙоуҙар өсөн граждандарға 300-400 мең һум, вазифалы кешеләргә - 600-900 мең һум, ойошма-предприятиеларға 5-10 миллион һум штраф һалыу ҡарала.

Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. "Ҡытай ҡайҙа ла, беҙ ҡайҙа. Беҙгә килеп етмәй ул!" тип ултырһаҡ та, коронавирус сиренә шикленәр һаны ла көндән-көн арта бара. 3 апрелгә республика дауаханаларында шундай 106 пациент теркәлгән. Францианан ҡайтҡан студент үҙенең туғанын зарарлауы һөҙөмтәһендә сирләүселәр һаны 10-ға етте, шул иҫәптән ике кеше - Күмертау ҡалаһында. Шул уҡ ваҡытта тәүге сирләүселәрҙең береһе дауахананан һауығып сыҡҡан. Коронавирус йөрөтөүселәр үҙҙәрен яҡшы тойһа ла, эксперттар белдереүенсә, әле Башҡортостан сирләүселәр һанын туҡтатып булмай торған сик алдында тора, йәғи халыҡ күпләп һәм бер үк ваҡытта сирләүе ихтимал.

Шул уҡ ваҡытта кемдең инфекция йөрөтөүен кеше сирләп китмәйенсә һәм махсус анализдар тапшырмайынса белеп булмай. Ошо көндәрҙә Сибай баҙарында ит һатҡан Силәбе өлкәһенең Ҡыҙыл районы эшҡыуары ла, сит илдән ҡайтҡан булһа ла, карантинға китмәйенсә эшләп йөрөп, сир сығанағы булырмын, дауаханаға эләгермен, тип уйламағандыр ҙа. Әммә үҙ-үҙеңә артыҡ ышаныусанлыҡ та ҡайһы бер осраҡта файҙаға түгел икән шул! Һөҙөмтәлә хәҙер унан ит алыусы барлыҡ кешеләр мотлаҡ тикшерелергә тейеш.

Карантин талаптарын үтәмәүселәргә штраф һалынасағы йәки яза бирeләсәге тураһында электрон мәғлүмәт сараларында ла йыш ҡабатлана. Үткән аҙнала иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ та һалмаған блогер ҡатынға штраф сәпәһәләр, был аҙнала Көйөргәҙе районының Ермолаевка ауыл биләмәһе башлығы вазифаһы менән хушлашты. Ул тормош иптәше, әйткәндәй - табип, менән Доминикан Республикаһында сәйәхәттә булып ҡайтҡандан һуң карантинда булыу урынына, киреһенсә, мәғлүмәтте йәшереп, икәүләшеп халыҡ менән аралашып, эшләп йөрөгән. Һәм "сер ҡапсығы" сиселеү менән уға, үҙ теләге менән ғариза яҙып, урынын ҡалдырырға тура килде. Табип булып эшләүсе ҡатыны тураһында әлегә мәғлүмәт юҡ, моғайын, ошо аҙнала ул да эшенән бушатылыр.

Башҡалар карантинда булғанда ла Хөкүмәт даирәһендә эшләүселәргә посын ҡалдырырға ярамай, сөнки бөгөн улар, табиптар кеүек үк, күҙгә күренмәгән дошман менән көрәштең алғы

һыҙығында. Шул уҡ ваҡытта халыҡтың сәләмәтлеген дә хәстәрләргә, иҡтисадтың тотороҡлолоғон да һаҡларға, яҙғы баҫыу эштәренә әҙерлек башларға ла һәм башҡа бик күп эштәрҙе алып барырға, ҡыҫҡаһы, Башҡортостан тигән карап менән оҫта идара итергә кәрәк. Шуның өсөн Хөкүмәт вәкилдәре барыһы ла коронавирусҡа анализ тапшырғайны. Ошо көндәрҙә уларҙың һөҙөмтәһе асыҡланды - республика етәкселегендә вирус йөрөтөүселәр юҡ. Ә инде үҙизоляция иғлан ителгәс, эшкә йөрөүселәр махсус пропуск йәки эш урынынан справка алырға тейеш.

Коронавирус бөтөн сараларҙы туҡтатты, транспорт хәрәкәтен ҡыҫҡартты, сиктәрҙе япты. Баш ҡалала балалар баҡсалары ябыла, бары тик 10 дежур учреждение ғына ҡалдырыласаҡ. Уларҙың һанын һәм ҡайҙа урынлашҡанын ҡала хакимиәтенең рәсми сайтынан ҡарарға мөмкин.

Иҡтисадҡа килгәндә, был афәт бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ғына түгел, ҙур бизнесҡа ла кислороды япты. Мәҫәлән, автомобилдәр һатыу менән шөғөлләнгән "Транстехсервис" компанияһы етәкселеге 800 хеҙмәткәренә үҙ теләктәре менән эштән китеү тураһында ғариза яҙырға ҡушҡан. Әммә Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ил буйынса карантин индерелеү сәбәпле хеҙмәткәрҙәрҙе эштән ебәреүҙе тыйыу тураһында белдергәйне. Әгәр шундай осраҡтар асыҡлана икән, эш биреүсене прокуратура, хеҙмәт инспекцияһы һәм һалым органдары тарафынан киң күләмле тикшереүҙәр көтә.

Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы тағы ла бер мөһим мәлгә туҡталып үтте. "Алкоголь буйынса. Әгәр рәсми иғлан ителгән ял ваҡытында йәмәғәт хоҡуҡ боҙоуҙары, янғындар артыуын, өйҙә көс ҡулланыу факттарын асыҡлаһаҡ, республика территорияһында "ҡоро закон" иғлан итәсәкмен. Әлегә ундай сара индереү ихтыяжы юҡ", - тип белдерҙе ул. Һәм 1 апрелдә мәғлүм булыуынса, республика буйынса киске сәғәт 6-нан иртәнге 10-ға тиклем алкоголь һатыуҙы тыйған Указға ҡул ҡуйылды.

Коронавирустың артабан ниндәй эҙемтәләргә килтеререн бер Хоҙай ғына белә. Хәҙерге ваҡытта республика етәкселеге өсөн иң мөһиме - вирустың тиҙ арала таралыуын тотҡарлау һәм уның көслө тулҡыны килгәндә мөмкин тиклем әҙерлекле булыу. Бының өсөн әлеге ваҡытта барлыҡ саралар күрелә: иң ябай һаҡланыуҙан - битлектәр кейеү, ҡулдарҙы ғына түгел, хатта транспортты, туҡталҡаларҙы, кеше йөрөгән йәмәғәт урындарын дезинфекциялауҙан алып тулы изоляцияға тиклем. Был йәһәттән республиканың еңел сәнәғәт предприятиелары үҙебеҙҙә битлектәр, махсус хеҙмәттәр өсөн туҡылмаған полипропилен туҡыманан һаҡланыу комбинезондары тегә һәм дезинфекция сараларын күпләп сығара башланы. Ошо көндәрҙә Үзбәкстандан 4 миллион битлек тегеүгә етерлек сеймал - марля алынасаҡ, сөнки республикала сеймал юҡ.

Шулай уҡ алда торған иҡтисади көрсөктөң төп проблемаһы - эшһеҙлек. Әлегә уның күләме билдәһеҙ, әммә эшһеҙҙәр армияһы тағы ла тиҫтәләрсә мең кеше менән тулыланыуы ихтимал. Республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы аҙна һайын йөмгеһе 170 мең кеше эшләгән 456 предприятиены һәм көн һайын - система булдырыусы 22 предприятиены тикшереп күҙәтеп тора. 1 апрель мәғлүмәттәре буйынса алдағы көндәрҙә (бәлки, йәйгеһен) 5 меңдән ашыу хеҙмәткәргә эштән китеү хәүефе янай. Әле республика Хөкүмәте бындай категорияға нисек ярҙам итеү мөмкинлеге хаҡында уйлай һәм иҡтисадтың барлыҡ тармаҡтарынан да, муниципалитеттарҙан эшһеҙ ҡалыусылар тураһында мәғлүмәт менән ярҙам итеүҙәрен һорай. Эшһеҙ ҡалыу тигәс тә, эш биреүсе граждандарҙы тота килеп эштән сығарып ебәрә алмай, был процесс Хеҙмәт кодексы нигеҙендә башҡарыла, йәғни эштән ебәрелергә тейешле хеҙмәткәр ике ай алдан иҫкәртелергә тейеш. Шулай уҡ эшһеҙлек буйынса пособие түләү ҙә рәсми эш урыны булған һәм эшһеҙ ҡалғандарға ғына максималь күләмдә түләнеүе мөмкин, ә инде ялланып һәм рәсми эш хаҡы алмай эшләүселәр мәшғүллек үҙәгенә иҫәпкә торған осраҡта ла, уларға минималь күләм - 1700 һум ғына түләнәсәк. Социаль түләүҙәр буйынса һорауҙарығыҙға яуаптар алырға теләһәгеҙ, БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы сайтындағы брифингтарҙың яҙмаларын ҡабатлап ҡарай алаһығыҙ. Шулай уҡ бындай брифингты Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ла көн һайын уҙғара.

Был хәл-торошто тағы күпмегә һуҙылырын белһә, моғайын, бер Аллаһы Тәғәлә үҙе генә беләләр. Әммә, нисек кенә булмаһын, Соломон батша балдағында яҙылған һүҙҙәрҙе онотмайыҡ: "Барыһы ла үтә, был да үтер!"

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ТАРИХ ТӨПКӨЛӨНӘН СЫҠҠАН ҮҪӘРГӘНДӘР БЕҘ!




XX быуат башындағы милли башҡорт хәрәкәтендә, автономия өсөн көрәштә үҫәргәндәр араһынан да исемдәре бар Башҡортостан ерендә танылыу тапҡан күренекле шәхестәр ҡатнаша. Ә.-З. Вәлидиҙең көрәштәше Аллабирҙе Йәғәфәров (1886-1922) I мосолман съезынан аҙаҡ (1917 йылдың майында) башҡорт халҡының мәркәз шураһы бюроһы составына һайлана. Йонос Бикбов (1883-1943) Башҡорт хөкүмәтенең беренсе рәйесе, һуңынан Башревком ағзаһы була. Мөхәмәтхан (Мстислав ) Ҡулаев (1873-1959) 1919 йылдың башында Башҡорт хөкүмәте рәйесе вазифаһына тәғәйенләнә, Башкурдистан тип исемләнгән милли ерле мөхтәриәтте (автономия) таныу хаҡында Үҙәк Совет власы менән һөйләшеүҙәрҙә республика делегацияһы етәксеһе була. Әхмәҙулла Биишев (1896-1937) башҡорт ғәскәрен, милицияһын һәм контрразведкаһын ойоштороусыларҙың береһе булып таныла. Усман Ҡыуатов (1897-1957) Башҡорт Шураһы, Башревком ағзаһы була, ер эштәре наркомы вазифаһын башҡарһа, уның бер туған энеһе Ғүмәр Ҡыуатов һаулыҡ һаҡлау наркомы була. Харис Туймаҡаев батша армияһында поручик званиеһында хеҙмәт итә, 1918 йылдың йәйендә Силәбелә формалашҡан 1-се башҡорт пехота полкы командиры була, һуңынан Башҡорт корпусының штабс-капитаны званиеһында Башҡорт Хәрби Советының добровольцтар отрядтары бүлегендә эшләй.

Сөләймән Мырҙабулатов (1890-1931) БашЧК рәйесе була, һуңынан Бөрйән-Түңгәүер олоҫонда башланған халыҡ восстаниеһын (1920 йылда) етәкләй.

Совет власы йылдарында һәм унан һуңғы осорҙа үҫәргән ырыуы башҡорттары араһынан Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда киң танылыу тапҡан бик күп шәхестәр үҫеп сыҡты. Заманында БАССР Юғары Советы Президиумы рәйестәре булған Рәхим Ибраһимовтың һәм Фәйзулла Солтановтың, беренсе башҡорт совет яҙыусыларынан булған Булат Ишемғолдоң, яҙыусы, мәғариф наркомы Ғөбәй Дәүләтшиндың, Советтар Союзы Геройы Ҡотлоәхмәт Хәйбуллиндың, билдәле башҡорт геологы Басир менән журналист Дәүләткирәй Мәһәҙиевтарҙың, халыҡ шағиры Марат Кәримовтың, талантлы халыҡ йырсылары Сөләймән Абдуллиндың, Иншар Солтанбаевтың, драматург Азат Абдуллиндың, шағир Хәсән Назаровтың, мәғрифәтсе, яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваның, балерина, РСФСР-ҙың халыҡ артисы Леонора Ҡыуатованың, йырсы Мәғфирә Ғәлиеваның, физика-математика фәндәре докторы, профессор Роберт Яҡшыбаевтың, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәсүл Ҡарабулатовтың, республикабыҙҙың халыҡ хужалығында, мәғариф, мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәләрендә дан ҡаҙанған меңәрләгән үҫәргән башҡорттарының исемдәре халыҡ хөрмәтенә лайыҡ.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 10-13-сө һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Башҡорттар китте һуғышҡа

- Борон-борондан халҡыбыҙҙың Урал батырҙары, Ҡаһым, Салауат батырҙары яуыз шүлгәндәрҙең ҡара донъяһына, илебеҙгә баҫып инеүсе дошмандарға ҡаршы аяуһыҙ көрәшкән. Башҡорттоң саҡма тояҡлы аттары, илбаҫарҙарҙы ҡыуып, Полтава һәм Аҙау ҡәлғәләренән, Берлин һәм Париж урамдарынан уҙғаны бар. Граждандар һуғышы осоронда Ленин ҡалаһы Петроградты Юденич бандаларынан ҡурсалауҙа, көнбайышта - аҡ пандарға, көнсығышта - Колчак менән Дутовҡа ҡаршы аяуһыҙ көрәштәрҙә башҡорт яугирҙары бер ваҡытта ла һынатманы... Бына хәҙер тағы ла дошман беҙҙең күҙ ҡараһындай күргән изге Ватаныбыҙға бысраҡ ҡулын күтәрҙе. Балаҡайҙар, уландар! Беҙҙең халыҡ ғүмере буйы дошманға баш эймәне, башын һалһа-һалды, әммә үҙенең азатлығын, тыуған ерен бирмәне. Быуындарҙан килгән ошо изге йола-аманат - бөгөн һеҙҙең күңелдәрҙә. Беҙ, ҡарттар, һеҙҙең ошо изге аманатҡа тоғро буласағығыҙға, яуыз дошманды - фашистарҙы ҡыйратып, Тыуған илгә еңеү алып ҡайтасағығыҙға инанабыҙ. Ленин биргән бәхетте күҙ ҡараһындай һаҡлағыҙ, уландар, халҡыбыҙ намыҫына кер төшөрмәгеҙ!

Ҡарт, һуғышсылар сафына күҙ һирпеп, ҡулындағы аҡ ебәк төргәген систе. Унда көмөш ай балҡып киткәндәй булды. Был никель ҡынға тығылған ҡылыс ине. Ҡарт уны ике ҡулында ҡәҙерләп кенә күтәреп үтте лә Шайморатовҡа һуҙҙы.

- Улым, бына һинә Уралдың иң яҡшы ҡорсонан ҡойолған алмас ҡылыс - атай-олатайҙар ҡоралы. Был ҡылысты ла бөтә халҡыбыҙҙан аманат бүләк итеп ҡабул ит, яһил дошманды ошо ҡылыс менән рәхимһеҙ тураҡла! - тине. Шайморатов ҡарт ҡаршыһында теҙләнде лә: "Урал егеттәре Урал ышанысын аҡлар. Ысын йөрәктән әйтелгән изге теләгегеҙҙе тулыһынса үтәргә ант итәбеҙ!" - тип ҡылысты ирендәренә ҡыҫып үпте.

Бына паровоз ҡуҙғалырға гудок бирҙе, вагон тәгәрмәстәре хәрәкәткә килде. Оҙатып ҡалыусылар китеүселәргә һуңғы сәләмдәрен әйтеп ҡул болғаны, кемдәрҙер перрон буйынса йүгереште. Көнбайышҡа ҡарай ҡуҙғалған, боролоп-боролоп аҡҡан Дим һыуы кеүек оҙон эшелондан, тәгәрмәстәр таҡмағына аралашып, һаман-һаман алыҫлашып, яугирҙарҙың тыуған ергә бағышланған йөрәк моңо яңғыраны.

*Ата-бабаларҙың ҡанын һулап*
*Үҫкән саукаларҙан уҡ юндыҡ.*
*Һай, илкәйем, йәмле еркәйем!*
*Дошмандарҙы сыр-сыу айҡау өсөн,*
*Буҙ толпарҙай һайлап ат мендек.*
*Һай, илкәйем, йәмле еркәйем!*
*Яукайҙарға китеп ант итәбеҙ:*
*Намыҫыбыҙ яуҙа һаҡларбыҙ.*
*Һай, илкәйем, тыуған еркәйем!*
*Батырҙарҙан ҡалған йолаларҙы*
*Ҡанлы яуҙа беҙ ҙә аҡларбыҙ.*
*Һай, илкәйем, тыуған еркәйем!..*

Эшелондар бер туҡтауһыҙ көнбайышҡа ағыла, саҡрым һайын ғәрәсәтле яу ҡыры - фронт һыҙығы яҡынлаша. Башҡортостан территорияһынан сыҡҡансы, станцияларҙа туҡталған һайын, эшелонды ҡатын-ҡыҙҙар, балалар һырып ала, үҙенән-үҙе ҡайнар митингылар ҡубып, фашизмға ҡаршы халыҡтың нәфрәте тышҡа урғыла. Унан һуң, ҡурай, гармун тауыштарына ҡушылып, йыр-таҡмаҡ, ҡыҙып бейеүҙәр китә. Халыҡ, дошманды тиҙерәк еңеп, батыр булып тыуған ерҙәргә иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын теләй. Ҡатын-ҡыҙҙар, вагондар күҙҙән юғалғансы, яулыҡтарын болғап оҙатып ҡала.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Шәжәрә эшләтеү һәм нәҫел-нәсәп тураһында мәғлүмәттәр туплау хаҡы 20 - 25 мең һум самаһы. Ошоға ҡарамаҫтан, үҙ шәжәрәләрен төҙөтөргә теләүселәр бик күп, заказдар буйынса сират ике-өс айға тиклем барып етә.***



**Башҡорттар өсөн ырыу шәжәрәләре иҫ китмәле абруйлы тарихи мираҫ булып тора. Һуңғы осорҙа иһә нәҫел-нәсәп, ғаилә шәжәрәләренә ҡарата ла ҡыҙыҡһыныу бермә-бер арта бара. Ошоға бәйле байтаҡ ҡына һорауҙар ҙа килеп тыуа. Башҡортостан Республикаһының Милли архивы директоры урынбаҫары, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Ниязбай Булатбай улы СӘЛИМОВ менән шәжәрәләр темаһы буйынса уҙғарған әңгәмәне уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

**Халҡыбыҙ, ырыуҙарыбыҙ тарихы менән бер рәттән, һәр кемебеҙҙең нәҫел-нәсәп, ғаилә тарихы ла бар. Ул, асылда, шәжәрәлә сағылыш таба. Был һүҙ ғилми әҙәбиәттә генеалогия тип атала. Халҡыбыҙ йылъяҙмаһына ҡағылышлы байтаҡ мәғлүмәт Башҡортостан Республикаһының Милли архивы фондтарында һаҡлана. Үҙеңдең ата-бабаларың хаҡында элегерәк билдәле булмаған мәғлүмәттәр таба алыу һәр кемгә лә мөһимдер ул. Ошо хаҡта ниҙәр әйтер инегеҙ?**

- Һуңғы йылдарҙа йәмғиәттә үҙеңдең тарихи тамырҙарың менән ҡыҙыҡһыныу, нәҫел ептәрен барларға ынтылыш артҡандан-арта бара. Мәктәп йәшендәге балаларҙан алып хаҡлы ялға сыҡҡан оло йәштәгеләргә тиклемге төрлө быуын кешеләре ошо юҫыҡта эҙләнеүҙәр менән мәшғүл. Бигерәк тә пенсия йәшендәгеләр был эш менән ихлас шөғөлләнде. Бына, мәҫәлән, башҡорт ырыуҙарының Рус дәүләтенә ҡушылыуы хаҡындағы мәғлүмәттәр тап шәжәрәләрҙе өйрәнеү барышында билдәле булды.

Мин шәхсән ошо ата-бабаларыбыҙ ҡалдырған шәжәрәләрҙе, мәшһүр "Урал батыр" эпосы кеүек үк, киләсәк быуындарға ҡалдырылған тарихи код тип ҡуҙаллайым. Ҡыҙғаныска ҡаршы, төрлө тарихи катаклизмдар һөҙөмтәһендә, шулай уҡ совет осоронда алып барылған сәйәсәт йоғонтоһонда күп боронғо китаптар менән бергә яҙма шәжәрәләр ҙә юҡ ителеп, уларҙың бик аҙы ғына һаҡланып ҡалған.

**Тарихи шәжәрәләр яҙмышы шулай. Ә бына шәхси, нәҫел-нәсәп шәжәрәләрен тергеҙеп буламы һуң?**

- Әлбиттә, була. Иң тәүҙә ата-бабалар хаҡында телдән-телгә, быуындан-быуынға тапшырыла килгән мәғлүмәттәрҙе иҫәпкә алырға кәрәк. Һуңғы йылдарҙа тыуған яҡты өйрәнеүселәр архивҡа килеп, ошо документтарҙы өйрәнә, үҙҙәренә кәрәген күсереп ала ине. Әммә боронғо яҙмаларҙы үҙ эсенә алған ҡалын кенәгәләр йыш ҡулланыу һөҙөмтәһендә әкренләп туҙа башланы. Тап шуның өсөн дә һуңғы йылдарҙа уларҙың электрон күсермәләрен эшләтеүгә иғтибарҙы көсәйттек. Әйтергә кәрәк, беҙ Рәсәйҙә беренселәрҙән булып тарихи документаль сығанаҡтарҙы цифрлаштырып, үҙебеҙҙең электрон архивты булдырҙыҡ.

Быңдай материалдар менән ҡыҙыҡһыныусыларға бына нимәгә иғтибар итеүҙәрен теләр инем. Алдараҡ һүҙ барған ревизия, йәғни халыҡ иҫәбен алыу материалдарының бер өлөшө Башҡортостан Республикаһының Архив эштәре буйынса идаралығы сайтына (archives.RB@bashkortostan.ru) ҡуйылды. Ошо сайтта "Шәжәрә" бүлеге булдырылған, байтаҡ мәғлүмәтте тап шунан асыҡлауҙа үҙенә күрә бер "күпер" ролен үтәйәсәк.

1917 йылғы ауыл хужалығы һәм ер биләмәләре буйынса иҫәп алыу мәғлүмәттәре элегерәк зиһенебеҙгә ҡат-ҡат туҡып индерелгән бер стереотипты юҡҡа сығарған кеүек тойола: йәнәһе, революцияға тиклем башҡорттар үтә ярлы йәшәгән, наҙан булған һ.б. Ә ошо материалдарҙы ентекләп ҡарай башлаһаң, быйың киреһе күренә: ябай аҫаба башҡорттоң да бер нисә десятина ере булған, бер нисә тиҫтә йылҡы, һыйыр малы, кәзә-һарыҡ, ҡош-ҡорт аҫраған, хатта умарталар тотҡан - ундай ғаиләне нисек итеп фәҡир тип әйтмәк кәрәк. Тарихи документтарҙа ауылдарҙағы мәсеттәр, уларҙа хеҙмәт иткән уҡымышлы мулла-мәзиндәр, ауыл ҙәр алып барыу талап ителә. Шуны ла әйтеү фарыздыр: был хеҙмәт түләүле, шәжәрә эшләтеү һәм нәҫел-нәсәп тураһында мәғлүмәттәр туплау хаҡы 20 - 25 мең һум самаһы. Ошоға ҡарамаҫтан, үҙ шәжәрәләрен төҙөтөргә теләүселәр бик күп, заказдар буйынса сират ике-өс айға тиклем барып етә. Былтыр беҙҙең белгестәр 70-тән ашыу заказды үтәй алды.

Бында йәнә бер нәмәгә иғтибар итеү мөһим: исем-шәрифтәрҙән хасил булған шәжәрә схемаһын (А3 форматында) күрһәткән мәғлүмәт менән генә сикләнмәйенсә, беҙ ошо нәҫелгә ҡараған кешеләр хаҡында табылған барса мәғлүмәтте эсенә алған портфолио эшләп бирәбеҙ. Бында улар хаҡындағы төрлө



# БАШҠОРТ ШӘЖӘРӘЛӘРЕ ЛӘ...

## халҡыбыҙҙың милли бренды ул

нә. Күрәһең, олоғая барған һайын, буш ваҡыт та күбәйгәс, үҙ ырыуыңдың, ауылыңдың тарихи тамырҙарын өйрәнеүгә иғтибар арта баралыр.

Ә бына Совет осоронда революцияға тиклемге халыҡ тарихы һанға һуғылманы, ошо арҡала 70 йылға һуҙылған бушлыҡ барлыҡҡа килде. Хатта ки халыҡ тарихы сағылышының бер мөһим өлгөһө булған шәжәрә һүҙе лә ғәмәлдә онотолоуға дусар ителгәйне. Әммә уға ҡарата иғтибар уҙған быуаттың 70-се йылдарында ғилми тикшеренеүҙәр аша тергеҙелә башланы. Академик Раил Ғүмәр улы Кузеев тәү башлап башҡорт шәжәрәләрен тарихи сығанаҡ сифатында өйрәнеүгә юл асһа, минең ғилми етәксем, филология фәндәре докторы, профессор Рәйсә Хәлил ҡыҙы Халиҡова элекке ғәрәп яҙмалы документаль сығанаҡтарҙы ғилми яҡтан тикшереү йүнәлешендә күп эштәр башҡарҙы. Тап ошо сығанаҡтар аша халҡыбыҙҙың тарихи йәшәү рәүеше, ижтимағи, сәйәси һәм матди хәл-торошо хаҡында байтаҡ мәғлүмәттәр асыҡ. Әммә был ғына бик аҙ, бында ысынбарлыҡҡа тап килмәгән, үҙгәртелгән, хроникаһы бутап бирелгән мәғлүмәттәрҙең булыу ихтималлығын онотorға ярамай. Ысын шәжәрәне бары тик документаль нигеҙҙә, архивтарҙа һаҡланған сығанаҡтарға таянып ҡына тергеҙергә мөмкин. Тап ошо рәсми документтар нигеҙендә ике-өс быуат элгәре йәшәгән ата-бабаларыбыҙ хаҡында мәғлүмәт туплап була.

Батша Рәсәйендә лә халыҡ иҫәбен алыу кампаниялары даими ойошторолоп килгән, шуның һөҙөмтәһендә "Ревизские сказки" тип аталған материалдар тупланған. Әлбиттә, бында "сказки" һүҙе әкиәтте аңлатмай, ул һәр кеше һәм уның ғаиләһе хаҡында яҙып алынған мәғлүмәтте белдерә. Ошондай мәғлүмәттәр махсус ебәрелгән переписчиктар тарафынан яҙып алынып, йорт старшиналарының имзаһы һәм мисәте менән раҫлана. Бөгөнгө көндә Милли архивта XVIII быуат аҙағынан XIX быуат урталарына тиклемге иҫәп алыу материалдары һаҡлана. алырға була. Бында һәр кемебеҙгә аңлайышлы булған кимәлдә шәжәрә төҙөү методикаһы ла тәфсирләп аңлатылып бирелгән, төҙөлгән шәжәрәләрҙең үрнәк-өлгөләре лә бар. Әгәр ошо материалдарҙы иғтибарлап ҡарап сыҡһаң, артабан үҙеңдең ата-бабаларың хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе юллай башларға була.

Шәжәрә төҙөү өсөн тағы ла бер ҡиммәтле тарихи сығанаҡты ҡулланырға мөмкин. 1917 йылда Ваҡытлы Хөкүмәт тарафынан Бөтөн Рәсәй ауыл хужалығын иҫәпкә алыу сараһы ойошторола, беҙҙең архивта уның материалдары һаҡланып ҡалған. 2019 йылдың декабрендә ошо материалдарҙың электрон күсермәһен "Башархив" исемле проектҡа сығарҙыҡ: унда Өфө губернаһының 5 өйәҙенә ҡараған ауылдарҙа йәшәгән кешеләрҙең хужалыҡтары (подворные карточки) буйынса бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр табырға була. "Башархив.ру" сайтына инеп, ошо материалдар менән һәр кем таныша ала. Улар боронғо дәүерҙә йәшәгән олатайҙарҙы мәҙрәсәләре хаҡында ла мәғлүмәттәр һаҡланған. Шул уҡ мәсеттәрҙә булдырылған метрика кенәгәләре айырым кешеләр хаҡында даими теркәлә барған яҙмаларҙан ғибәрәт. Әлбиттә, уларҙа ғәрәп графикаһы ҡулланылғанлыҡтан, быңдай мәғлүмәтте уҡый алған белгестәр кәрәк. Әммә тап ошо метрика ҡағыҙҙарынан иң һуңғы ревизиянан (1859 йылдан аҙаҡ) һуң тыуған кешеләрҙең исем-шәрифтәрен, тыуған һәм үлгән йылдарын билдәләп була. Кемдеңдер ошондай мәғлүмәткә эйә булыу теләге бар икән, Карл Маркс урамындағы 4-се йортта урынлашҡан Милли архивҡа мөрәжәғәт итә ала.

Нәҫел тамырҙары, ырыу тарихы менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың көндән-көн арта барыуын иҫәпкә алып, өс йыл элек Шәжәрә үҙәге булдырҙыҡ. Унда боронғо ғәрәп яҙмаһын яҡшы белгән хеҙмәткәрҙәр эшләй. Әлбиттә, быңдай эҙләнеү эшен бесән эҫкертенән энә эҙләүгә тиңләп булалыр - һәр мөрәжәғәт буйынса оҙайлы, ентекле тикшеренеү белешмәләр, наград ҡағыҙҙары, ниндәй орден-миҙалдарға лайыҡ булыуҙары хаҡында һәм башҡа төрлө документтарҙың күсермәләре ҡуйыла. Ата-бабалары, яҡын туғандары хаҡында артыҡ мәғлүмәтле булмаған кешеләр яңы табылған документтар нигеҙендә үҙҙәренә ниндәйҙер асыш та яһай. Ә артабан ошо ерлектә һәр кем үҙ шәжәрәһен ҙурыраҡ форматта ла эшләтә алырға мөмкин.

**Ниязбай Булатбай улы, шәжәрә төҙөтөү өсөн үҙ нәҫелең хаҡында ниндәй мәғлүмәттәр билдәле булырға тейеш?**

- Беҙҙең белгестәр ярҙамында үҙ шәжәрәгеҙҙе төҙөтөргә ниәтләйһегеҙ икән, алдараҡ әйтелгән адрес буйынса килеп, ғариза тултырырға кәрәк. Унда атай яғынан да, әсәй яғынан да (мөрәжәғәт итеүсенән башлап) яҡын туғандарығыҙ хаҡында үҙегеҙгә билдәле булған барса мәғлүмәт мөмкин тиклем тулыраҡ итеп яҙып бирелергә тейеш. Исем-шәрифтәре тулыһынса, ҡа-

тын-ҡыҙҙың кейәүгә сыҡмаҫтан алда булған фамилияны, тыуған (үлгән) йылдары, тыуған, йәшәгән урындары - ауылдарының, райондарының исемдәре, олоҫ, өйәҙ һәм губерна атамалары (билдәле булған хәлдә) һ.б. - барыһы ла кәрәк. Был мәғлүмәттәр беҙҙең белгестәргә заказды үтәүҙе тиҙ арала атҡарып сығырға ярҙам итәсәк.

Йәнә бына нимәгә игтибар итергә кәрәктер: шәжәрәләр элек-электән ир-ат линияһы буйынса ғына төҙөлөп килгән, бының, әлбиттә, етди сәбәбе лә булған: аҫабалыҡ хоҡуғына ярашлы, әүәл ир балалар ғына ер биләмәһенә эйә була алған. Ҡыҫҡаһы, ул дәүерҙә шәжәрә ысынбарлыҡта документ ролен үтәгән - ғаиләлә малай тыуған осраҡта, ул бишектә ятҡанда уҡ ергә эйә булған.

Беҙ инде XXI быуатта йәшәйбеҙ. Бөгөнгө шарттарҙа, миненсә, һәр нәҫелдең шәжәрәһе ике яҡлы - атай яғынан да, әсәй яғынан да - булған туған-тыумасаны үҙ эсенә алырға тейеш. Бында тағы ла бер нескәлек бар: әгәр шәжәрә тулы түгел икән, тимәк, ике яҡтан да ете быуынға тиклем туғанлыҡ ептәре билдәле булмай. Бер кемгә лә сер түгел: туған-тыумаса менән аралашып йәшәмәү сәбәпле, йәштәр араһында бигүк алыҫ булмаған туғандарҙың никахҡа инеү осраҡтары бар. Ә бындай никахтарҙың генетик яҡтан нәҫел сәләмәтлегенә зыянлы булыуы һәр кемгә мәғлүм. Ғөмүмән, башҡорттарҙа өйләнешкәндә кейәү һәм кәләштең төрлө ырыуҙан булыуы күп быуаттар буйына яҙылмаған бер ҡанун рәүешендә ҡабул ителгән. Халҡыбыҙҙағы "ете ят" төшөнсәһе тап шул нигеҙҙә хасил булған да инде - ете быуын туғанлыҡтан уҙған егет һәм ҡыҙға ғына өйләнешеү рөхсәт ителгән. Ә төрлө ырыу вәкилдәре араһында башҡаларҙан никахлашыуҙың бер үк ваҡытта дөйөм башҡорт халҡының берҙәмлеген нығытыу өсөн бик һөҙөмтәле механизм булыуын да инҡар итеү мөмкин түгел.

**Быйыл, мәғлүм булыуынса, илебеҙҙә сираттағы халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы була. Ошо мөһим ваҡиға ла үҙ тамырҙарын барларға теләүселәрҙе арыу ғына ҡужғытып ебәргәндер, моғайын?**

- Нәҡ шулай! Республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайыш райондары, Татарстан һәм башҡа төбәк халҡының бер өлөшөн милләт мәсьәләһе лә ҡыҙыҡһындыра. 1917 йылға тиклем уҙғарылған халыҡ иҫәбен алыу сараларында һәр кем үҙ милләтен асыҡтан-асыҡ әйтеп яҙҙырған, ул дәүерҙә бер ниндәй ҙә сәйәси баҫым булмаған. Бөгөн шуныһы ҡыҙыҡ: үҙен башҡа милләт вәкиле тип һанап йөрөгән кешеләр, шәжәрәләрен төплө өйрәнеп, ата-бабаларының саф башҡорт икәненә инана. Был йәһәттән бик күп миҫалдар килтерергә мөмкин булыр ине.

**Үҙ шәжәрәһен булдырыу теләге һәр башҡорт ғаиләһендә лә барҙыр. Шул уҡ ваҡытта, бының өсөн үҙ мөмкинлеген юҡ йәки интернет менән эш итә белмәйһең икән, белгестәргә мөрәжәғәт итергә тура килә. Үҙегеҙ әйтеүегеҙсә, ғаилә шәжәрәләрен эшләтеү үтенесе менән мөрәжәғәт итеүселәр арттандан-арта бара. Халыҡ ихтыяжын үтәү өсөн Милли архив тағы ниндәй саралар күрә?**

- Республика етәкселеге һуңғы йылдарҙа архив хеҙмәте хаҡында оло хәстәрлек күрә. Бороңғо документтарҙың һаҡлау өсөн Хөкүмәтебеҙ Милли архивҡа Гоголь урамында буш торған бинаны һатып алып бирҙе, бер нисә бинала капиталь ремонт уҙғарылды. Юғары тиҙлектә эшләгән өр-яңы ҡеүәтле сканерҙарыбыҙ, замана компьютерҙарыбыҙ бар. Архив документтарының, атап әйткәндә, халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренең электрон күсермәләрен эшләп, улар менән цифрлы форматта танышыу алырлыҡ мөмкинлек булдырыуға ирештек. Ул яҙмаларҙы өйрәнеү өсөн бөтә шарттар булдырылған махсус уҡыу залыбыҙ бар. Бында һәр кеше үҙен ҡыҙыҡһындырған документтарҙы ҡарай ала, ә белгестәребеҙ тейешле консультация бирә. Икенсе төрлө әйткәндә, беҙгә мөрәжәғәт иткән кеше, уҡыу залында бер нисә көн шөғөлләнеп, ғаилә шәжәрәһен үҙе лә төҙөй ала.

**Белеүебеҙсә, Милли архив уҡыусылар һәм йәштәр араһында төрлө ижади бәйгеләр ҙә ойоштора...**

- Эйе, шәжәрәләр аша йәштәрҙә ватансылыҡ тойғоһо тәрбиәләү, халҡыбыҙ тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу, уларҙы ғилми тикшеренеүгә йәлеп итеү маҡсатында 2017 йылдан алып өлкән класс уҡыусылары, студенттар һәм 30 йәшкә тиклемге йәш кешеләр араһында генеалогик тикшеренеү эштәре буйынса асыҡ конкурс уҙғарабыҙ. Быйылғы өсөнсө ижади бәйге Бөйөк Ватан һуғышында еңеүгә 75 йыл тулыуға арналды, конкурс "Беҙ - Бөйөк Еңеү йылъяҙмасылары" тип атала. Мотлаҡ талаптар - һуғышта ҡатнашҡан олатайҙар һәм тылда тир түккән өләсәйҙәр тураһындағы ғилми хеҙмәтте архив документтарына таянып эшләү һәм уларҙың шәжәрәһен әҙерләү. Конкурс эштәрен 10 мартҡа тиклем ҡабул иттек. Ижади бәйгегә йомғаҡ апрель урталарында яһаласаҡ, лауреаттарҙы ҡиммәтле бүләктәр һәм дипломдар көтә, бынан тыш, һәр ҡатнашыусыға сертификат биреләсәк.

Әңгәмәбеҙ аҙағында милләттәштәребеҙгә, айырыуса йәштәргә мөрәжәғәт итеп, бына нимә әйтер инем. Хәҙерге көндә башҡорт ҡурайы, башҡорт балы, башҡорт аты, башҡорт ҡымыҙы кеүек милли брендтарыбыҙ бар. Рәсәйҙә шәжәрә төшөнсәһен башҡорттарҙан башҡа милли символ кимәленә күтәргән бер халыҡ та юҡ әле. Әйҙәгеҙ, бергәләшеп, халҡыбыҙ паспортына бәрәбәр башҡорт шәжәрәләрен дә милли бренд сифатында ҡулланыуға өлгәшәйек. Ошо йәһәттән төп маҡсатыбыҙ ҙа шулай булырға тейештер: һәр башҡорт ғаиләһе үҙ шәжәрәһен булдырһын!

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

Көнбайыш Башҡортостан халҡының килеп сығышы тураһында үрҙә һанап үтелгән фараздар тарихи сығанаҡтарға тура килмәй. **Башҡорттар, хәҙерге заманға тиклем үҙҙәре йәшәп килгән бик ҙур аҫаба ерҙәрҙең хужалары булараҡ, быуаттар төпкөлөнән бирле Көнбайыш Башҡортостандың да автохтон халҡын тәшкил иткән. V, VII, VIII, X ревизиялар, 1917 йылғы Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы һәм ер иҫәбен алыу мәғлүмәттәре ошо фекерҙең дөрөҫлөгөн тулыһынса раҫлай.**

Башҡортостанға урыҫ булмаған крәҫтиәндәр күсеп килә башлағанға тиклем бында йәшәүсе төп халыҡ ауылдары бер милләтле булған. XVIII быуатта төбәктең татар, мишәр, мари, сыуаш, удмурт крәҫтиәндәре менән киң колонизацияланыуы һөҙөмтәһендә башҡорт ауылдары этник яҡтан ҡатнаш була башлай, быны 1795 йылғы ревизия материалдары яҡшы күрһәтә.

Бөгөлмә өйәҙендә 29 ауылдың 26-һы (89,7%), Минзәләлә - 150 ауылдың 88-е (58,7%), Бәләбәйҙә - 186 ауылдың 103-ө (54,4%), Бызаулыҡта - 4 ауылдың 2-һе (50%), Бөрөлә - 182 ауылдың 65-е (35,7%), Өфө өйәҙендә - 84 ауылдың 27-һе (32,1%) ҡатнаш булып, башҡа өйәҙҙәрҙә ундай ауылдар бик аҙ - 6,6-13,6 процент ҡына тәшкил итә. Ҡатнаш ауылдар өлөшө артабан да арта бара.

VII ревизия (1816 йыл) һөҙөмтәләре буйынса Бөгөлмә өйәҙендә тик башҡорттар ғына йәшәгән ауылдар ҡалмай, бөтә ауылдар ҙа ҡатнаш булып китә. Минзәлә өйәҙендә ауылдарҙың дүрттән бер өлөшөнән аҙ ғына күберәге саф башҡорт ауылы булһа, башҡорт, татар, мишәр, типтәрҙәр ҡатнашып йәшәгән ауылдар 73,4% тәшкил итә. Бындай нисбәт, әлбиттә, башҡорттарҙың был төркөмөнөң татарҙар тарафынан ассимиляцияланыуында хәл иткес роль уйнай.

1841-1842 йылдарҙа 13 башҡорт һәм 5 мишәр кантоны начальниктары тарафынан (Ырымбур ҡаҙна палатаһы талабы буйынса, күрәһең) төҙөлгән 18 ведомоста башҡорт, типтәр һәм мишәрҙәрҙең социаль-иҡтисади хәлен сағылдырған төрлө мәғлүмәттәр тупланған. Ведомостар 1834 йылғы VIII ревизия буйынса ауылдар һанын һәм ошо ике төркөмгә ҡараған халыҡ иҫәбен күрһәтә. Улар үҙенә күрә уникаль сығанаҡ булып, кантон идаралығы осоронда башҡорт һәм мишәрҙәрҙең ер биләүе һәм файҙаланыуын, уларҙың хужалыҡтарының үҙенсәлектәрен һәм ижтимағи мөнәсәбәттәрен өйрәнеү мөмкинлеген бирә.

Башҡортостан тарихының кантонлыҡ осорон өйрәнеүсе тикшеренеүселәр йыш ҡына кантондарҙың нумерацияһын күрһәткәндә хата ебәрә. 1798-1803 йылдарҙа 11 башҡорт һәм 5 мишәр кантоны була. 1-се кантон Пермь губернаһының Пермь һәм Уса, 2-се кантон - Екатеринбург һәм Шадринск өйәҙҙәренә, ҡалғандары Ырымбур губернаһына ҡарай. 3-сө кантон Троицк өйәҙендә, 4-се - Силәбе, 5-се - Бөрө, 6-сы - Верхнеуральск, 7-се - Өфө, 8-се - Стәрлетамаҡ, 9-сы - Ырымбур, 10-сы - Бөгөлмә, 11-се - Минзәлә өйәҙендә урынлаша. 1803 йылда Шадринск өйәҙе башҡорттарынан айырым административ берәмек сифатында тағы ла бер кантон төҙөлә. 1847 йылдан 1855 йылға тиклем 13 башҡорт, 4 мишәр кантоны була. 1855 йылдан 1863 йылға тиклем Башҡорт ғәскәренә типтәр һәм бобылдәр ҡушыла, кантондар һаны 28-гә етә. 1863-1865 йылдарҙа кантондар һаны яңынан 11-гә тиклем ҡыҫҡартыла.

1865 йылда башҡорттар һәм припущенниктар ғәскәри сословиенан сығарылып, гражданлыҡ ведомствоһы ҡарамағына күсерелә. Улар менән губерна һәм өйәҙҙәрҙең крәҫтиән эштәре буйынса присутствиелары һәм мировой аралашсылар (посредниктар) идаралығы эш итә. Кантон идаралығының бөтөрөлөүе башҡорттарҙы һәм припущенниктарҙы натураль хеҙмәттән һәм хакимиәттең көндәлек күҙәтеүенән азат итеп, уларҙың хужалыҡ итеү башланғыстарын "бәйҙән" ысҡындыра.

Башҡортостан тарихының ошо осорон объектив өйрәнеү йәһәтенән күрһәтелгән документтарҙың ғилми әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Ведомостарҙа һәр кантонда һәм өйәҙҙә нисә башҡорт һәм мишәр ауылы булыуы хаҡында мәғлүмәттәр бар. Ҡыҙыҡһынған кеше уларҙан ауылдарҙағы, йорттарҙағы (юрта - ауылдар төркөмө), өйәҙ һәм кантондарҙағы ғына түгел, ә һәр түбәгә һәм олоҫҡа ҡараған кеше иҫәбен таба ала. Ведомостар ер биләмәләре буйынса һәр ауылдың ҡайһы түбәгә һәм олоҫҡа ҡарағанын күрһәтә. Уларҙа ауыл кешеләренең ергә мөнәсәбәте - аҫаба, һатып алынған, ҡаҙнаға ҡарағанында йәки күртымға алынған ерҙә йәшәүе теркәлгән, шөғөлдәре күрһәтелгән. Ведомостар буйынса мишәр ауылдарының барлыҡҡа килеү ваҡытын билдәләргә була.

**(Дауамы бар).**

**Башҡортостан кантондарында 1850 йылғы IX ревизия буйынса халыҡ иҫәбе:**

| Яңы кантондар № | Элекке кантондар № | Өйәҙҙәр | 1850 й. IX ревизия буйынса яңы кантондарҙа халыҡ иҫәбе | | | | Кантон квартиралары |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | Башҡорттар | Мишәрҙәр | Типтәрҙәр | Бөтәһе | |
| 1 хеҙм. | 9-ның өл. | Бызаулыҡ | 23585 | 710 | 1599 | 25894 | Ямангол |
| 2 хеҙм. | 9 | Ырымбур | 25379 | - | - | 25379 | Сәйеткол |
| 3 хеҙм. | 9 | Ырымбур | 22070 | - | - | 22070 | Ейәнсура |
| 4 хеҙм. | 6 | Верхнеуральск | 23783 | - | - | 23783 | Юлдыбай |
| 5 хеҙм. | 6 | Верхнеуральск | 24501 | - | 130 | 24631 | Темәс |
| 6 хеҙм. | 6 | Верхнеуральск | 24254 | - | 101 | 24354 | Сермән |
| 7 | 4 | Троицк | 7332 | 1210 | 9210 | 17752 | Туңғатар |
| 8 | 5,6, 2-нең өлөшө | Өфө, Троицк, Красноуфимск | 28379 | 7004 | 11369 | 46752 | Т. Ҡыйғы |
| 9 | 6 | Силәбе | 17827 | 971 | - | 18798 | Мәтәле |
| 10 | 6 | Силәбе | 12913 | 5785 | 206 | 18904 | Атйетәр |
| 11 | 2 - 3-н өл. | Екатеринбург Шадринск | 12472 | 12245 | - | 24717 | Һары |
| 12 | 1 | Уса, Пермь | 17029 | - | 980 | 18009 | Елпачиха |
| 13 | 10 | Бөрө | 14334 | 5227 | 23699 | 45889 | Байғужа |
| 14 | 10 | Бөрө | 17963 | 113 | 11001 | 29087 | Ваныш-Алпауыт Боғдан |
| 15 | 10 | Бөрө | 13404 | 14059 | 21385 | 48848 | Әсән |
| 16 | 10 | Бөрө | 14580 | 6019 | 16615 | 37224 | |
| 17 | 11-нең өл. | Алабуға, Сарапул | 5176 | - | 7088 | 12265 | Салауыш Мәстәй |
| 18 | 11 | Минзәлә | 31479 | 506 | 16271 | 48256 | Нуркай |
| 19 | 11 | Минзәлә | 16169 | 413 | 12968 | 28849 | И. Дөмәй |
| 20 | 12 | Бәләбәй | 11872 | 2461 | 23526 | 37859 | Төпкилде |
| 21 | 12 | Бәләбәй | 17233 | 4565 | 21915 | 43713 | Себенле |
| 22 | 12 | Бәләбәй | 18840 | 9925 | 7735 | 36500 | |
| 23 | 12-нең өл. 9-ның өл. | Бөгөлмә, Богорослан Бызаулыҡ | 14506 | 13 | 30577 | 45096 | Ҡыҙылъяр |
| 24 | 8 | Өфө | 5865 | 22311 | 8426 | 36632 | Ғүмәр |
| 25 | 8 | Өфө | 7235 | 6747 | 12531 | 27513 | Ҡабаҡ |
| 26 хеҙм. | 7 | Стәрлетамаҡ | 10302 | 6527 | 9224 | 26053 | Я. Ҡарамалы |
| 27 хеҙм. | 7 | Стәрлетамаҡ | 18105 | 743 | 5076 | 23924 | Усман |
| 28 хеҙм. | 7 | Стәрлетамаҡ | 22739 | 3011 | 334 | 27084 | Сабаш |
| **Бөтәһе** | | | **480317** | **110595** | **260975** | **851887** | |

✓ ***Осоу тиҙлегендә ыласындан, бәлки, ҡарсығаға ғына ҡалышмайҙыр. Ҡорбанына уҡ кеүек өҫтән ташланған сапсан уның арҡаһына, муйынына, башына үткер тырнаҡтары менән һуғып өлгөрә.***

# АТА-БАБАМ ҺӨНӘРЕ - ҠОШ СӨЙӨҮ

*Спартак ИЛЬЯСОВ*



## Ыласындар ғаиләһендәге ҡоштар

Бөркөттәр ғаиләһендә һунар өсөн тотолған ҡоштар сикле. Мәҫәлән, таҙғараны, диңгеҙ бөркөтөн, йылан бөркөтөн һунарға өйрәтеү осраҡтары тәбиғәт һәм һунар баҫмаларында ла осрамай. Ә бөркөттәрҙең дүрт төрө - бөркөт, көсөгән, ялан бөркөтө, ҡарағош - һунар өсөн өйрәтелгән. Уларҙың һунар әүҙемлегенә лә, алымына ла, хатта осҡорлоғона, таһыллығына йәшәгән ере, тәбиғәте йоғонто яһаған. Шулай ҙа боронғо атай-олатайҙарҙа ваҡ ҡоштар менән һунар итеү күпселекте тәшкил иткән, булһа кәрәк. Беренсенән, уларҙы табыуы ла еңел, сөнки күп, икенсенән, өйрәтеүе еңел, өсөнсөнән, аҫрағанда сығым әҙ, дүртенсенән, табыш күберәк.

Ыласындар ғаиләһендәге ҡоштар менән торнаға, ҡаҙға, үрҙәккә, ҡыр тауығына, һуйырға, селгә, ағунаға, ҡуянға һунарсылыҡ иткәндәр.

Ыласындар ғаиләһендәге тәүгеһе **сапсан**. Кәүҙәһе һәм ҡанаттары осҡанда оҙон, осло. Ҡойроғо ҡанаты менән бер оҙонлоҡта. Ҡараҡ арҡаһында буйҡат-буйҡат күгелйем һыҙмалар бар. Башы һорғолт ҡара, күҙ тирәһенән боғағына ике яҡтан да һалбырап мыйыҡ һүрәте төшә. Суҡышы, оҙон аяҡтары ҡара, тубығынан тырнаҡтарына тиклем асыҡ. Тырнаҡтары ҡырҡма, оҙон, бик үткер һәм осло. Күкрәк һәм бот мускулатураһы үҫешкән. Түше һәм эсе күгелйем аҡһыл, уҡ башағы кеүегерәк, әммә тупаҫ, ҡара-көрән билдәләр бар. Кәүҙәһе ала ҡарға самаһы. Текә ултыра. Ултыраҡ ҡош. Күберәк ҡая таштарға оя ҡора, ләкин ағас башында ла ояһы осрай. Һарғылт йомортҡаларында көрән таптар бар. Ояла, ғәҙәттә, өс-дүрт йомортҡа була. Оя сыбыҡ-сабыҡтан ҡорола, эсенә кипкән ваҡ үлән түшәй. Ояһына яҡын барһаң, ғауғалы, "ҡыяҡ-ҡыяҡ" тип ҡысҡырып, аталы-инәле тирә-йүндә осоп йөрөйҙәр. Әгәр янында эт булһа, уға ла һөжүм итәләр, әммә йәбешмәйҙәр, тик тоҡоялар ғына. Күҙҙәре ҡара, тыштан дүңгәләк менән ҡоршалған. Ҡаршы күҙгә сәнсеп килеп кергән кеүек. Ул һунарға ҡарсығаға ҡарағанда ауыр өйрәнә. **Ыласындың** холҡо бик текә, тәкәббер, ваҡлашмай. Бер типкәндә ала алмаһа, бик һирәк осраҡта ғына икенсе тапҡыр һөжүм итә. Шуға ла халыҡ телендә әйтем бар: "Ыласын бер тибә". Быны ирҙәрҙең алымына, эш йә башҡа төр ынтылышына ҡарап әйткәндәр. Әммә ыласындың бер холҡо хужаһына һәр саҡ оҡшаған. Хужаһы ҡулынан ашап өйрәнгән ыласын һәр саҡ табышты типкәндән һуң, уға кире осоп ҡайтып, ҡулынан "бүләк" алыр булған. Әммә ул ерҙә йүгереп барған йәнлекте осоп барған ҡошҡа ҡарағанда ауыр алған. Ыласындарҙың башҡа туғандарына ҡарағанда, һунарҙа тағы ла бер кире яғы бар. Ул һәр ваҡыт үрҙәкте, ҡорҙо, ҡаҙҙы, ғөмүмән, нимәне һуғыр булһа ла, уға ташланыр ҡорбанына ҡарағанда өҫтә булыуы шарт. Осоу тиҙлегендә ыласындан, бәлки, ҡарсығаға ғына ҡалышмайҙыр. Ҡорбанына уҡ кеүек өҫтән ташланған сапсан уның арҡаһына, муйынына, башына үткер тырнаҡтары менән һуғып өлгөрә, хатта бүтәгәһе, эсе ярылып килеп төшкән үрҙәктәр ҙә була.

Оянан себеш йә етешеп осор осорҙа, йә осоу осороноң башында алған себештәр ирекә ҡыш сыҡҡанға, төләп өлгөрмәгәндәренә ҡарағанда ауыр өйрәнә. Бигерәк тә ололары. Оло бөркөттө, ыласынды, ҡыйғырҙы өйрәтеү осоро өс-дүрт ай, ярты йәки бер йылға тиклем дауам итә. Ә йәш ҡоштарҙы ай, ай ярым ваҡыт осоронда өйрәтеп һунарға алып сығыу мөмкинлеге булған.

Ҡоштарҙы өйрәнеү, белеү, ғөмүмән, бик ауыр шөғөл. Тәбиғәтте, ундағы тереклекте ни тиклем яратма, иғтибарлы булма, һәр береһенең: ҡоштарҙың, хайуан-йыртҡыстарҙың үҙенсәлектәрен, холоҡшөғөлөн, тәбиғи булмышын өйрәнеү, белеү өсөн бер ғүмер әҙ кеүек. Улар бит йәшәү рәүеше менән дә төрлөсә. Ҡайһы бер ҡоштар беҙҙә оялап, беҙҙә бала сығарып, үҫтереп, ҡышлар өсөн йылы яҡҡа осорға мәжбүр булғандар. Ә ултыраҡ ҡоштар? Улар йыл әйләнәһенә беҙҙә йәшәйҙәр. Тимәк, улар ҡулайлашҡандар, ҡыш көнө лә беҙҙә аҙыҡ таба алалар. Унан, күскенсе ҡоштар бар. Беҙҙең яҡта бала сығара, әммә ҡышты яҡын-тирәлә үткәрә, йә бөтөнләйгә китмәй. Мәҫәлән, сәүкә һуңғы утыҙ йыл тирәһендә даими рәүештә ҡышҡа беҙҙә ҡала. Ҡоҙғон да шулай уҡ. Әммә беҙгә һалҡыныраҡ яҡтан осоп килеп ҡыш үткәреп, яҙ тағы ла үҙҙәренең һалҡыныраҡ иленә осоп ҡайтыусы ҡоштар бар. Мәҫәлән, аҡ һупай, майҙыгис йәки ҡарабаш һары турғай һ.б.

Ҙур йыртҡыс ҡоштар менән сағыштырғанда, ыласындар һәм уларҙан ҙурыраҡ шоңҡар, беҙҙеңсә әйткәндә, төйҙөргәндәр ғаиләһенә ингәндәр ярайһы уҡ күп. Ыласын, ҡарсығалар төрө: ҡыр ҡарсығаһы, бүҙәнә ҡарсығаһы, ваҡ ҡарсыға, яғылбай, торомтай, сысҡан типкес, ҡыйғыр һәм башҡа төрҙәре бар. Ыласындарҙың: сапсанды, ҡыйғырҙы, яғылбайҙы, торомтайҙы, мүктәрәне, ҡарсығаларҙың төрлөһөн дә ҡулға һәм һунарға өйрәткәндәр. Һәр ҡайһыһының тәғәйенләнеше буйынса үҙ алымы. Мәҫәлән, **торомтайҙы, бүҙәнә ҡарсығаһын** ваҡ үрҙәктәргә, бүҙәнәгә, селгә, ағунаға өйрәткәндәр. Был ҡоштарҙың һауанан ҡурҡыныс килгәндә ҡамыш, үлән, бесән, һалам аҫтына йә ергә лыпын ятып йәшеренә торған ғәҙәте бар. **Торомтай, ваҡ ҡарсыға** - һауала аҫылынып тора торған ҡош. Йәшеренгән ҡорбанын ул шулай эҙләй, көтә. Ҡорбаны йә ҡыбырлап, йә күҙгә күренеп ятһа, йә ҡасып осһа, ул шунда уҡ өҫтөнә ташлана. Тырнаҡтары менән ҡырҡа һуға. Үлтергәс, ҡорбаны өҫтөндә сипылдаған кеүек тауыш сығарып, ҡанаттарын ҡағып-ҡағып ултыра ла йөнөн туҙҙырып ашай башлай. Ҡыйғыр, ҡарсыға осҡан ҡошто ла, ҡасып ерҙән йүгереп барған ваҡ йәнлекте лә тота. Ул ерҙән оса. Ыласын кеүек ҡорбанына ташланыр өсөн юғарыға күтәрелмәй.

**Ҡарсығаның** төрлөһө була. Ҡарғанан ҙурырағы ҡорҙо, һуйырҙы, ҡаҙҙы, хатта торнаны ла һуға. Бәләкәй ҡарсығалар һәм ҡыйғыр ваҡ ҡоштарҙы ала. Ҡар ҡарсығаһының арҡаһы көрән, эс яғы аҡһыл-һоро, йыш арҡыры һыҙаттары бар. Күҙенең өҫтөндә аҡ ҡашы билдәле. Ҡуйы ботаҡтар, ваҡ ағастар араһынан бик оҫта оса, ҡойроғо оҙон. Тауышы бик яңғырауыҡлы. Ә күҙҙәре - төҫөнә ҡарап. Бик һирәк, әммә ҙур урмандарҙа, Урал төпкөлөндә аҡ ҡарсыға ла күргәнем бар. Шуныһы ҡыҙыҡ: аҡ ҡарсығанан ағас башында ултырған ҡор ҙа, һуйыр ҙа ҡурҡа һалмай. Шуның менән алдана. Ҡарсыға уларҙы ағас башынан шунда уҡ һуғып төшөрә. Тауышы яңғырауыҡлы. "Ҡъяҡ-ҡъяҡ-ҡъяҡ" тип тауыш бирә. Ултыраҡ ҡош. Ҡыш көнө лә беҙҙә үткәрә. Шырлыҡтарҙа ҡышҡы турғайҙарҙы, ҡуян, ҡор, ауылға килеп күгәрсен аулай. Йыл һайын үҙ ояһын яңырта. Ваҡ, бәләкәй ҡарсығалар ағас башында оялай, ә ҙурҙарының күңеленә ҡая таштары яҡын. Әммә шуныһы шарт: ҡая йә көньяҡҡа, йә көнсығышҡа битле булһын. Ваҡ ҡарсығаларҙың күҙҙәре ҡара. Ауылға яҡын килһә, күгәрсендәрҙе, сыйырсыҡтарҙы, тауыҡ себештәрен тибә.

Ҙур бөркөттәр һәм ҡарсығалар араһында кәүҙә дәүмәлдәре менән урталыҡта торған йыртҡыс ҡоштар бар. Халыҡ төйҙөргән тип атаһа ла, әҙәбиәттә **төйлөгән** тип яҙылған ҡош. Балабан тип яҙылып, **балапан** тигәне лә бар. Әммә һунарға шоңҡарҙы һәм балапанды ғына өйрәткәндәр. Ә төйҙөргәнде, ҡамышҡараны һунарға өйрәтеүҙәре билдәле түгел. Башҡа йыртҡыс ҡоштар менән осрашҡанға ҡарағанда төйҙөргән менән йыш осрашырға тура килһә лә, ҡылыҡ-ғәҙәтенә әҙ иғтибар биргәнмен. Бала ваҡытта ҡаҙ бәпкәләрен йәшел үләндә көткәндә һауала бәпкәләрҙе һағалап осҡан төйҙөргәнде салҡатан ятып күп күҙәткәнем булды. Кеше юҡта ҡаҙ бәпкәләренә баҡышып ата ҡаҙ менән талашҡан төйҙөргәнде күп тапҡыр аралағаным бар. Кәүҙәһе ҡара ҡарға самаһы. Ҡоҙғон ҙурлығы ла осрай. Кәүҙәһе ҡара-көрән. Ҡанаттарының бер осонан икенсеһенә тиклем бер метр, унан да күберәк, 120 - 130 сантиметрға тиклем еткәндәре бар. Ҡойроғо оҙон, аса, боролғанда елкән кеүек борола. Ҡалтыранған кеүегерәк тауыштан һуң һыҙғырыу ишетелә. Һыу ҡоштарына, бәпкәләргә ташлана. Күсмә ҡош. Беҙҙең яҡҡа апрель аҙағында ҡайтып, ағас башында оя ҡора. Уның ояһының тирә-яғында ҡарға ояһы булмай. Ә ояһының башы ябыулы булғанлыҡтан, һайыҫҡан ояһы осрай. Таплыраҡ аҡ ике йомортҡаһы була. Батыр ҡош. Әммә ҡулға өйрәнмәй, ҡулдан ашамай, ғорур, аслыҡтандыр, ахыры, үлә. Ҡанатында аҡ ҡауырһындары була. Һунарға өйрәтелгәнлеге билдәһеҙ.

**Балапандың** арҡаһы һорғолт-көрән. Ҡойроғо ҡыҫҡа, һорғолт, унда һары төҫтәге арҡылы һыҙаттар бар. Өҫтөндәге ҡаурый-йөндәренең осо һары. Аяғы ҡыҫҡа, йыуантыҡ, асыҡ. Түше һәм эсе көрәнһыусыбар. Томшоғо ҡара, кәкере һәм ҡыҫҡа. Ике яҡ яңағы көлһыу-аҡ. Һоро күҙе һары тәгәрмәс эсендә. Яр буйындағы таштарҙы үҙ итә. Ағасҡа ла ҡуна. Ялан ерҙе үҙ итә. Йомортҡаһы шыйыҡ көрән, ҡара һипмәһе бар. Ғәҙәте буйынса балапан ялҡау кеүек. Ағаста йәки таш түшендә ултырғанда түбәндә йылға күләүегенән сөрәгәй үрҙәктәр осһа, башта ул вайымһыҙ ғына уларҙың осоу йүнәлешен күҙәтә. Үрҙәктәр, ғәҙәттә, ҙур ғына түңәрәк яһап кире борола һәм түбәнәйә башлай. Шул саҡта балапан үрҙәктәргә ташлана. Түбәнгә, төшөр ерҙе ҡарап килгән үрҙәктәр уны шәйләмәйҙәр. Ҡабырғанан һөжүм итеп, берәүһен һуғып төшөрә, әммә күп осраҡта уға ергә төшөргә ирек бирмәй, һауала уҡ тотоп алып, кире ултырған таш түшенә ҡуна. Унан һуң ел ҡая өҫтөнә ҡаурыйҙар һәм мамыҡ тарата...

Һәм **шоңҡар** тураһында. Күсмә ҡош. Беҙгә көндәр һыуынып, ҡар яуғас килә. Беҙҙең тирәлә оя ла ҡормай. Күрәһең, ул тундра менән Урта Урал климаты ҡошо. Яҙ булһа, китә, күрәһең, әҙ генә төньяҡ һыҙатҡа. Һирәк осрай. Кәүҙәһе ҡара ҡарғанан ҙурыраҡ. Дөйөм төҫө аҡ, әммә бик шыйыҡ һарғылттары осрай. Арҡаһы, ҡанат өҫтө ҡара-көрән, өсмөйөш башы кеүек таптар бар. Түшендә - арҡыры буйҡат һыҙаттар. Дөйөм ҡарағанда аҡ-сыбар ҡош. Текә ултыра, йыуантаҡ. Йылы яҡҡа китмәй. Ҡыш көнө күбә, дүңгәк өҫтөндә оҙаҡ ултыра. Һәр саҡ шырлыҡ ситенән ҡуян һағалай. Төньяҡтан беҙгә ҡышлар өсөн килгән аҡ турғайҙар туп булып шырлыҡтан яланға осһа, шунда уҡ баҫтырырға тотона. Шәшкегә ташланып, үлтерелеп, шәшкенән ашалған шоңҡарҙың туҙып ятҡан ҡаурыйҙарын осратҡаным бар. Аяҡтары ҡыҫҡа, бармаҡтары йыуан, йөн менән ҡапланған, һары. Тауышын ишеткәнем юҡ. Шоңҡарҙы тере ҡуян менән алдап, ау менән тотҡандар. Һунарға еңел өйрәнгән. Ашауға талымһыҙ, йылыға түҙемһеҙ булған.

Һунарға ҡош өйрәтеү шөғөлө хәҙерге Рәсәйҙә боронғо ваҡытта тик башҡорт, алтай, тува халҡының ғына кәсебе булған. Бөркөттө, ҡарсығаны өйрәтеп тотҡан башҡорт, ғәҙәттә, мал-тыуары күп, донъяһы ҡалын, даими кәсебе булған билдәле, күп осраҡта дәрәжәле кеше. Ҡош менән һунар итеү, билдәлелек, абруй килтергән. Абруйлылыҡ мал өҫтәгән, малы күп кеше зауыҡ өсөн һунар иткән. Әммә ҡоштоң төп хужалары уның менән бергә йәшәгән, бергә донъя көткән, уның менән һунар итеүҙе тормош сығанағы тип ҡараусылар булған. Сөнки зауыҡ башҡа, хеҙмәт башҡа. Тибер ҡошто үҙенә хеҙмәткә алыр кеше уның төрөн, ҡылығын, булмышын, мөмкинлеген, тәбиғәтен өйрәнгән. Йыл әйләнәһенә ҡошто яңы ит менән тәьмин итеү ул шөғөлгә бик-бик бирелгәндәр, көн һайын ҡош менән мәшғүл булғандар өсөн генә. Ҡош сөйөү алымдарын беҙгә килтереп еткереүселәр зауыҡсылар түгел, ә һөнәрселәр. Улар ғына ысын һунарсылар, йомғаҡты, ҡош сөйөү серҙәрен быуындан-быуына һүтеүселәр.Бөркөт, ҡарсыға өйрәтеү хәҙерге циркТарҙа һөтимәрҙәрҙе өйрәтеүгә ҡарағанда байтаҡҡа ауыр булғандыр. Сөнки һөтимәрҙәр аң буйынса ҡоштарға ҡарағанда өҫтәрәк баҫҡыста тора. Ниндәй генә йән эйәһе булмаһын, ниндәйҙер бер ғәмәлгә, шөғөлгә уны бала саҡта, йәш ваҡытында өйрәтәләр.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ун биш йылдан артыҡ инде помидор, борос, кәбеҫтә үҫентеләре һатам. Әлбиттә, ҙур аҡса түгел, шулай ҙа иш янына ҡуш була. Былтыр 18 һумлыҡ петуния орлоҡтары сәсеп, 4 мең 300 аҡса эшләнем.*



ӘЙҘӘГЕҘ...



# ҮҘЕБЕҘ ҮҪТЕРӘЙЕК!

**Баҡса эшен яратыуым атайымдан күскәндер. Әсәйемдең өй мәшәҡәттәре, һауынсы булып эшләүе, йәй баҫыуҙа сөгөлдөр утауы, күмәк балаға тамаҡҡа яраштырыуы менән ваҡыты ла булмағандыр. Баҡса эшендә һәр саҡ атайым алдан йөрөнө. Ер ҡаҙып, түтәл эшләп, һуған, кишеренә тиклем сәсешер ине. Әсәйебеҙ мәрхүмә булып яңғыҙ ҡалғас та баҡса сәсеүҙән туҡтаманы. Үҙе помидор, сәскә үҫентеләре сәсеп, баҡсаһына ултыртып, көҙ мул уңыш алды...**

Февраль айы тыуыу менән көҙҙән әҙерләгән орлоҡтарымды барлай башлайым. Тупраҡлы тоҡтарҙы өйгә индертәм. Элегерәк үҫентеләр өсөн бер тоҡ етә ине, быйыл күберәк сәсермен тип уйлап, ике тоҡ матур тупраҡ алып ҡалғанмын. Әллә берәй гәзиттән уҡыным, әллә бер оло кеше әйтте: кесерткән күп үҫкән ерҙән алынған тупраҡ уңдырышлы була, үҫентеләрҙе аҫтан ғына ҡырҡыусы бөжәктәр ҙә булмай икән.

Иң беренсе борос сәсәм. Февралдең башында уҡ татлы борос орлоҡтарымды сығарып, бер тәрилкәгә бушатам да, өҫтөнән йылы, хатта эҫерәк һыу ҡоям. Орлоҡтарҙың туҡтары аҫҡа төшә, ә астары өҫтә йөҙөп йөрөй. Йылы ғына тупраҡҡа берәмтекләп сәсеп, шытҡансы ҡаплап ҡуям. Мартта помидор, сәскәләрҙе лә шулай уҡ орлоҡтарға тикшереү үткәргәс кенә, үҙ йәшниктәренә һибеп ҡуям...

Әлбиттә, минең заманса теплицаларым булманы. Яҙ һайын таҡталарҙан эшләнгән ҙур йәшниктәргә тиреҫ ултыртып, өҫтөнә тупраҡ һалып, йәш тал, муйыл ботаҡтарынан яһалған дуғалар ҡуйып, полиэтилен ябып йылытып, үҫентеләрҙе шунда сығара инем. Ун биш йылдан артыҡ инде помидор, борос, кәбеҫтә үҫентеләре һатам. Әлбиттә, ҙур аҡса түгел, шулай ҙа иш янына ҡуш була. Былтыр 18 һумлыҡ петуния орлоҡтары сәсеп, 4 мең 300 аҡса эшләнем. Бер юлы ғына ҡулға инмәһә лә был бик файҙалы килем. Көндәлек кәрәк-ярағыңа тотонорға кеҫә аҡсаһы.

Үҙемдең баҡсаға ултыртҡан үҫентеләрҙе йәй буйы ҡыҙым менән һыу һибеп, сүптәрен утап тәрбиәләйбеҙ. Өлгөргәндәренән салаттар яба торам. Туғандарға таратам, һорағандарға һатып ебәрәм. Февралдә сәскән татлы борос июлдә мул уңыш бирә башлай. Ҡыярҙы июндә үк тәмләйбеҙ.

Мин был яҙмаларым менән нимә әйтмәксемен: үҙең үҫтергән йәшелсә-емешкә бер ниндәй ҙә ризыҡ тиңләшмәй. Бер кемгә лә аҡыл да өйрәтмәйем, маҡтаныу түгел был, ә ғорурлыҡ, үҙ эшеңдең һөҙөмтәһен күреп ҡыуаныу ғына...

Бынан бик күп йылдар элек, 2003 йылда шикелле, иҫ китмәле булып картуф унды. Һатып алыусылар килмәй. Ике баҙ тулды. Ваҡ-төйәкҡә генә алыштырып ҡалдыҡ, көмегәне лә һиҙелмәй ята бирҙе. Нимәгә булһа ла алыштырырға риза инек. Сөнки яҙ яҡынлашыу менән өй баҙындағы картуф шытасаҡ бит! Киттем район үҙәгенә Мораҡҡа. Яңы өйөбөҙҙә мебелдең юҡ сағы әле. Хатта ултырғыстар ҙа самалы. Мебель магазинына инеп ҡараштырып сыҡмаҡсы булдым. Алсаҡ һатыусы Рәшиҙә Зарипова апай эшләй ине ул саҡта. Кеше менән тиҙ уртаҡ тел табыуым ярҙам иттеме, беҙ шул арала тормош тураһында, тағы әллә ниндәй бихисап проблемаларҙы уртаға һалып, оҙаҡ ҡына гәпләштек. Мин: "Их, Рәшиҙә апай, анау тонналап ятҡан картуфты һатһам, ошо стенканы, кухня шкафтарын, ултырғыс алыр инем", - тип әйтә ҡуйҙым. "Атаҡ, шулай картуфың күпме, давай былай итайыҡ, мин бит мебелде Ырымбурҙан ташыйым, һөйләшеп ҡарайым әле, ул яҡта картуф унмаған, килеп сыҡһа, мин һинә машина менән килермен",- тип, адресымды яҙып алды.

Шул тиклем теләгем көслө булғандырмы, Рәшиҙә апайым бер түгел, ике Газель менән килеп, үҙе тултырышып, мине стенкалы, аш бүлмәһенә ике шкафлы, дүрт ултырғыслы итте. Мең рәхмәттәр әйтеп, тауҙай ятҡан картуфтан ҡотолоп, мөлкәтле булып ҡалдыҡ...

Эшһеҙлек хөкөм һөргән ауылда, аҡсаһыҙлыҡ үҙәккә үткән бер мәлдә үҙебеҙҙең йәй буйы матурлап утап, күмеп, ҡортон сүпләп үҫтергән картуфыбыҙҙың бик ҙур файҙаһын күрҙек шулай. Ә помидор, боростарҙан эшләгән салаттарҙы һатыуым да апаруҡ ҡына килем килтерә әле ул. Кемдер, бәлки, 2 -3 меңде аҡсаға ла һанамайҙыр. Ә мин һанайым. Ошо аҡсаға он алып, кәсебемде дауам итәм. Әйтәйек, шыйыҡ май, он алам. Икмәк бешереп һатам. Бына берике көн элек картуфымды һаттым да, аҡсаһына он алдым. Ике көн рәттән икмәк, бәлештәр заказы ҡабул иттем. Һарыҡ та иҫән, бүре лә туҡ тигәндәй, картуф алған кеше лә ҡыуана, минең бизнес та туҡталып ҡалманы, киреһенсә, килем килтереп тора.

Йәштәргә нимә әйткем килә. Бына шул арзан ғына орлоҡтан үҙегеҙ сәсеп, үҫтереп, бер тапҡыр уңыш алып ҡыуанығыҙ, үҙегеҙҙең таҙа, экологик һау ризыҡты ашаһағыҙ, магазин кәштәһенә башҡа барып тәртөлмәйәсәкһегеҙ. Минең ваҡытым юҡ, бәләкәй балам бар, эштә йөрөйөм, унайлыҡтарым юҡ, кәртә-баҡсам насар, тигәндәргә әйтер инем: теләк булһа, былары сүп кенә, ә теләмәгәнгә һәр саҡ сәбәп табыласаҡ инде ул.

Балалар ҙа, мине йәлләп, әсәй, күп сәсмә әле, йөрөйһең йонсоп йәй буйы, тиһәләр ҙә тыңламайым. Берҙән, мин өйҙә эшһеҙ ултырам, икенсенән, балаларым өсөн экологик таҙа ризыҡ үҫтереүем мине ҡанатландыра ғына. Ике-өс тоҡ кишер, сөгөлдөр, төрлө-төрлө салаттар, ҡайнатмалар баҙ тулып ултыра. Күстәнәскә тотторop ебәрһәң дә күңелгә рәхәт әле ул...

Мораҡ үҙәгендә күпләп сәскә, помидор, борос үҫентеләре һатып ултырған мөләйем йөҙлө апайҙарҙы күрәм дә, ихтирам менән йылмайып һаулыҡ һорашып китәм. Ошо үҫентеләре сәскә атҡансы ни тиклем ваҡыттарын, көстәрен, наҙҙарын һалып тәрбиәләүҙәрен аңлап, белеп торам. Улар аҡса өсөн генә түгел, кешеләргә матурлыҡ, тормош йәме таратыр өсөн дә ошолай эшләйҙәр. Мин быны үҙемдән алып әйтәм. Иртән торам да һәр бер үҫентемде наҙлап ҡына ҡарап сығам, ҡороларына һыу һалам. Сөнки улар мине киләһе көҙҙә ҡыуандырыусы, туйҙырыусы, өҫтәл йәме буласаҡ һый-ниғмәттәрем. Яҙҙарыбыҙ, йәйҙәребеҙ матур килһен, ә беҙҙең кеүек ер ҡорттарына эш сыҙамаҫ ул. Ни сәсһәң, шуны үҫтерер гәзиз еребеҙ бар, Аллаға шөкөр!

**Айгөл МИҢЛЕБАЕВА.**
**Күгәрсен районы.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ЯРАТАМ ТУПРАҠТА СОҠОНОРҒА!

**Кисә, кисҡырын, иремдән, өс баламдан ҡасып ҡына эсвидәнйегә барып килдем әле. Эй, һағыныуҙарым! Дүрт ай булды бит күрешмәүебеҙгә! Инде зар-интизар булып, һарыларға һабыша башлағайным инде. Ул да мине һағынған, бугай, йонсоуҙары төҫөнә сығып киткән инде, ҡәҙерлемдең. "Иииий, инде юлдар асылды, осрашыр миҙгелдәребеҙ йышайыр, йәйгеһен хатта көнөнә бер-нисә тапҡыр бергә булырбыҙ, йәме, бошонма", - тип, уны ла, үҙемде лә йыуата-йыуата кипкән үләндәрен йолҡколап, тупрағын тырматып, тиреҫ еҫен бер кинәнеп һулап сыҡтым әле теплицамдан. Эйе, теплицамдан шул, ә һеҙ нимә тип уйлағайнығыҙ?**

Уй, яратам шул теплицамды, тупраҡта соҡоноуҙы. Уңыштtы тонналап алмаһам да, оҙон бауыр ҡышты сығып, икенсе сезондың тәүге ҡыяр-помидорын тәм итә башлауға етә ул. Баҙ тула салат, тоҙло-боросло ҡыяр-помидор, ҡайнатма, компот менән, тундырғысымды иһә емеш-еләк, йәшелсәфәлән менән шыплап тултырып ҡуям.

Заманса поликорбанат материалдан эшләнгән теплицалы булғандан бирле тәҙрә төпләп урман шикелле шаулатып помидор, борос, сәскә үҫентеләре менән мәж булыуым шып туҡтаны. Сөнки апрель урталары, аҙаҡтары етеү менән орлоҡтарҙы рәхәтләнеп теплицаға тура сәсәм дә ҡуям. Тәүге тапҡыр был осулды ҡулланғанда кешенең буйтым ҙурайған үҫентеләренә ҡарап, минекеләр өлгөрәме-юҡмы тип эсем бошто бошоуын. Өлгөрмәгән ҡайҙа, үҫеп, елдереп үтеп киттеләр хатта. Иркендә, көн оҙоно ҡояш аҫтында үҫкәстәре ни! Бер яғына яртылаш помидор, яртылаш борос, икенсе яғына яртыһына ҡыяр, ҡалған яртыһына сәскәләремде төртөп сығам да, вәссәләм! Төптән йыуан һабаҡлы, сирһеҙ-ниһеҙ, ныҡ булып үҫәләр. Бер яҡта помидор-боростар гөрләй, икенсеһендә ҡыярҙар өлгөрә, күңелле. Мәле еткәс помидорҙарҙы, сәскәләремде тышҡа, иркенгә сығарам да, урынына тоҙлау өсөн булған ҡыяр сәсәм. Ә боросто теплицала ҡалдырам, йылы ярата бит улары.

Шулай иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә дауам итә минең теплица менән "мөхәббәт тарихы". Ә ни өсөн осрашыуға ғаиләмдән ҡасып йөрөй тиһегеҙме? Һун улар, ирем һәм бәхлеүәндәй өс улымды әйтәм, ҡулдан кәрәк-тырманы тартып алалар ҙа, рәхәтләнеп ер ҡортолай соҡонорға бирмәй, дөбөр-шатыр эшләй ҙә ташлайҙар бит. Баҡсабыҙ ҙур, Аллаға шөкөр, эшләйем, тешләйем тип торғандарға былай ҙа мәшәҡәт етерлек. Ә теплицам менән минең икебеҙҙең генә серләшер серҙәребеҙ, көйләр көйҙәребеҙ, үҫтерәһе йәшелсәләребеҙ күп... Үәт!

**Гүзәл МЫРҘАЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

ФӘҺЕМЕ БАР КИТАП



# НӘФСЕ. ЙӨРӘК. РУХ.

## Нәфсе

8. Нәфсенең теләген үтәргә ынтылыуы - Аллаһы Тәғәләнең барлығына ышанмауҙың нигеҙен тәшкил итә. Нәфсе һәр саҡ Исламдан ситләшергә тырыша.

9. Нәфсенең түбән тойоуҙан ләззәтләнгән кеше ысын ләззәттең түбән тойоуҙан мәхрүм.

10. Йәшереп боттарға, һынташтарға табыныу нәфсенең иң ҡыйраткыс ҡушыуының береһе.

11. Нәфсенең нигеҙендә ҡағиҙәләрҙе боҙоу ята.

12. Нәфсе күп һандағы яуызлыҡ төрҙәрендә гәйепле.

13. Нәфсе һәр саҡ тыйылған нәмәне теләй. Икенсе яҡтан ҡарағанда, нәфсенең күп һандағы тыйылғандарға ынтылыуы уларҙы шулай нәфселе иткән.

14. Нәфсе - теләктәрҙең ҡоло. Ул кешеләрҙе тән рәхәтлеге алырға ҡоторта, матди байлыҡтарға ымһындыра. "Үҙенең теләген Аллаһы иткән кешене күргәнең бармы?" тип әйтелә Ҡөрьәндә.

15. Нәфсе - ике йөҙлө, яҡшы булып күренергә тырышыусы һәм ботҡа табыныусы. Нәфсенең эсе тышынан ныҡ айырыла, башҡалар алдында изге, ғәҙел булып күренергә тырышыр өсөн уларҙы үлтереп маҡтай, улар юҡта, киреһенсә, бысраҡ һүҙҙәр өйә.

16. Нәфсе Аллаһы Тәғәләгә был ҡылығы менән оҡшамаһын белһә лә, кешеләргә оҡшар өсөн үҙ-үҙен маҡтай.

18. Нәфсе сикһеҙ алдаша.

19. Нәфсе илаһилыҡҡа дәғүә итә. Нәфсе һәр саҡ кешеләрҙең үҙен генә маҡтауҙарын, уның ғына әхлаҡ нормаларын үтәүҙәрен көҫәй. Нәфсе бер ваҡытта ла Аллаһы Тәғәләлә күңел тыныслығы таба алмай.

20. Нәфсе тәкәббер һәм үҙ-үҙен генә ярата. Нәфсе башҡа кешегә ҡарата эшләгән бәләкәй генә изгелеген дә, үҙенең изге булыуы менән һоҡланып, йылдар буйына онотмай.

21. Нәфсе боҙоҡ һәм хыянатсыл. Ул башҡаларҙың кешеләргә әйбер бүләк иткәнен яратмай, бүләктәрен юҡҡа сығарырға тырыша.

22. Нәфсе - һаран.

23. Нәфсе - үҙгәреүсән.

24. Нәфсе бар нәмәнән дә тиҙ ялҡа. Күп осраҡта уның эшмәкәрлеге теләктәренә тура ла килмәй. Теләгәненә ирешкән хәлдә лә, нәфсе быныһ менән риза түгел. Нәфсегә даимилыҡ етмәй. Был хәленән ул тик үҙенең бурыстарын намыҫ менән атҡарыу ярҙамында ғына ҡотола ала.

25. Нәфсе - ялҡау. Ул һәр саҡ теләгәненә ирешергә ашыға. Нәфсе йомшаҡ холоҡло булыуын тик аскетик тәртип һәм ҡаҡшамаҫ рухи ынтылыусанлығы менән генә еңә ала.

26. Нәфсе үҙенең төҫөн минут һайын үҙгәртә ала. Ул хамелеонға оҡшаш.

27. Нәфсе иғтибарһыҙ, кенәсел һәм үсекән. Әгәр ҙә оҙайлы йылдарға һуҙылған уртаҡ һөйөүҙән һуң нәфсегә бәләкәй генә хилафлыҡ ҡылһаң, ул барлыҡ изгелектәрҙе онотоп, ошо бәләкәй генә етешһеҙлек өсөн үҙенең ҡылыҡтары менән хайуан хәленә төшөүгә бар.

**(Дауамы бар).**

✓ *Шунда бер түбәтәй килеп сыҡты, түбәһендә бер һүрәт тора - алтымөйөшлөк. Ҡоҙағый әйтә: "Был - "тирә-яҡ" була, - ти, - Алла бит уңда ла, һулда ла, алда ла, артта ла, ерҙә лә, күктә лә - бөтә алты яҡта ул", - ти.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТЫШҠЫ ҠИӘФӘТКӘМЕ?

■ Билдәле булыуынса, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ араһында һөйөү бик тиҙ тоҡана, тимәк, ғашиҡ булыуҙың төп сәбәптәренең береһе булып тышҡы ҡиәфәт тора. Ғашиҡ булыу өсөн ҡатын-ҡыҙ ир-егетте ниндәй итеп күрергә тейеш һуң? Италия тикшеренеүсеһе Диего Местрипьери үткәргән һынауҙар барышында асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙ ир-егеттең йөҙөнә ҡарап, уның ниндәй атай булыуын тойомлай ала икән, был һәләт уға тәбиғәттән һалынған. Бер төркөм ир-егеттәргә ололарҙың һәм балаларҙың фотоларын күрһәтеп, үҙҙәренә оҡшаған фотоларҙы билдәләргә ҡушҡандар. Ҡатын-ҡыҙҙар төркөмө иһә был экспериментта ҡатнашыусы ир-егеттәрҙең фотоларын ҡарап, уларҙың ҡайһылары менән ғаилә ҡора алырҙарын билдәләгән. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡатын-ҡыҙҙар бәләкәй балаларҙың фотоларын оҡшатҡан ир-егеттәрҙе һайлаған.

■ Бонн университеты (Германия) ғалимдары асыҡлауынса, окситоцин гормоны ғаиләле ирҙәргә ҡатындарына тоғролоҡ һаҡларға ярҙам итә. Был гормон тәбиғи рәүештә гипоталамуста бүленеп сыға һәм партнерҙар араһындағы ныҡлы мөнәсәбәт өсөн яуап бирә. Был гормон кимәле төрлө кешелә төрлөсә. Эксперимент барышында тикшеренеүселәр ир-егеттәргә (никахта тороусыларына ла, тормағандарына ла) составында был гормон булған препарат тәҡдим иткән. Һөҙөмтәләр бик ҡыҙыҡлы ғына килеп сыҡҡан. Ғаиләһе булған ир-егеттәр сит ҡатын-ҡыҙҙарҙы урап тигәндәй ҡаса башлаған, ә ғаиләһеҙҙәр үҙҙәренең ҡылыҡтарын үҙгәртмәгән.

■ Туҡланыу продукттары хәүефһеҙлеге буйынса Европа идаралығы (EFSA) аспартам буйынса тикшеренеүҙәрҙе тамамлаған һәм уны хәүефһеҙ тип тапҡан. Шәкәрҙән 200 тапҡыр татлыраҡ булған аспартам диабет менән ауырыусылар һәм үҙ кәүҙәһе ауырлығын контролдә тоторға теләүселәр өсөн тәғәйенләнгән ризыҡтарҙы әҙерләүҙә ҡулланыла. Шәкәрҙе алыштырыусының канцероген сифаттары буйынса бәхәстәрҙә уның зыянлы булыуын билдәләй инеләр. Эксперттар әйтеүенсә, дозаһын күтәргән осраҡта аспартам ысынлап та зыянлы, әммә уға яғылған башҡа ғәйептәр дәлилләнмәгән. Төрлө илдәрҙә уның максималь дозаһы төрлөсә билдәләнә, шулай ҙа ул яҡынса тәүлегенә 100-130 таблетка. Аспартам диетик газлы эсемлектәрҙең, һағыҙҙарҙың составына ла инә.

■ Бөгөн күптәр дарыуҙар урынына халыҡ дауаһы ҡулланырға тырыша. Вирусллы миҙгел ауырыуҙары әүҙемләшкән мәлдә миндаль сәтләүегеге ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Быға тиклем миндаль йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен профилактикалау, холестерин кимәлен түбәнәйтеү өсөн ҡулланыла ине. Бының өсөн кардиологтар көнөнә яҡынса 90 грамм миндаль ашарға кәңәш итә. Күптән түгел Норича (Великобритания) һәм Мессин ҡалаһы университеты (Италия) ғалимдары был сәтләүектең иммун реакцияларын көсәйтеү һәм вирустарҙың әүҙемлеген кәметеү һәләтен билдәләгән. Сәтләүектең тиресәһендә булған матдәләр лейкоциттарҙың әүҙемлеген арттырып, вирустарҙың күҙәнәк эсенә үтеп инеүен тотҡарлай. Миндалдең организмға ыңғай тәьҫире ул тулыһынса эшкәртелеп бөткәс тә һаҡлана әле.

ХӘТЕРКИТАП

# ҺИГЕҘ ОХМАЖ АСҠЫСЫ

*Әсмә Мәүлембирҙе ҡыҙы менән һәр ырыуҙың кейеме хаҡында башҡаларҙан айырып торған билдәләренә туҡтап, бәйнә-бәйнә һөйләшеп, асыҡларға була торғайны. Һөйләшеүҙән ҡайһы бер өҙөмтәләр генә килтерәйек.*

**Бетеү.** Ҡыпсаҡтарҙа мөһөр түгел, бетеү булған. Ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙың бетеүе гел бер төрлө генә мунсаҡтан эшләнгән - мунсаҡ бетеү. Сәнкем-ҡыпсаҡтарҙыҡы төрлө ынйынан - йәйғор бетеү. Ҡара-ҡыпсаҡта - тауар бетеү, икенсе төрлө материалды һалып уратып сигелгән бетеү-аппликация. Хәҙерге сәхнә еләндәренә өсмөйөш формаһында биҙәк һалған булалар. Был дөрөҫ түгел. Олоғара ҙур өсмөйөш итеп итәккә орнамент һалыу бөтөнләй килешмәй. Исеме лә өсмөйөш түгел, "бетеү" уның.

**Һигеҙ ожмах асҡысы.** Был тамға материалдан аппликациялап, ынйынан сигеп эшләнә. Һигеҙ ожмах асҡысы боронғо китапта бар. Сәскә түгел, тамға бит был, теләһә нисек асып ҡарамағыҙ, тип тыя торғайнылар.

**"Тирә-яҡ".** Маҡар ауылында бер ҡоҙағыйым бар ине, әле мәрхүмә инде. Шул хәтле күп белә торғайны боронғоно. Юрматыларҙың еләне тураһында һүҙ китте. Уларҙың еләнгә баҫҡан биҙәге бөтөнләй башҡа. Шунда бер түбәтәй килеп сыҡты, түбәһендә бер һүрәт тора - алтымөйөшлөк. Ҡоҙағый әйтә: "Был - "тирә-яҡ" була, - ти, - Алла бит уңда ла, һулда ла, алда ла, артта ла, ерҙә лә, күктә лә - бөтә алты яҡта ул, тимәк, бөтә тирә-яҡта була, шуны аңлатҡан билдә был", - ти. Шул ҡоҙағыйҙың исеме хәтеремдән сыҡҡан, фамилияһы Мухина ине. Тимәк, "тирә-яҡ" - алтымөйөшлөк, юрматы орнаменты була.

## Дүртенсе әңгәмә

*Төрки халыҡ кейемдәре араһында иң бай фантазиялы, иң төрлө һәм иң мәғәнәлеһе - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары кейеме.*
*С.И.Руденко,*
*этнограф, XX быуат уртаһы.*



**Елән.** Әйткәнемсә, минең хыялым - ике ҡәрсәйемдең еләнен тергеҙеү булды, улар бер ҡасан да күҙ алдымдан китмәне. Елән - затлы кейем. Тегеүсе оҫталарҙың һәр береһе үҙенең "ҡулы", оҫталығы менән айырылған. Хәллеләр еләнде махсус тектергән, тауары, тәңкәһе, тегелешенең һиммәтен ҡарап, бер айғыр хаҡы менән баһалағандар. Шулай ҙа ниндәй ырыуҙың, ҡайһы төбәктең еләне тигәндә, төп айырма - еләндәге тамға. Ҡыпсаҡта - бетеү, меңлелә - ярым айлы бетеү, юрматыла - тирә-яҡ, үҫәргәндә - һигеҙ ожмах асҡысы. Мөһөр баҫылған, мөһөр тартылған, тиҙәр. Бындай ырыу тамғаһы ҡуйылған еләнде бутап та, юғалтып та булмай. Беҙҙең көньяҡ-көнсығышта еләндәр йәнә биҙәүле булған, башҡа яҡта елән биҙәлмәгән.

**Камзул.** Камзул - боронғоһо бик ҡатмарлы итеп тегелгән. Биленән биш ая итеп телеп ебәреп, итәге клёш булып тора. Билле камзулды тамъяндар оҫта тегә. Уларҙың көнбайышҡа күсеп ултырған әҡрәбәләре лә Туймазы, Миәкә яғында билле камзул кейә, тинеләр бер конференцияла. Камзулға бетеү, мөһөр ҡуйылмай, тәңкә, уҡа, ҡортбашы тегелә. Камзулға ҡыялап йә тура киҫеп кеҫә һалына.

**Түшелдерек.** Түшелдеректе башлыса өлкәндәр кейгән. Тура иҙеү менән тегелә, эстән һалып кейелә. Алмиҙеү йәки башҡыҙеү (йәғни башҡа кейелә торған иҙеү) тип йөрөтөлгән төрҙәре бар. Түшелдерек тип төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш яҡ башҡорттары ҡатын-ҡыҙҙың күкрәген ҡаплаған биҙәүесте әйтә. Ҡатайҙар менән Арғаяш яҡтары "яға" тиҙәр. Көнбайыштағы башҡорттар "дәүәт", "хәситә" яһап тағa, улар шау көмөштән була, яурындан төшөп, билдән уратып торған дәүәттәрҙе лә күргәнем бар.

**Һаҡал.** Ҡыҙҙы кейәүгә оҙатырға кәрәкһә, әсәһе туған-тыумаса ҡатын-ҡыҙын сәйгә саҡыра ла "һаҡал өмәһе" үткәрергә йыйыныуын әйтә ("бирнә өмәһе, селтәр өмәһе" лә тиҙәр). Кем тәңкә, таҫма, төймә, ҡортбашы һ.б. алып килә. Бөтәһен бергә һалып тегәләр. Ҡайһы бер яҡта селтәрҙе лә "һаҡал" тиҙәр, беҙ "һаҡал" тибеҙ. Аҡсалы яҡтар аҡса ҡуя. Петр Беренсе аҡсаны тишеүҙе тыйғас, көмбәҙ һуға башлайҙар.

Ҡыҙҙар ҡул эшенә оҫталығын күрһәтеү өсөн таҫтамал, шаршау, тәҙрә ҡормаһы, мейес башы ҡорғаны, кейәү күлдәгенең яғаһы, кеҫәһе, хатта кейәүҙең силғауын да сигеп әҙерләгәндәр. Сигелгән силғау! Бөгөнгө ҡыҙҙарҙың төшөнә лә инмәҫ, инһә лә, ышанмаҫ.

**Әмәйлек.** Әмәйлек - муйынды ҡаплаған ярымтүңәрәк яға. Йәш балалар, йәш ҡыҙҙарҙың муйынын һаҡлау өсөн ябыу итеп эшләнгән. Насар күҙҙән, ел-шауҡымдан һаҡлаған. Көньяҡ-көнсығыш төбәктә ҡыҙҙар кейеме таҫманан, тауарҙан тегелә, ынйы, мунсаҡ, тәңкә менән биҙәлә. Балаҡатайҙар уны "һағылдырыҡ" тиҙәр, шау тәңкәне бер таҫмаға теҙеп тегәләр, эйәкте уратып, муйынды ҡаплап, ҡолаҡ артынан аша тартып тағалар.

**Күлдәк.** Күлдәктең тегелеше лә, төрҙәре лә бихисап, уны шул-был ырыуҙыҡы тип айырып ҡарап булмай. Тегелеше буйынса ғына исемләргә мөмкин - күтәрткән күлдәк, тубыҡтан бөрөлгән күлдәк, ҡаҙморонлап бөрөлгән итәк, ҡатлансыҡлы күлдәк, әҙепле-төймәле уйымлы күлдәк, итәк баҫҡан күлдәк, ҡанатлы күлдәк, мәҫкәүле күлдәк, ҡупайсыҡлы күлдәк - фонариклы иңбашлы күлдәк...

**Алъяпҡыс.** Гел генә камзул, елән, кәзәкей кейеп йөрөмәгән бит ҡатын-ҡыҙ. Алъяпҡыс та бар бит. Бигерәк тә меңле, әйле, ғәйнәләрҙең ҡатындары алъяпҡыһын сисмәгән. Беҙҙең яҡта алъяпҡысты арҡалы итеп тегеп кейгәндәр. Көндәлек эш араһында, өйгә инеп-сыҡҡанда бик ҡулай. Арттан арҡаңа ышыҡ, алдан түшитәгең ҡаплаулы. Меңле ырыуы ҡатындары әле лә шундайҙы ғына кейә. Ҡулъяулыҡ, алъяпҡыс итәген ҡыя сәнсеп сигеп бирнә әҙерләгән ҡыҙҙарыбыҙ. Яңы төшкән киленде күрергә килгән әбейҙәр, алъяпҡысы сигелгәнме, тип һораған була торғайны. Ҡатын-ҡыҙҙың егәрле, булдыҡлы икәнен күрһәткән сифат бит инде.

## Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейеме

**Ҡашмау.** Ҡашмау - баш кейеме. Гәрәбә, мәрйен, тәңкә, ынйы менән биҙәп эшләнә. Ҡортбашы ла тегеп ҡуялар. Күҙ



теймәҫкә, тиҙәр. Борон ҡортбашы, ҡусҡар биҙәге һалып биҙәгәндәр, ҡабырсаҡтан ҡырҡып тәңкә эшләнгән, көмбәҙҙе лә шунан яһағандар.

Ҡашмауҙың арҡа буйлап билгә саҡлы төшөп торған өлөшө "олон" тип атала. Уны ҡайһы берәүҙәр "ҡойроҡ", тигән була, төптө буш һүҙ. Ҡашмау олоно "тояҡ" менән ослана. Нимәнән эшләнеүенә ҡарап, "тояҡ"тың да төрҙәре бар - сәсәкле тояҡ, сәйләнле (мәрйенле) тояҡ, тәңкәле тояҡ, суҡлы тояҡ...

**Таҫтар.** Таҫтар - ҡатындарҙың баш кейеме. Кешенең буйына ҡарап, ике-өс метрға тиклем тауар китә таҫтарға. Иңгә төшөп торған туҡыма-шарф, тиергә була. Таҫтарҙы шәл урынына урағандар, тышынан бүрек тә кейгәндәр. Таҫтар бөтә башҡортта ла булған.

**Ҡалпаҡ.** Төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ-көнсығыш башҡортта ҡалпаҡ күп, рәттән кейгәндәр. Беҙҙең яҡта ла яратып кейеүселәр булған, тик нишләптер ҡалпаҡты татарҙыҡы, тип сикләүселәр табыла. Буш хәбәр, ҡалпаҡ кейеү йәш ҡыҙҙарға, килендәргә булған. Салауат районында Сания Абдуллина тигән йыраусы бар, шул ҡатындың кейгән күлдәген күсерҙем. Уларҙа "сылбырлы сигеү" таралған. Беҙҙә уны "элмә" тип тә әйтәләр. Салауат Юлаев музейы асылған йылды ул яҡтарға мин дә барҙым, күргәҙмәгә ҡуйған кейемдәрҙе ҡараным. "Элмә икән сигеүегеҙ", тиһәм, "Бәй, тәмбәрәне танымайһыңмы, тәмбәрә лаһа был", - тип ебәрәләр. Тамбурҙы шулай матурлап әйтәләр икән. Әйҙә, әйтһендәр, бигерәк ятышлы. Ул яҡтар ҡалпаҡ кейә, кейемдәрен дә шулайтып эшләнем. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының кейемендә сигеүҙең төрө башҡаса. Шул уҡ тамбур, ваҡ элмә, ҡыя сигеү, иллә симметрия ныҡ күренә.

**Таҡыя.** Башҡорт менән татар таҡыяһының айырмаһы - яулыҡта. Башҡорттар һис шикһеҙ таҡыя өҫтөнән яулыҡ ябына, шуға күрә алғы яғын ғына сигә. Татарҙарҙа тотошлай уратып сигелә. Төньяҡ-көнбайыш - Минзәлә башҡорттары, Яңауыл, Баҡалы, Балаҡатай яҡтарында йәшәгән башҡорттар таҡыя кейә. Уны ҡалпаҡ та тиҙәр. Балаҡатай ырыу ҡатын-ҡыҙҙары ҡалпаҡтың әллә нисә төрөн кейә: сикә-ҡалпаҡ, тупый-ҡалпаҡ, тәңкәле ҡалпаҡ, мәрйен-ҡалпаҡ, туҙ-ҡалпаҡ. Булғас, бар тип әйтәйек, булғанына шөкөр итәйек, һаҡлайыҡ, ташламайыҡ. Уларҙа ла таҫтар бар, уҡа бар, тәңкә аҙ. Таҡыяны нимәнән тегәләр, тиһәң, төрлө яҡта төрлөсә. Тауарҙы тартып, башта ныҡ торһон, йылы ла булһын, тирләтмәһен дә өсөн эслек ҡуйыла - ҡатырға йә туҙ, һырылған мамыҡ, тула, хатта йоҡа кейеҙ ҙә ярай. Тышынан матур тауар менән тышлап, сигеп-биҙәп ебәрәләр. Белорет районы Шығай ауылының "Хәтирә" фольклор ансамбленә йөрөгән ҡатындарҙың баш кейемен - таҡыяны ла күсереп эшләнем. Салауат районынан килгән Сания апай Абдуллина бик ыҫпай ҡалпаҡ кейеп йөрөнө, ул таҫтар ҙа бәйләп сығыш яһаны. Ғәжәп оҫта итеп думбыра сиртте.



## 6 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.45, 3.05 Время покажет. [16+]
14.30 Премьера. "Проверено на себе" [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]
1.10 Проверено на себе. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Паромщица". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "На дальней заставе". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.30, 21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**11.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30, 5.00 "Бай". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Теге өсәү. [12+]**
**23.45 Ҡустәнәс. [12+]**
**0.15 Х/ф "Опасное везение". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Среда, среда". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 7 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.45, 3.05 Время покажет. [16+]
14.30 Премьера. "Проверено на себе" [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Право на справедливость. [16+]
1.10 Проверено на себе. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Паромщица". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "На дальней заставе". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Спортивная история. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 "Времечко".**
**22.00 Детей много не бывает. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Земляки. [12+]**
**23.30 "ВасСәләм!" [16+]**
**0.00 Х/ф "Опасное везение". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 8 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.15, 1.45, 3.05 Время покажет. [16+]
14.30 Премьера. "Проверено на себе" [16+]
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Проверено на себе. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Паромщица". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "На дальней заставе". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "АйТекә!" [6+]**
**15.45 "Сыйырсык". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Автограф. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.45, 4.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Колесо времени. [12+]**
**0.15 Х/ф "Маша и море". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Муж и жена одна сатана". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 9 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.45, 3.05 Время покажет. [16+]
14.30 Премьера. "Проверено на себе" [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Проверено на себе. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Паромщица". [12+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "На дальней заставе". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00, 16.30 Т/с "Любовь всегда в моем сердце". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 "Бәхетнамә".**
**14.30, 23.45 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**21.00 "Времечко".**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 История одного села. [12+]**
**23.15 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Паганини. Скрипач дьявола". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Таштугай". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 10 АПРЕЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.10 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
14.30 Премьера. "Проверено на себе". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 2.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Чак Берри". [16+]
3.40 Про любовь. [16+]
4.25 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
23.30 Х/ф "Расплата за счастье". [12+]
03.15 Х/ф "Таблетка от слёз". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика!**
**10.00 Д/с "Тайны разведки". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 21.00, 5.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30, 5.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 4.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Детей много не бывает. [6+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**20.45 Дорожный патруль. [16+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Уфа. Живое. [12+]**
**0.15 Х/ф "Королев". [16+]**
**2.30 Спектакль "Мелодии весны". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

## 11 АПРЕЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 Д/ф "Леонид Гайдай. "Бриллиантовый вы наш!" [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Михаил Танич. Не забывай. [16+]
16.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.35 "Три аккорда". Большой праздничный концерт. [16+]
19.30, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
22.40 Большая игра. [16+]
23.50 Х/ф "Дочь и ее мать". [18+]
1.25 Мужское / Женское. [16+]
2.55 Про любовь. [16+]
3.40 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
09.30 Пятеро на одного.
10.20 Сто к одному.
11.10 Смеяться разрешается.
13.40 Х/ф "Коварные игры". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.40 Х/ф "Любовь с риском для жизни". [12+]
00.40 Х/ф "Ты заплатишь за всё". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Надо знать! [6+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "Сыйырсык". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Ҡустәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Девушки Башкортостана". Концерт Иделя Нургалина. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Дон Жуан". [12+]**
**1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.30 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**4.15 Уфа. Живое. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

## 12 АПРЕЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.20, 6.10 Т/с "Ангел-хранитель". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.50 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Д/ф "Битва за космос". [12+]
18.10 Премьера. Большой новый концерт Максима Галкина. [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. [16+]
23.10 Х/ф "Гагарин. Первый в космосе". [6+]
1.15 Мужское / Женское. [16+]
2.45 Про любовь. [16+]
3.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

04.10 Х/ф "Расплата за счастье". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
09.30 Устами младенца.
10.20 Сто к одному.
11.10 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
12.10 Шоу Елены Степаненко. [12+]
13.20 Х/ф "Без права на ошибку". [12+]
17.30 "Танцы со Звёздами". Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
01.30 Х/ф "Лидия". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.45 Надо знать! [6+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Творческий вечер народного артиста РФ и РБ Хурматуллы Утяшева. [12+]**
**19.30 Полезные новости. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "Байык-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.45 Х/ф "Дон Жуан". [16+]**
**2.30 Спектакль "Великий обольститель". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

✓ *Вирусҡа үрсергә ярҙам итә торған ризыҡтарҙан тыйылып торорға кәрәк. Иң беренсе - ҡамыр ризыҡтарынан ҡәтғи тыйылығыҙ. Ҡомалаҡтан сүпрәгеҙ булмаһа, сөсө икмәк ашап тороғоҙ. Шәкәрле ризыҡты ныҡ ҡына кәметегеҙ.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 1 АПРЕЛЬ - ХАЛЫҠ-АРА ҠОШТАР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**12-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡомалаҡ. Хабуб. Ҡәмәр. Даға. Осағас. Дәүмәл. Оҙам. Аралыҡ. Батыр. Ҡамсы. Сафина. Йомортҡа. Василиса. Соус. Әпәй. Еләк. Март. Әсмә. Наян.

**Вертикаль буйынса:** Думбыра. Дәүләтбаев. Рәйес. Ҡаплан. Игеҙәк. Ҡом. Мөхәмәтшина. Сәкән. Ризыҡ. Трап. Ҡобағошова. Сабый. Төн. Аффикс. Ғәмәл. Сарыҡ. Ағас.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Апрель (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (13) дүшәмбе | 5:07 | 6:37 | 13:30 | 18:31 | 20:01 | 21:31 |
| 7 (14) шишәмбе | 5:04 | 6:34 | 13:30 | 18:33 | 20:03 | 21:33 |
| 8 (15) шаршамбы | 5:02 | 6:32 | 13:30 | 18:35 | 20:05 | 21:35 |
| 9 (16) кесе йома | 4:59 | 6:29 | 13:30 | 18:37 | 20:07 | 21:37 |
| 10 (17) йома | 4:57 | 6:27 | 13:30 | 18:39 | 20:09 | 21:39 |
| 11 (18) шәмбе | 4:54 | 6:24 | 13:30 | 18:40 | 20:10 | 21:40 |
| 12 (19) йәкшәмбе | 4:52 | 6:22 | 13:30 | 18:42 | 20:12 | 21:42 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# АҒИҘЕЛ КҮПЕРҘӘРЕ!

**Өфөлә Ағиҙел йылғаһы аша яңы күпер төҙөлөүе хаҡында күптәр хәбәрҙарҙыр, моғайын. Ул "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" милли проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла һәм 2021 йылда сафҡа индерелергә тейеш.**

- Эштәр тәүлек әйләнәһенә ике сменала алып барыла. Участкала 200-ҙән ашыу кеше эшләй. Барлыҡ терәүҙәрҙе лә бер үк ваҡытта эшләү өсөн өҫтәмә рәүештә техника йәлеп ителде, - ти Башҡортостан буйынса "Уралмостстрой" акционер йәмғиәтенең генераль директоры урынбаҫары Василий Чекуров. Бөгөн терәүҙәрҙең күп өлөшө ҡуйылған, улар араһындағы метал конструкцияны йыйыу өсөн стапель ҡороу эштәре тамамланыу алдында. Тиҙҙән терәүҙәр араһы тоташтырыла башлаясаҡ. Әле участкаға 1000 тоннанан ашыу металл конструкция килтерелгән һәм монтажлауға әҙерлек эштәре алып барыла. Эш ташҡын ваҡытында ла туҡталмаясаҡ, әле үк ташҡынға ҡаршы саралар күрелгән. Оҙонлоғо 688 метр булған яңы күпер "иҫке" һәм быға тиклем булған "яңы" күпер араһында өс һыҙатлы итеп төҙөлә. Унда Ырымбур йүнәлешендә бер яҡлы ғына хәрәкәт буласаҡ.

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

# РИЗЫҠТАРЫБЫҘ...

## сиргә ҡаршы



**Барыбыҙ өсөн дә аяҙ көндө йәшен һуҡҡан кеүек булды, әлбиттә, бөгөнгө ваҡиғалар. Әммә ләкин дәүләтебеҙ ҡабул иткән һаҡланыу сараларына өҫтәп, үҙебеҙҙең тыуған яҡтың теләһә ҡайһы вирусҡа ҡаршы торорлоҡ, иммунитетыбыҙҙы нығытырлыҡ ризыҡтарын, үләндәрен дә ҡуллана ултырайыҡ, тип әйтмәксе инем.**

Иң беренсе йәй буйына аяҡ аҫтында тапап йөрөгән әремебеҙ иҫ киткес көскә эйә икәнен иҫегеҙгә төшөрәм. Ул - тәбиғи антибиотик. Был көндәрҙә әремде (киптереп ваҡланғанын инде, оҙаҡламай йәшеле лә баш ҡалҡытыр) киң ҡулланырға тырышығыҙ. Вирустарға үрсергә бирмәһәк, үрсемәҫ. Был маҡсатта әрем ярҙамға килер. Көн дауамында, ашағандан һуң бер ярты сәғәт үткәс, ауыҙығыҙға әҙ генә әрем ҡабығыҙ. Быны көнөнә өс-дүрт тапҡыр эшләгеҙ. Ә бына кисен йоҡлар алдынан сәй ҡалағы осонда ғына әремде ярты стакан ҡайнар һыуҙа ун биш минут төнәтеп эсегеҙ. Балаларығыҙға ла эсерегеҙ. Төнәтмә үпкәне таҙартып, тын юлдарындағы лайлаларҙы киптереүгә, төнө буйы эсегеҙҙе таҙа тотоуға булышлыҡ итәсәк. Хатта ниндәй генә вирус инһә лә, ул үрсеп китә алмаясаҡ.

Әремегеҙ булмаһа, усаҡ ҡайырыһы, имән ҡайырыһы, ҡарағас ылыҫы ла шундай уҡ көскә эйә. Һарымһаҡ ашағыҙ, уны турап, йылы һыу менән йотоғоҙ. Ҡайын бөрөһөнөң, ерек тубырсығының спирттағы төнәтмәһен эсергә була.

Ә беҙҙең тыуған яҡтың ниндәй ризыҡтары вирусҡа ҡаршы тора ала, тигән һорау тыуһа, яуап бирәм: күп ул ундай ризыҡтар. Ҡымыҙҙы алайыҡ. Һуғыш ваҡытында партизандар уны хатта гангреналарҙы дауалау өсөн ҡулланған. Яраларҙы йыуғандар. Ҡымыҙҙың кәзә һөтөнән дә, бейә һөтөнән дә яһалғаны ярай. Әсетеберәк эсергә тырышығыҙ. Әсегән ҡымыҙҙа зарарлы вирус-бактерияларға, ҡорттарға ҡаршы торорлоҡ файҙалы бактериялар барлыҡҡа килә. Хатта һуңғы стадияға еткән туберкулез таяҡсаларын юҡҡа сығара. Уйлап ҡарағыҙ! Коронавирус уға сүп кенә! Әсе ҡорот, әсе ҡатыҡ, ҡыҙыл борос, укроп, һуған һалып, һурпа эсегеҙ.

Прополис та бик көслө антисептик. Уны ла бер шырпы башы ҡәҙәре генә алып, көн дауамында бер нисә тапҡыр ауыҙығыҙҙа һурып йөрөгөҙ. Сәйнәп бөткәс, төкөрөгөҙ.

Вирусҡа үрсергә ярҙам итә торған ризыҡтарҙан тыйылып торорға кәрәк. Иң беренсе - магазин сүпрәһендә бешкән ҡамыр ризыҡтарынан ҡәтғи тыйылығыҙ. Ҡомалаҡтан сүпрәгеҙ булмаһа, сөсө икмәк ашап тороғоҙ. Шәкәрле ризыҡты ныҡ ҡына кәметегеҙ. Бигерәк тә балаларға бирмәй тороғоҙ. Хатта шәкәр ҡушып бешерелгән печенье, кәнфиттәрҙән баш тартыу кәрәк. Сей кишер, сөгөлдөр, кәбеҫтә салаттары ашарға тырышығыҙ. Улар ошо татлы ризыҡтар арҡаһында барлыҡҡа килгән зыянлы ҡалдыҡтарҙы һеперәп сығара, ашҡаҙанды, эсәктәрҙе лайланан таҙарта.

Ит ризығын салаттар менән йәки күберәк һуған ҡушып ашағыҙ. Эсегеҙҙә ит оҙаҡ ятмаһын, ит күп ашаһағыҙ, физик эш эшләргә тырышығыҙ, ул тарҡалып сығып бөтә, эстә сереп ятмай. Ана шул сереп ятҡан ҡалдыҡтарҙа бар сирҙәр ҙә үрсей. Картуфты ла бик күп ашарға тырышмағыҙ. Картуф шулай уҡ эсәктәргә йәбешеп оҙаҡ ята, серей. Уны мейестә тәгәрәтеп ашағыҙ. Кәбеҫтә менән сөгөлдөр аштарына өҫтөнлөк бирегеҙ. Һуған салаты ашарға тырышығыҙ.

Көн дауамында сәй генә түгел, ҡайнаған һыуҙы ла күпләп эсергә тырышығыҙ. Бал, кипкән емештәр, үлән сәйҙәре, бутҡалар файҙалы.

Ҡыҫҡаһы, ашаған-эскән ризығыбыҙ тулыһынса теләһә ҡайһы вирусты һәләк итерлек һәм организмдың иммунитетын күтәрерлек булырға тейеш. Эсегеҙгә ҡурҡыу индермәгеҙ, тыныс булығыҙ, матур кинолар ҡарағыҙ, китап уҡығыҙ, музыка тыңлағыҙ. Ҡурҡыу кешене көсһеҙләндерә, теләһә ҡайһы дошман алдында бирешеүсән итә. Сәләмәт булығыҙ. Аллаһы Тәғәләбеҙ үҙенең ярлыҡауынан ҡалдырмаһын, был көндәрҙе юғалтыуһыҙ, иҫән-аман үтергә яҙһын.

**Зәүхиә ҠӘҘЕРБӘКОВА.**

АФАРИН!

**Март урталарында Сочи ҡалаһының "Дагомыс" һауыҡтырыу комплексы территорияһында "Халыҡ ынйылары" ("Народные истоки") Халыҡ-ара вокаль-хореографик милли мәҙәниәте һәм фольклоры фестиваль-конкурсы үтте. Бәйгелә Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе артистары - Рим Асҡаров менән Лилиә Зарипова ҡатнашты һәм маҡтаулы II дәрәжә лауреаты исеменә лайыҡ булды. Ошо уңайҙан Рим Асҡаров менән ҡыҫҡа ғына әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# БЕЙЕЙБЕҘ!



- Был бәйгелә 62 коллектив, шул иҫәптән 1600-ҙән ашыу кеше ҡатнашты, - тип һөйләп китте Рим Асҡаров. - Беҙ "Халыҡ хореографияһы. Профессионалдар" номинацияһында сығыш яһаныҡ. Конкурсҡа Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Риф Ғәбитов һалған "Зилалай" бейеүен алып барғайныҡ. Был хореографик композиция халыҡсан рухлы, шул уҡ ваҡытта ябайлығы менән күркәм. Шаян сюжетлы бейеү тортмә таҡмаҡтар менән үрелеп бара, кистәрен йыйылышып, дер һелкетеп бейегән йәштәр күҙ алдына баҫтырыла. Баһалама ағзаларының "Зилалай" бейеүен "Сәхнә образын сағыу һәм оҫта башҡарған өсөн" махсус приз менән билдәләп үтеүе беҙҙең шатлығыбыҙҙы икеләтә арттырҙы! Әлбиттә, фестиваль бик оҡшаны. Талантлы кешеләр менән танышып аралашыу, шулай уҡ оҫталыҡ дәрестәрендә абруйлы мәҙәниәт белгестәре менән эшләү тәжрибәбеҙҙе, белем һандығыбыҙҙы байытты, остаздарҙың хуплау һүҙҙәре күнелдәргә ҡанат ҡуйҙы.

▸ **Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең Бейеү театрын республикала ғына түгел, башҡа өлкәләрҙә лә яҡшы беләләр. Рим, һин баш балетмейстер ярҙамсыһы булараҡ, коллектив тормошо хаҡында һөйләп үтһәң ине.**

- Бөгөнгә көндә, Аллаға шөкөр, Бейеү театры гөрләп тора. Коллектив йәш көстәр менән тулыланды, егеттәрҡыҙҙар дәртләнеп эшләп йөрөй, билдәле балетмейстерҙар менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ - репертуар яңы бейеүҙәр менән тулыланып тора. Шулай уҡ республика кимәлендә үткән бөтә тамашаларҙа даими ҡатнашабыҙ, гастролдәр географияһы ла йылдан-йыл киңәйә бара. Эш графигының тығыҙ булыуына ҡарамаҫтан, төрлө кимәлдәге конкурстарҙа әүҙем ҡатнашырға тырышабыҙ. 2019 йылда ҡыҙҙарыбыҙ Ҡырғыҙстандың Ош ҡалаһында үткән "Turkey international dance competition" халыҡ-ара бейеү бәйгеһендә II урын яуланы.

Коллектив репертуарында халҡыбыҙҙың тарихына, ҡаһарман улдарына арналған бейеүҙәр бихисап, шулай уҡ донъя һәм Рәсәй халыҡтары бейеүҙәре лә уға үҙенсәлекле биҙәлеш индерә. Тамашасылар әзербайжан, чечен, лак, мари, сыуаш, татар бейеүҙәрен яратып ҡарай. 2018 йылдан Бейеү театрының баш балетмейстеры итеп коллективта 20 йылдан артыҡ эшләгән, тәжрибәле, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Эльвира Дауытова тәғәйенләнде. Ул ҡуйған "Торналар", "Ҡымыҙ бешеүселәр", "Агизел тулҡындары", "Беләҙек" хореографик композициялары репертуарҙан төшмәй.

СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ. ӘҘӘБИӘТ.

# БЕРГӘЛӘП - БАШҠОРТСА



**Интернет селтәрендә Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды проектының премьераһы булды.**

М.Аҡмулла исемендәге БДПУ булышлығында Башҡортостан Башлығының республика халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса грантына 10 видеосюжет төшөрөлгәне. "Беҙ "Бергәләп - башҡортса" сюжеттарының 10 сығарылышын интернетҡа һалдыҡ, улар яңы өйрәнә башлағандар һәм телде тәрәнерәк өйрәнергә йәки белемдәрен нығытырға теләгәндәр өсөн бик файҙалы", - тип һөйләне Гөлназ Йосопова. Сюжеттар киң аудиторияға иҫәпләнгән. Яңы цикл "Бергәләп - башҡортса" циклының логик дауамы булып тора, ләкин күберәк үсмерҙәр өсөн тәғәйенләнгән. "Үсмерҙәр - иң ҡатмарлы аудитория тип иҫәпләйем, уларға телде һәйбәт белеүҙән тыш, уны һаҡларға кәрәклеген аңлатыуы ауыр. Әгәр бала саҡта был яуаплылыҡ өлкәндәр иңендә ятһа, үсмерҙәр иһә үҙ донъяһында йәшәй. Ҡала үсмерҙәре донъяһында башҡорт теле кәрәкле, республикабыҙ Башлығы әйткәнсә, модала булһын ине", - ти проект авторы Зөһрә Бураҡаева. Сюжеттың төп геройҙары - Өфө үсмерҙәре Алмас, Айсулпан, Азалия һәм Юрматы бергәләп театрға, йәш рәссам Айтуар Райбаев оҫтаханаһына, Өфө фотографы Дим Толонғужинға, "Мәргән уксы" хәрәкәте етәксеһе Юлай Ғәлиуллинға бара, ә композитор Урал Иҙелбаевта ҡунаҡта үҙҙәренең рок төркөмөн ойошторорға тигән ҡарарға килә - төҙүгә йырҙарын яҙҙыра һәм клип төшөрә. Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының билдәле актеры Шаһит Хамматов менән бергә өноҡшаш һүҙҙәргә еңел генә өйрәнергә мөмкин. Сюжет өсөн махсус рәүештә "Бүреләр" рок төркөмө лидеры Илшат Абдуллин һәм Диләрә Иҙелбаева башҡарыуында йыр яҙҙырылды. Сюжеттарҙы аниме стилендә биҙәүсе - йәш башҡорт рәссамы Айназа Ҡараҡай. Шулай уҡ роликтар өҫтөндә режиссер, оператор һәм тауыш режиссеры Роман Пожидаев, инфографика режиссерҙары Таңсулпан Бураҡаева һәм Петр Карсагов эшләне.

# БАБИЧСА...

**Башҡортостанда Башҡорт теле йылына һәм күренекле башҡорт шағиры, дәүләт эшмәкәре Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған "Бабич варисҭары" асыҡ республика конкурс-семинары иғлан ителде. Был турала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының матбуғат хеҙмәте белдерҙе.**

Конкурстың маҡсаты һәм бурысы - башҡорт телендә шиғри әҫәрҙәр яҙған йәш талантТарҙы асыҡлау; киң ҡатлам уҡыусыларҙы нәфис һүҙгә ылыҡтырыу; ҡатнашыусыларға үҙҙәренең шиғырҙары менән халыҡ алдында сығыш яһау мөмкинлеге биреү; күренекле башҡорт шағиры Шәйехзада Бабичтың шиғри мираҫын пропагандалау; художестволы әҫәрҙәргә тасуири уҡыуға ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу. Конкурс ике этапта үткәрелә. Беренсе этап - ситтән тороп, унда теләгән һәр кем ҡатнашырға мөмкин. Бының өсөн үҙең ижад иткән шиғырыңды bashlitsp@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк. Беренсе этап йомғаҡтары буйынса жюри икенсе этап өсөн иң яҡшы 24 авторҙы һайлай, лайктар һанына ҡарап, тамашасылар һөйөүе призын алыусы билдәләнә. Конкурстың икенсе этабы Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында уҙғарыла. Әлеге турға үткәндәр сәхнәлә тамашасылар һәм жюри алдында сығыш яһай. Шулай уҡ семинар, оҫталыҡ дәрестәре була. Икенсе этап йомғаҡтары буйынса жюри призлы урындарҙы билдәләй. Конкурс еңеүселәренә һәм лауреаттарына ҡиммәтле бүләктәр һәм махсус дипломдар тапшырыла. Конкурсты ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһының Яҙыусылар союзы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты, "Башҡорт телен ҡәҙерләйек", "Бабич Шәйехзада Мөхәмәтзәкир улы" төркөмдәре. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шағир, сәйәси эшмәкәр Шәйехзада Мөхәмәтзәкир улы Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулыуҙы билдәләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Юбилей саралары 2020 йылда ойошторола.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕ АҠЫЛЫН ИШЕТ,

## үҙ аҡылың менән эш ит

Яу килә тип аҙыҡты бөтөрмә, ил кусә тип утыңды һүндермә.

**(Башҡорт халыҡ мәкәле).**

Ғаилә бәхетенә өлгәшеү өсөн түҙемлек кәрәк; түҙемһеҙҙәр иһә бәхетһеҙлекте үҙ итеүсән.

**(Джордж Сантаяна).**

Ысынлап та абруйлы булған кеше үҙ хаталарын таныуҙан ҡурҡмай.

**(Бертран Рассел).**

Ахмаҡ бер ниҙе лә ғәфү итмәй һәм онотмай; бер ҡатлылар барыһын да ғәфү итә һәм барыһын да онота; аҡыллылар ғәфү итә, әммә бер ниҙе лә онотмай.

**(Томас Сас).**

Эскән кешеләр ҙә йөҙ йәшкәсә йәшәй алырға мөмкин. Ләкин ундай тормоштоң кәрәге бармы?

**(Данил Рудый).**

Ир кеше тәүге үбешеүҙе йәшереп ала, икенсеһен теләнсәләй, өсөнсөһөн талап итә, дүртенсеһен һорамай ала, бишенсеһен ҡабул итә, артабанғыларына... түҙә.

**(Хелен Роуленд).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Суфый уҡытыусы һәр дәресендә бер риүәйәт һөйләй торған булған, әммә бер ваҡытта ла уларҙың мәғәнәһен аңлатмаған. "Хөрмәтле остазыбыҙ, - тип мөрәжәғәт иткән бер саҡ бер шәкерте, - һин беҙгә матур риүәйәттәр һөйләйһең, әммә уларҙың мәғәнәһен аңлатмайһың..." "Ғәфү үтенәм, - тигән Уҡытыусы. - Ғәйебемде аҡлау өсөн мин һинә хөрмә емеше менән һыйларға теләйем..." Шәкерт шатланып киткән һәм "Рәхмәт, Уҡытыусым", - тип яуаплаған. "Мин һиңә ашата торған хөрмәнең тышын үҙем таҙартып бирәйем", - тигән Уҡытыусы. Шәкерт быныһына ла шатланыуын белдергән. Уҡытыусының: "Теләйһеңме, ашауға уңайлы булһын өсөн мин хөрмәне ваҡ киҫәктәргә турап бирәм?" тиеүенә, шәкерт: "Мин улай һеҙҙең йомартлыҡтан файҙаланырға теләмәйем, Уҡытыусым", - тип уңайһыҙланыуын белдергән. "Юҡ, мин бит һиңә быны үҙем тәҡдим итәм. Һине шатландырғым килгәндән генә эшләйем быны. Теләйһеңме, мин һиңә ул хөрмәне сәйнәп тә бирәм?" - тигән тағы ла Уҡытыусы. "Юҡ, мин һинең быны эшләүеңде теләмәйем!" - тип ҡысҡырып ебәргән тамам аптырауға ҡалған шәкерт. Уҡытыусы бер аҙ тын ҡалып торған һәм: "Әгәр ҙә мин һеҙгә һөйләгән һәр бер риүәйәттең мәғәнәһен аңлатһам, емеште бына шулай сәйнәп биреүгә тиң булыр ине", - тигән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирҙәр:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 277/04